✓ *Ҡайһы саҡта етәксе поездан алда сапҡан кешегә оҡшап китә: барыһы ла уны поездың хәрәкәте менән идара итә, тип уйлай, ләкин етәксе бит шуны белә - туҡтаһа, поезд уны иҙеп китәсәк.*

*(Петр Таранов).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№27 (393)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йылдар дауамында...**

йөрәктә өлгөрөүе кәрәк был байрамдың



5

**Башҡорттарым, уҡыу кәрәк...**

һәм дә беҙгә аҡыл кәрәк



6-7

**Үҙебеҙҙең ысынбарлыҡ...**

Европа кҿҙлегенән асығыраҡ күренә



8-9

**Матурлыҡты ҡуллана белеүсене...**

модельер, тиҙәр



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәғариф өлкәһендә туктауһыҙ реформалар бара. Был беҙҙең балаларҙың белем кимәленә тәьҫир итәме?

***Камил ИЛЕМБӘТОВ, уҡытыусы, Хәйбулла районы:***

Реформаларһыҙ ҙа беҙҙең илдә белем биреү системаһы ярайһы юғары кимәлдә ине бит. Совет осоронда белем алған уҡыусыларҙан күпме талантлы ғалимдар, юғары квалификациялы белгестәр үҫеп сыҡты. Үкенескә күрә, уларҙың күптәре үҙҙәренең аҡыл һәм белем кимәленә ҡулланыу даирәһен сит илдәрҙә тапты, сөнки беҙҙең белгестәр унда һәр саҡ кәрәк булды һәм юғары баһаланды. Ә хәҙер беҙ, реформа, тигән булып, үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында Америка үҙенең мәғариф өлкәһендә нимә эшләгән - шуны ҡабатлап маташабыҙ. Был, әлбиттә, алға китеш, яңырыу этабы түгел. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында ғына әле, бер төркөм уҡыусы балалар менән Төркиәлә булырға тура килгәйне. Унда төрлө илдәрҙән йыйылған уҡыусыларҙың белем кимәленә рейтинг үткәрелде. Хәтерләйем: беренсе урынды Ҡаҙағстандан килгән ҡыҙыҡай алһа, икенсенән алып унынсыға тиклем урындарҙы Башҡортостан балалары яулағайны. Ошо үҙе генә лә беҙҙең мәғариф системаһының төплөлөгөнә бер ишара ине. Ә хәҙер мин бындай һөҙөмтәле эш күрмәйем.

***Рәйсә АТАНОВА, Баймаҡ районы Ишбирҙе урта мәктәбе директоры:***

Күпселектең фекере шундай: Берҙәм дәүләт имтиханлары киләсәктә юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә теләүселәр өсөн генә үткәрелһә, яҡшыраҡ, маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр ине. Ҡалғандар имтихандарҙы традицион формала тапшырһын ине. Ни тиһәң дә, имтихандарҙың тест рәүеше уҡыусының аналитик фекер йөрөтөү һәләтен асып бирә алмай. Унан һуң, матбуғатта асыҡтан-асыҡ хәбәр ителеүенсә, БДИ коррупцияға, ришүәтселеккә лә киң юл аса. Әлбиттә, мәғариф өлкәһендәге реформаларҙың ыңғай яҡтары ла күп. Мәҫәлән, "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә яңы мәктәптәр төҙөлә, унда балаларға бөтә шарттар тыуҙырыла, күрше ауылдарға йөрөп уҡыусылар автобус менән тәьмин ителә; алдынғы уҡытыусыларға һәм мәктәптәргә махсус гранттар бирелә.

***Гөлсинә СМАКОВА, Шишмә районы, ата-әсә:***

Реформа, тип, бәләкәй ауылдарҙа мәктәптәрҙе ябып бөтөп баралар. Мәктәп ябылғас, ауыл да бөтә, тигән һүҙ. Күрше ауыл мәктәбенә ыҙаланып йөрөп уҡыған баланың белем кимәле тураһында ниндәй һүҙ йөрөтөргә була! Бәлки, уҡытыусылар өсөн яҡшылыр ул реформалар. Хәҙер уларҙы күберәк "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы, гранттар ҡыҙыҡтыра һымаҡ тойолоп китә ҡайһы саҡта. Мин, мәҫәлән, үҙемдең балам уҡыған мәктәптә үҙ эшенең ысын оҫтаһы булған энтузиаст уҡытыусыларҙы күрмәйем.

***Зөһрә ӘХМӘҘИЕВА, Әбйәлил районы Рәхмәт урта мәктәбе директоры:***

Реформалар арҡаһында беҙ хәҙер хатта бәләкәй генә ауыл мәктәптәрендә лә яңы технологиялар нигеҙендә уҡытабыҙ. Һәр мәктәптә тип әйтерлек компьютер, интернеттың булыуы ҙур донъяға, цивилизацияға юл аса бит. Тимәк, реформаларҙың барыбер ҙә ыңғай яҡтары бар. Йән башына финанслау системаһын да әрләүселәр күп, ләкин ул ҙур мәктәптәр өсөн яңы мөмкинлектәр аса, бигерәк тә уҡытыусыларға эш хаҡы мәсьәләһендә ҙур стимул буласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

# МИЛЛӘТЕГЕҘҘЕ БЕЛМӘЙҺЕГЕҘМЕ?

## Аяҡ кейемегеҙҙе ҡарағыҙ...

**Яңыраҡ үҙемә ҡыҙыҡ ҡына бер асыш яһаным: теге йәки был ерҙә йәшәүсе ерле, аҫаба халыҡ вәкилдәренең аяҡ кейеме үксәһенән башлап туҙа икән. Бына һиңә кәрәкһә...**

Иң тәүҙә был фекергә үҙемдең аяҡ кейеме ни рәүешле туҙыуына ҡарап килдем. Ниндәй генә модалы, ҡайһы ғына илдә етештерелгән аяҡ кейеме алып кейһәм дә, иң тәүҙә уларҙың үксәһе туҙа башлауына иғтибар иттем. Шулай йөрөй торғас, бер нисә милләттәшемдең дә аяҡ кейеме тап шул рәүешле туҙыуына шаһит булғас, башҡа милләт вәкилдәренең аяғына күҙ һала башланым. Ҡала урамында бихисап аяҡтарға, уларҙағы аяҡ кейемдәренә күҙ һалып йөрөй торғас, шуны ла билдәләнем: беҙҙекеләр үксәгә самаһыҙ нык баҫып, башҡалар күберәген табандың башҡа өлөштәренә көс төшөрөп һәлпәндәй, имеш. Тимәк, аҫабалыҡ хисе, йәғни ерҙе тойоу тойғоһо әҙәм балаһының холҡона, хатта атлап йөрөшөнә лә күсә икән дә. Психологтар был хәлде "терһәк тойғоһо", философтар "ер тойғоһо" тип аңлата.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Быйыл көҙ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһы үтәсәк. Беҙҙең республикала, бигерәк тә ҡалаларҙа һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йәшәүсе ҡайһы берәүҙәр һаман да үҙҙәренең ниндәй милләт вәкиле икәнен билдәләй алмай. Ҡайһы берәүҙәрҙең шәжәрәләре буйынса тамырҙары иҫбат ителһә лә, рухтарынан тайпылғандар үҙҙәренең был халәтен танырға теләмәй. Мин ундайҙарға крәҫтиәнсә бик ябай ысул тәҡдим итәм: аяҡ кейемегеҙҙе һалып ҡарағыҙ - һеҙҙең милләтегеҙ табанығыҙға яҙылған...**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**



"Салауат йыйыны батыры" бәйгеһендә ҡатнашыусы Илшат Хәбибуллин (Ғафури районы).

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# КРЕДИТ ИҪӘБЕНӘ - ЮҒАРЫ БЕЛЕМ

**Рәсәйлеләр түләүҙә юғары белем алып, аҙаҡ уның өсөн түләү хоҡуғына эйә. Бындай мөмкинлек РФ Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан үткәрелгән мәғариф кредиттары биреүгә ярҙам буйынса дәүләт тәжрибәһе сиктәрендә барлыҡҡа килде. Был тәжрибә бөтә ил буйынса 2007 йылда башланды һәм 2010 йылға тамамланырға тейеш ине, ләкин быйыл уны тағы ла өс йылға - 2013 йылға тиклем оҙайтырға ҡарар ителде.**

БР Милли банкының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, мәғариф кредиты менән файҙаланыуҙың ташламалы осороно вузда уҡыу ваҡыты һәм тағы ла өс ай иңә. Түгеге йыл уҡыу осоронда студент шуға ярашлы 40 һәм 60 процент тәшкил итеүсе процент ставкаһы өлөшөн генә түләй, ә вузды тамамлағандан һуң ул кредит бурысын 10 йыл эсендә ҡайтарып бөтөрә ала.

Әлеге ваҡытта кредит буйынса ставка йылына 5 проценттан да артыҡ булырға тейеш түгел. Кредитты матди тәьмин итеү һәм заемсынан поручителлек кәрәкмәй: дәүләт өҫтәмә финанслауҙың 3/4 ставкаһына кредиторҙың ғәмәлдәге процент ставкаһын субсидиялаясаҡ. Бынан тыш, банктар өҫтәмә түләүҙәр һалырға тейеш түгел, ә кредитты ваҡытынан алда штраф түләүҙәрһеҙ ҡайтарырға мөмкин.

Ярайһы уҡ ылыҡтырғыс шарттар, тик, үкенескә ҡаршы, был мөмкинлектәрҙән бөтә вуздарҙың студенттары ла файҙалана алмай, ә ошо тәжрибәлә ҡатнашыусы уҡыу йорттарында белем алыусылар өсөн генә ул. Уҡыу йорттарын конкурс буйынса һайлап алыу йыл һайын үткәрелә, дәүләт аккредитацияһының булыуы бында төп шарт иҫәпләнә. Мәғариф буйынса федераль агентлыҡтың эксперт комиссияһы 2010-2011 уҡыу йылына ил буйынса бөтәһе 56 юғары уҡыу йортона ошондай мөмкинлектән файҙаланыуға рөхсәт бирҙе. Шуларҙың өсәүһе Башҡортостан уҡыу йорттары: Өфө дәүләт авиация техник университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты һәм Өфө дәүләт иктисад һәм сервис академияһы. Рәсәй Хөкүмәте ҡарарында әлеге тәжрибәгә ҡағылышлы ташламалы кредитҡа иҫәп тота алған специалистар исемлеге бирелә. Был төр белемдәргә эйә булған белгестәр хеҙмәт баҙарында һорау менән файҙаланырға тейеш.

Заемға иҫәп тотоусының йәше - 14 йәштән алып. Кредитҡа заявка фәҡәт имтихандарҙы уңышлы тапшырып, вузға уҡырға алынғандан һуң ғына ҡабул ителә. Түләү нигеҙендә уҡып йөрөүселәр, өлгәш кимәлдәре юғары булған хәлдә, шулай уҡ кредитҡа уҡыу формаһына күсә ала. Быйылдан алып дәүләт ярҙамына түләүгә тапҡыр юғары белем алыусы һәм көндөҙгө бүлектә уҡыусы студенттар иҫәп тота ала.

**Әлфиә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**
**"БашвестЪ".**

*МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ*

# ГӘЗИТ УҠЫМАҒАН...

## ете юл сатында ярҙамһыҙ ҡалған

**Шул тиклем дә мөһим бурыс атҡарабыҙ һымаҡ: тормошобоҙҙан, төрлө осрашыуҙарҙан, тарих төпкөлөнән, тәрән аҡыллы кешеләрҙән иң мөһим һүҙҙәр, фекерҙәр, фактарҙы һайлап ҡына, тиреп кенә алып, һандан-һанға уҡыусыларыбыҙға еткерәбеҙ. Беҙ ташҡа баҫҡан был һүҙҙәр ысынбарлыҡҡа, донъяға күҙҙәрҙе асһын, аңды уятһын, рухты күтәрһен, сәмләндереп, илһамландырып, күккә күтәреп ебәрһен халҡыбыҙҙы, тибеҙ. Тик... кәрәкле мәғлүмәттәргә күҙ-ҡолаҡ та, күңел дә ябыҡ икән шул әле күптәрҙә...**

Быйылғы икенсе ярты йыллыҡҡа гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланып, уның һөҙөмтәләрен ҡулға алғас, аптырауҙан ултыра төшөлдө лә, күңелдә милләттәштәрҙең битарафлығы өсөн әсенеү тойғоһо биләп алды. Әйе, тап шулай: ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙ, һәр ваҡыттағыса, икенсе ярты йыллыҡҡа яҙылыуҙы оҙайтырға онотҡан, йә почта бүлексәһенә инеп сығырға ваҡыт таппаған. Онотмағыҙ, ваҡыт табығыҙ, тип, һәр һанда иҫкәртеп тә торғайныҡ инде. Бер-беребеҙҙе ишетмәй китәбеҙ - шуныһы йәл.

Дуҫлыҡҡа тоғро ҡалған уҡыусыларыбыҙ араһында беҙҙең менән бергә әсенеүселәр, көйөнөүселәр барлығын беләбеҙ. Уларға өндәшәбеҙ: гәзиткә яҙылырға оноҡандарға еткерегеҙсәле: 15 июлгә саҡлы яҙылһалар, гәзитебеҙҙе августан алдыра башлаясаҡтар. Был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырһалар, йыл аҙағына тиклем "Киске Өфө"һөҙ йәшәйәсәктәр. Тимәк, бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр барып етмәйәсәк, бик күп һорауҙары яуапһыҙ ҡаласаҡ. Әбит ул мәғлүмәттәрҙең яҙмышың хәл ителгәндә, ете юл сатында аптырап ҡалғанда кәрәк булыуы ла ихтимал. Матбуғат баҫмаһы һүҙенең ошо әһәмиәтен һаман аңлап етмәйбеҙ...

Тоғролоҡ, тигәндән. Тоғро уҡыусыларыбыҙ, тоғро дуҫтарыбыҙ булыуы эшләгән эшебеҙҙе тағы ла һөҙөмтәлерәк, ҡыҙыҡлыраҡ, файҙалыраҡ итеүгә этәргес бирә барыбер ҙә. Бына әле лә беҙ иғлан иткән "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарына, ата-әсәһенә, мәсеттәргә, таныштарына гәзит яҙҙырып, беҙҙе лә, уҡыусыларҙы ла шатландырыусылар байтаҡ булды. Эшҡыуар Фәниә Йәнбирҙина һәр ваҡыттағыса Бөрйән һәм Ишембай районындағы туғандарына, шулай уҡ һуғыш ветерандарына 35 дана "Киске Өфө" яҙҙырып бүләк итте. "Башбланкиздат" асыҡ акционерҙар йәмғиәте етәксеһе Гөлсәсәк Әлибаева - 20 дана, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы директоры Рәйлә Фәсхетдинова - 12, "Стройтрейдинг" компанияһы директоры Илшат Аҫылғужин - 14, "Салют" санаторийы директоры Нәилә Усманова 14 дана "Киске Өфө" яҙҙырып, туғандарын, таныштарын шатландырҙы. Акциябыҙҙан дуҫтарыбыҙ Рәүеф Әлмөхәмәтов, Маргарита Түләбаева, Лилиә Ғүмәрова, Зөлфиә Ғирфанова, Раян Шаһимөхәмәтов, Мәхмүҙә Ғәйнуллина, Рәшиҙә Солтанова, Г. Кунафина, Салауат Дилмөхәмәтов, Миҙхәт Мәмбәтов, Хәлим Әюпов, Айнур Танатов, Барый Салауатов, Динир Хәсәнов, Тимур Мөхтәров, Р. Шакирова, Рәйлә Сабитова, Гөлнара Ғүмәрова ла ситтә ҡалманы. Рәхмәт уларға битарафлыҡты иш итмәгәндәре, һәр аҙымы, һәр эше менән дә "Халҡыма хеҙмәт итәм!" тип йәшәгәне өсөн.

**Эйе, халҡыбыҙға хеҙмәт итеү - йәшәйешебеҙҙең бер мөһим бурысылыр. Был бурыс башҡарған эштәрендә һөҙөмтәле итә, тормоштағы бөтөн башҡа бурыстарыңа мәғәнә, йүнәлеш бирә. Бурыс атҡарып йәшәйек донъяла. Туған телдәге гәзитте яҙҙырып уҡыу ҙа - шул уҡ бәләкәй генә бер бурыс атҡарыу икәнен онотмайыҡ.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**



**Бәләбәй районының башҡорт теле уҡытыусылары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Швейцария Конфедерацияһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Вальтер Гигер менән эшлекле эш осрашыуы үткәрҙе. Унда иктисад, мәҙәниәт, ғилми хеҙмәттәшлек өлкәһендә Башҡортостан менән Швейцария араһындағы ике яҡлы бәйләнештәрҙе артабан үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды. 2010 йылдың дүрт айында беҙҙең республика менән Швейцария араһындағы сауҙа әйләнеше, мәғәлән, 2252,4 мең АҠШ доллары тәшкил иткән. Республикаға был илдән башлыса машиналар эшләү продукцияһы, металл изделиелар импортлана, ә Швейцарияға химия продукттары сығарыла.

✓Хөкүмәт йортонда 2009 йыл өсөн Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы тапшырылды. Тантанала БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев, уның урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты. Был юлы премия Милли йәштәр театры артисы Андрей Ганичевка, скульптор Руслан Ниғмәтуллинға, Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатын үҙгәртеп ҡороу проекты өсөн "Башкиргражданпроект" институтының йәш архитекторҙары Рөстәм Ямалетдинов менән Павел Мазинға бирелде.

✓Республика вуздарында ҡабул итеү комиссиялары эшләй башланы. Мәктәп тамамлаусыларға 12 дәүләт һәм 4 дәүләткә ҡарамаған юғары профессиональ белем биреү учреждениеһы үҙ ишектәрен асты. Абитуриенттар ғаризаларын һәм кәрәкле документтарын 25 июлгә тиклем тапшыра ала. Почта элемтәһе хеҙмәте менән файҙаланыусыларға документтарын 10 июлгә тиклем ебәреп өлгөрөргә кәрәк. Быйыл да юғары уҡыу йортона БДИ һөҙөмтәләре буйынса ҡабул итеү ойошторола.

✓Урман янғыны хәүефе арҡаһында Башҡортостандың ун районында - Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Ишембай, Күгәрсен, Учалы һәм Хәйбулла райондарында ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелә. БР Ауыл хужалығы министрлығына бөтөн көстө янғын һүндереүгә туплаарға, урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итергә, урман ситтәрен һөрөп сығыуҙы ойошторорға ҡушылды. Республикала урмандарҙы һауанан тикшереү ойошторолған. Республикала быйыл 189 янғын осрағы теркәлгән, шуларҙың һигеҙе ҙур янғын иҫәпләнә. Зыян күргән майҙан 3545 га тәшкил итә.

**✓ Америка йоғонтоһо илебеҙгә генә түгел, телебеҙгә, кейемебеҙгә, йәшәйешебеҙгә үтеп инде. Белем биреү өлкәһендә лә беҙ хәҙер сит ил стандарттарына яраҡлашабыҙ. Уларҙың системаһына өҫтөнлөк бирәбеҙ.**

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ШПИОНДАРЫБЫҘ ТОТОЛДО,

## йәки Кем ҡайҙа олтан, ә ҡайҙа солтан?

**Ҡот осҡос хәл, йәмәғәт! Америкала беҙҙекеләргә тотҡандар! Бер нисә сәғәт эсендә беҙҙең шпио... әй, разведчиктарҙың селтәрен юҡ иткәндәр. Беҙҙең АҠШ-тағы "Зорге"ларҙы һәм "Штирлиц"тарҙы (тағы ниндәй легендар разведчиктар бар әле?) ҡулға алғандар. Дошмандың тылында боҫоп, йәшерен һәм изге (әлбиттә, изге - улар бит Рәсәй мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан) эштәрен башҡарып йөрөгән әллә ун, әллә ун бер кешебеҙ бөгөн Америка төрмәләрендә ыҙалай.**

Нисәмә йыл буйына улар беҙгә төрлө каналдар аша йәшерен мәғлүмәт оҙатып, илебеҙ файҙаһына эшләгәндәрҙер - уныһы билдәһеҙ. Бәлки, уларҙың башҡа бурыстары ла булғандыр. Мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттарының иҡтисадын емереү, йәки был илде иҡтисади һәм финанс көрсөккә алып барып еткереү - быныһы ла беҙҙең өсөн ҡараңғы.

Үткән аҙнала улар тотолдо. Америкалылар ошо урында ҡыуанып "Ниһайәт!" тип әйтер ине. Беҙҙекеләр улайтып әйтә алмай. Әйткәндәй, беҙҙекеләр (Рәсәйҙең рәсми органдары, тимәксемен) тәүҙә бик ҡыҙыҡ ҡыланды. Бер нәмә лә булмаған һымаҡ, уларҙан, йәғни разведчиктарҙан, баш тартып маташтылар. Йәнәһе, кәбеҫтәне кем ашағандыр, әммә кәзә минеке түгел. Бер нисә көн үткәс, теш араһынан ғына Америкала ҡулға алынғандарҙың Рәсәй граждандары икәнлеген танырға мәжбүр булдылар.

Бына улар, бөгөнгө көн геройҙары - Ричард һәм Синтия Мерфи, Вики Пелаез һәм Хуан Лазаро, Анна Чэпмен, Майкл Зоттоли, Патриша Миллз һәм Михаил Семенко, Дональд Говард Хитфилд һәм Трейси Ли-Энн Фоли. Тағы ла бәрәүҙәре ҡайҙалыр ҡасып йөрөй. Урыҫ исемдәре күренмәй, тиерлек бит, тип аптырарһығыҙ, моғайын. Мин дә ғәжәпләнәм.

Шуныһы ла ғәжәп, "рус шпиондарын" ҡулға алыу Рәсәй Президенты Дмитрий Анатольевич Медведевтың Америка Ҡушма Штаттарына рәсми визит менән барыуына тулыһынса тиерлек тап килде. Йәғни, башлығыбыҙҙың Америка һәм Обама менән хушлашыуы булды, ФБР һәм ЦРУ разведчиктарыбыҙҙы ҡулға ла алды. Әллә инде Америка етәкселеге Рәсәйҙе бер ҡулы менән һыйпап (йәғни, Президентыбыҙҙы кафеға алып барып, гамбургер ашатып, татлы һыу эсереп) күңелде күрә, ике дәүләт араһындағы мөнәсәбәттәрҙең яҡшырыуы хаҡында һөйләргә мөмкинлек бирә, ә икенсе ҡулы менән тукмап (йәғни, әлеге лә баяғы "шпион" селтәрен асыҡлап) беҙҙе... үҙ урыныбыҙға ҡуя. Йәнәһе, Рәсәй бер ҙә үҙгәрмәгән, элеккесә, Советтар Союзы заманындағы кеүек, яуыз, аҫтыртын эштәр башҡарған, башҡа илдәргә һәм айырыуса Америка Ҡушма Штаттарына "дошмандарса" ҡараған бер ил булып ҡалған.

Әйтергә кәрәк, илебеҙ етәкселеге Америка Ҡушма Штаттарында "рус шпиондары" селтәре асыҡланыуға, күрһәтергә теләмәһә лә, битараф ҡала алманы. Был оло-оло түрәләрҙең белдереүендә асыҡтан-асыҡ күренеп тора ине. Беренселәрҙән булып Рәсәй Премьер-министры Владимир Владимирович Путин үҙенең тос һүҙен әйтте. АҠШ-тың элекке президенты Билл Клинтон менән осрашҡанда ул, "Һин, Билл, Мәскәүгә иң кәрәк ваҡытта килеп еттең, һеҙҙә полиция шаша башланы, кешеләрҙе төрмәләргә ултырталар", - тип ярым шаярып тәбрикләне. Ә Рәсәй сит эштәре министры Сергей Лавров та "америкалылар был шау-шыуҙы айырым оҫталыҡ менән ойошторҙо", тип аптырап ҡуйҙы. Күп ваҡыт та үтмәне, беҙҙекеләр бер тауыштан был ҡаңғырыҡ ике дәүләт араһындағы йылына һәм йомшара барған мөнәсәбәттәрҙең ҡабаттан насарайыуына килтермәҫ, тип ышаныс белдерҙе. Шуның менән вәссәләм.

Хәҙер ни эшләйбеҙ, йәмәғәт? Ошоға түҙеп ултырабыҙмы? Ниҙер ҡылырға, ниндәйҙер аҙымдар яһарға кәрәктер бит? Әйтергә кәрәк, Советтар Союзы заманында бындайыраҡ хәлдәр йыш ҡына булып торҙо. Америкалыларҙы, инглиздәрҙе шунда, беҙҙең берәй илсене йәки илселек вәкилен йәшерен эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүҙә ғәйепләп ҡулға алһа, йә булмаһа, илдән ҡыуып сығарһа, беҙҙекеләр шунда уҡ тегеләрҙең бер нисә шпионын таба һалып, арттарына тибә торғайны. Ә хәҙер? Шыпшым, тып-тыныс. Тимәк, беҙҙә уларҙың шпиондары юҡ булып сығамы? Әллә улар шул тиклем ныҡ боҫҡандар, шул тиклем оҫта йәшеренгәндәр, хатта, кем бәрәү әйтмешләй, "көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә" табырлыҡ түгелме? Әллә илебеҙҙең именлек хеҙмәте (йәғни, ФСБ) сит ил шпиондарын вис кенә тотоп бөтөргәнме? Әллә...

Башҡа ҡурҡыныс уйҙар килә. Бәлки, АҠШ-тың беҙҙең илдәге шпиондары бик юғарыға менеп ултырғандыр, уларҙы ҡулға алыу түгел, яҡынларлыҡ түгелдер, ә? Бәлки, беҙ күптән инде бөтәбеҙ ҙә Америка шпиондарына әүерелгәнбеҙҙер? Эй, йәмәғәт, тирә-яғығыҙға ҡарағыҙ әле. Кругом шпиондар бит. Кинотеатрҙарҙа һәм телеэкрандарҙа бары тик сит ил фильмдары. Магазиндарға инһәң, сит ил тауарҙары, сит ил ризыҡтары. Әйтәйек, Дмитрий Анатольевичка гамбургер ашап, кока-кола эсер өсөн Америкаға барыу мотлаҡ түгел ине. Ул был "ашамлыҡ"тар менән беҙҙә лә туҡлана ала. Мәскәүҙә сират булһа, әйҙә, беҙгә килһен. "Макдональдс"тар аҙым һайын. Һәр бер Рәсәй кешеһенең аҡса янсығында йәки банк иҫәбендә Америка Ҡушма Штаттарының аҡсаһы бар. Ҡайһы берәүҙәрҙә ул күп - миллионлаған доллар. Икенселәрҙә берикәү генә. Америка йоғонтоһо илебеҙгә генә түгел, телебеҙгә, кейемебеҙгә, йәшәйешебеҙгә үтеп инде. Хәҙер беҙҙә "супермаркет"тар, "бутик"тар, "отель"дәр уратып алған. Урамдарыбыҙҙа - "тойота", "мицубиси", "додж" һәм "ниссан"дар. Өҫтөбөҙҙә, "дольчегаббано" менән "армани". Ҡулдарыбыҙҙа "ноутбук" йәки "кейс".

Улай ғына ла түгел, белем биреү өлкәһендә лә беҙ хәҙер сит ил стандарттарына яраҡлашабыҙ. Уларҙың системаһына өҫтөнлөк бирәбеҙ. Ә ҡайһы берәүҙәр хатта балаларын тик сит илдәрҙә таба, үҫтерә һәм уҡыта. Беҙ күптән инде сит илдәргә ҡасып китеп бөтөр инек, тик күптәрҙең быға хәле һәм әмәле генә юҡ. Беҙ, йәмәғәт, барыбыҙ ҙа сит ил разведкаһы агенттары. Беҙ барыбыҙ ҙа - "шпион"дар. Беҙҙе ФСБ, бик теләһә лә, ҡулға алып төрмәләргә ултыртып бөтә алмай. Бер генә юл бар - Рәсәйҙә дәүләт сиге буйлап сәнскеле тимерсыбыҡ менән уратып алырға һәм илде тотошлайы менән ҙур бер "зона" тип иғлан итергә. Ситтән себен дә осоп инә алмаһын. Ситкә күбәләк тә осоп сыҡмаһын. Башҡа сара ҡалманы.

Ул юл менән барып ҡараныҡ, тиһегеҙме? Ҡабаттан "тимер шаршау" артында боҫоп ултырғы килмәй, тимәксеһегеҙме? Улай булғас, ни эшләргә һуң?

Илебеҙ һуңғы 80-90 йыл Америка артынан ҡыуа. Хрущев заманында "Ҡыуып етергә һәм уҙып китергә!" тигән лозунгылар ҙа булғайны. Беҙ уларҙы ваҡытында ҡоралланыу буйынса ла үтеп ҡарарға маташтыҡ. Килеп сыҡманы. Ҡоралланыуын ҡоралландыҡ ул. Әммә мәғәнәһеҙ булды. Әле бына үҙебеҙҙә Мәскәү эргәһендә генә Сколково тигән ҡалала Америка Ҡушма Штаттарының Силикон үҙәне һымағыраҡ инновация үҙәге төҙөргә маташабыҙ. Тағы ла Америка артынан ҡыуасаҡбыҙ. Ә был уҙышыу кәрәкме һуң беҙгә? Беҙ бит (АҠШ менән Рәсәй Федерацияһын күҙҙә тотам) был донъяның иң ҙур ике дәүләте тип һаналһаҡ та, беҙҙең илебеҙ Американан, Көнбайыш Европа илдәренән бик күп йүнәлештәрҙә күптән инде ун-егерме йылға ғына түгел, кәмендә 80-90 йылға артта ҡалған. СССР тигән бөйөк дәүләттән Рәсәйгә вариҫ булып саманан тыш маһайыу, унлыһуллы йөҙрөҡ төйөү, кәперенеү, маҡтаныу, шапырыныу, күкрәк киреү, әтәсләнеү генә тороп ҡалды бит. Бәлки, илебеҙгә тәүҙә үҙ урынын белеп кенә, ҡойроғон ҡыҫып ҡына, башын баҫып ҡына, көс йыйырға, ҡеүәт туплаға, байырға, артырға кәрәктер? Тәүҙә белдекле, аҡыллы, уйлы, фекерле, дәртле, маҡсатлы кешеләргә эшләргә мөмкинлек бирергә кәрәктер. Сит илгә шпиондар оҙатыу урынына... Ә, йәмәғәт, нисек уйлайһығыҙ?

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ӘКИӘТТӘ ЛӘ АЛДАЙҘАР,

### тормошта ла...

Ейәнсәремә рус халҡының "Колобок" тигән әкиәтен башҡорт теленә "Күмәс" тип ауҙара-ауҙара уҡып ултырам. Бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ ул әкиәтте. Иҫегеҙҙәлер, бабайы бик инәлеп һорағас, әбейе ҡырып-һепереп йыйған һуңғы ононан әүәләп, күмәс бешерә лә, тәҙрә төбөнә һыуытырға ҡуя. Йомро күмәс тәҙрә төбөнән тәгәрәп төшә лә, урамдағы юлдан тәгәрәй башлай. Кемде генә осратмай күмәс юлында, "Мин әбейҙән дә, бабайҙан да киттем, һоро бүренән дә ҡастым", - тип йырлай-йырлай юлын дауам итә. Тик бер мәл хәйләкәр төлкөнөң ауыҙына барып эләгә. Әл дә күмәстең төлкөгә барып еткән урынында ейәнсәрем йоҡоға талғайны ул. Юҡһа, күмәсте йәлләп, ҡыҫҡырып илар ине...

Был әкиәт минең үҙемә бөгөнгө әбей-бабайҙарҙың тормошон да хәтерләтеп ҡуйҙы әле. Минең күршем: "Бына тоҙом бөтө, бына оном бөтә", - тип таҡмаҡлай ҙа йөрөй. Ысынлап та, ай һайын килеп торған пенсия аҡсаһын һаҡсыл ғына тотоноп, бер аҙын ҡалдырып, һалҡын ҡышҡа йылы ғына берәй аяҡ кейеме һатып алайым әле, тип хыялланған булаһың. Тик магазинға сыҡһаң, хаҡтарҙың тағы ла күтәрелеп китеүен күреп, әле тағы ла йыйырға кәрәк икән, тип, тиндәреңде һанай башлайһың, сабыр итәһең... Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы барышын ҡарап, бөтә сығыштарҙы тыңлап барҙым да: "Ярай, әбей-бабайҙар - бер хәл, ә тотош Башҡорт иленән ҡырып-һепереп йыйған аҡсалар тәгәрәй-тәгәрәй кемдең кеҫәһенә барып эләгә икән?" - тип тә уйландым әле. Әкиәттә лә - алдыҡ һәм мәкер. Тормошта ла - алдыҡ һәм мәкер...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ат спорты буйынса XVIII ауыл спорт уйындары республика ярыштарының финал өлөшө тамамланды. Район һәм ҡала хакимиәттәре араһында тағы ла Дүртөйлө районы командаһына етеүсе табылманы. Икенсе урынға Туймазы, өсөнсө урынға Баймаҡ районы сыҡты. Ауыл райондары араһынан беренсе урынға Шишмә, икенсе урынға - Кушнаренко, өсөнсө урынға Әлшәй райондары командалары лайыҡ булды.

✓БР Милли банкы Халыҡ-ара пластик карталар менән ҡулланыусыларҙы интернет-мутлыҡ тураһында иҫкәртә. Ниндәйҙер мифик "РФ Милли банкы эргәһендәге банк эштәре буйынса федераль идаралыҡ" Футбол буйынса донъя чемпионатына арналған акция иғлан иткән, имеш. Карталар хужаларына электрон почта аша www.russian-card.ru сайтында теркәлергә, анкета тултырырға һәм 10 мең һумлыҡ ҡиммәтле приз, шул иҫәптән "Ford Focus 3" автомобиле, Урта диңгеҙгә путевка отошонда уйнарға тәҡдим ителә. Аферистар акцияны Рәсәйҙең Үҙәк банкы финанслай, тип билдәләй. Милли банктан хәбәр итеүҙәренсә, был халыҡты сираттағы алдау һәм Рәсәйҙең Үҙәк банкының быға бер ҡыҫылышы ла юҡ.

✓БР Хөкүмәте эргәһендәге миграция сәйәсәте буйынса Ведомство-ара комиссияла сит ил эшселәренә альтернатива табып, шуның менән төбәктәге граждандарҙы эшкә урынлаштырыу мәсьәләһен хәл итеп була, тип иҫәпләйҙәр. Был бурысты хәл итеүҙең иң һөҙөмтәле юлы - эшкә урынлашыусыларға өҫтәмә белем биреү һәм уларҙы яңы һөнәргә уҡытыу. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының Халыҡты эшкә урынлаштырыу буйынса дәүләт хеҙмәте идаралығы начальнигы Тимерхан Биккинин әйтеүенсә, Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса теркәлгән 8,5 мең тирәһе кеше яңы һөнәргә уҡытылған.Уларҙың күбеһе штукатур, маляр, ташсы, бетонсы, арматурсы, балта оҫтаһы кеүек төҙөлөш һөнәрҙәрен үҙләштергән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, республикала сил ил эшсе көсләренә ихтыяж ҡала. Мәҫәлән, 2011 йылға 561 эш биреүсе 22,1 мең сит ил эшсеһенә заявка биргән. Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы начальнигы Борис Ғөзәйеров әйтеүенсә, эш биреүселәрҙең был заявкалары ентекле тикшерелгән һәм кемдәренендер заявкаһы нигеҙһеҙ булыуы сәбәпле, кире ҡайтарылған.

ФИНАНС ӘЛИФБАҺЫ

# ИҪКЕҺЕН - ЯҢЫҺЫНА

**Ун йылдан артыҡ ҡулланылышта булған автомобиль өсөн 50 мең һум аҡса алып, яңыһын һатып алырға теләүселәрҙең күп булыуы сәбәпле, 2010 йылдың 1 ноябренә тиклем дауам итергә тейешле программа ваҡытынан алда тамамланды. Был программа ярҙамында машина яңыртырға өлгөрмәүселәр өсөн иҫке автомобилдәрҙе утилләштереү дәүләт программаһының икенсе этабы старт алды. Ул йыл аҙағына тиклем дауам итәсәк.**

БР Сәнәғәт һәм тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығы белгестәре белдереүенсә, программаның тәүге этабы буйынса аныҡ һандар әлегә билдәле түгел. Марттан май айына тиклем Башҡортостан территорияһында утилләштереү тураһында 7 мең 234 танытма бирелгән, 2 мең 666 яңы автомашина һатылған, 3 мең 945 иҫке машина утилләштерелгән. Бигерәк тә төбәктең эре ҡалаларында - Өфө һәм Стәрлетамаҡта был эш әүҙем барған.

Рәсәйҙең Сәнәғәт сауҙаһы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, һатылған автомобилдәр исемлегендә беренсе урында "АвтоВАЗ" продукцияһы тора (200 мең сертификаттың 161 мене). Популярлыҡ буйынса икенсе урында "Рено" автомобилдәре - 10 мең сертификат, өсөнсө урында - "Форд". Башҡортостанда был программа сиктәрендә һатылған бөтә автомобилдәрҙең 85 проценты "ВАЗ" маркалы. Икенсе урында "Шевроле Нива"- 5 процент тирәһе. Өсөнсө урында - "Рено" автомобилдәре. Исемлекте артабан "Шкода" - 2,6 процент, "Хендай" - 1,3 процент, "ГАЗ" һәм "УАЗ", "Фиат" дауам итә. "Киа" һәм "Тойота" маркалы машиналар ҙа киң билдәләлек яулаған. Программала ҡатнашыусыларҙың "АвтоВАЗ" продукцияһын йышыраҡ һайлауын белгестәр был автомобилдәрҙең сағыштырмаса осһоҙ тороуы менән аңлата. Иҫке машинаһын яңыға алыштырыусыларҙың күбеһе 250-300 мең һумлыҡ автомашина һайларға тырыша. Шуға ла ВАЗ енел машинаһына сират та байтаҡ ҡына.

Белгестәр билдәләүенсә, программаны тормошҡа ашырыуҙа иң төп проблемаларҙың береһе - дилерҙарҙа автомобилдәр етешмәүе. Бирелгән танытмалар һәм һатылған автомобилдәр һаны араһындағы айырма шуның менән аңлатыла ла инде. Шул уҡ ваҡытта федераль үҙәк 5 июлгә тиклем дилерҙар тарафынан түҙәлгән һатып алыу - һатыу килешеүҙәрен тикшерергә бойорҙо. Әгәр ҙә бындай килешеү булмаһа, таныҡлыҡ 6 июлдән үҙ көсөн юғалта. Әммә артыҡ хәүефләнергә кәрәкмәй, әгәр ҙә был ваҡытҡа һатып алыу-һатыу килешеүе төҙөп өлгөрмәгән булһағыҙ, һеҙгә булған документтарығыҙ нигеҙендә яңы танытма биреләсәк.

Утилләштереү программаһының икенсе этабында ла 50 мең һумлыҡ 200 мең сертификат биреләсәк, бынын өсөн 10 миллиард һум бүленәсәк. Дәүләт программаһы буйынса автомобилде утилләштереүгә тапшырыу һәм 50 мең һумлыҡ сертификат алыу шарттары элеккесә ҡала. Белгестәр әйтеүенсә, программаны тормошҡа ашырыуҙың икенсе этабында яңы автомобилде оҙаҡ көтөргә кәрәкмәйәсәк, бынын өсөн иң күбе 2-3 ай талап ителәсәк. Автомобилдәрҙең төп өлөшө 2010 йылда һатыласаҡ, ҡалғандар машинаны 2011 йылда ала аласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АУЫР ХӘЛДӘ ҠАЛҒАНДА

**БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ҡушыуы буйынса республикала ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләр буйынса мәғлүмәт базаһы булдырылғайны. Ай һайын үткәрелгән мониторинг бындай ғаиләләргә төрлө ярҙам күрһәтергә мөмкинлек бирә.**

Ай һайын яңыртылып торған был базала әлеге ваҡытта 13680 ғаилә иҫәптә тора, унда 28 216 бала тәрбиәләнә. 13536 ғаиләгә, йәғни иҫәптә тороусыларҙың 98 процентына ҡарата профилактик ярҙам планы төҙөлгән. 3917 ғаилә иҫәптән алынған.

Хөкүмәт ауыр хәлдә ҡалыусы ғаиләләрҙе алты төргә бүлеп ҡарай: аҙ тәьмин ителгән, тулы булмаған, күп балалы ғаиләләр; балаларын тәрбиәләү менән шөғөлләнмәгән ғаиләләр; эскә һәләтһеҙ йәки даими ауырыған ғаилә ағзаһы булғандар һәм уңайһыҙ психологик микроклиматта йәшәүсе ғаиләләр. Дөйөм алғанда, республика буйынса ауыр хәлдә ҡалыусы ғаиләләрҙең һаны - 4, бындай ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе балалар 3 процентҡа кәмегән. Төрлө кимәлдәге власть һәм ведомстволарҙың бергәләшеп эшләүе һөҙөмтәһендә бындай ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү ҙә яйға һалынған. Муниципаль ведомство-ара советтар мәғлүмәттәре буйынса, 6286 ғаилә дөйөм суммаһы 7,6 миллион һумдан артыҡ матди ярҙам алған, 1993 ғаиләгә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурыстарын ҡапларға ярҙам ителгән, бынын өсөн 3,6 миллион һум тотонолған. Район һәм ҡалаларҙың дауалау-профилактик учреждениеларында 903 ата-әсә эскелектән дауаланған.

# ИҪЕРЕКТӘР ВРАЧТАР ҠАРАМАҒЫНДА

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең эске эштәр идаралығы етәксеһе Илгиз Садиҡов журналистар менән матбуғат конференцияһы үткәрҙе.**

Илгиз Камил улы билдәләүенсә, баш ҡалабыҙҙа енәйәттәр һаны былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 11 процентҡа кәмегән. Был, тәү сиратта, милиция хеҙмәткәрҙәре уҙғарған әүҙем профилактик эштәр һөҙөмтәһе. Енәйәттәрҙе асыу күрһәткесе лә яҡшыра төшкән. Ул 55 процент тәшкил итә. Шулай уҡ заманса махсус техника ҡулланып, шәхси милеккә зыян килтерергә әҙерләнгән 62 енәйәт иҫкәртелгән. Үҫмерҙәр араһында ҡылынған енәйәттәр 169-ға еткән, был былтырғы йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда 76 енәйәтҡә кәмерәк. Наркотик ҡулланыу һәм таратыу өлкәһендә 957 енәйәт эше асылған, эске эштәр идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан 6,5 килограмм наркотик матдәләр тартып алынған. Ҡомарлы уйындар һәм уйын автоматтары менән эш иткән ойошмаларҙа тикшереүҙәр үткәреү күптәренең лицензияһыҙ эшләүен асыҡлаған, милиция хеҙмәткәрҙәре тарафынан 829 уйын автоматы тартып алынған. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: уйын автоматтарын тыйыу буйынса саралар былтырғы йылдан алып башҡарыла, әммә аныҡ закон ҡабул ителмәү сәбәпле, күңел асыу йорттарын тулыһынса ябыу мөмкинлеге юҡ. Юл-транспорт ваҡиғаларына килгәндә, эскән килеш руль артына ултырыу һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында 28 кеше үлгән һәм 941 кеше төрлө кимәлдә яра алған.

Илгиз Садиҡов эске эштәр идаралығы структураһында булып үткән реформалар, шуларҙың береһе - штаттағы хеҙмәткәрҙәр һанын кәметеү тураһында ла телгә алып үтте һәм тәү сиратта был пенсия йәшендәгеләргә ҡағыласаҡ, тине. Икенсе яңылыҡ - тиҙҙән эске эштәр идаралығына ҡараған айнытҡыстар Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡарамағына күсәсәк. Әле бер ай самаһы ҡала айнытҡыстары ябыҡ торған. Илгиз Камил улы әйтеүенсә, был милиция хеҙмәткәрҙәре эскән килеш хоҡуҡ боҙоусыларға ҡарата сара күрмәйәсәк, тигәнде аңлатмай.

# МӘКТӘПТӘ ЭШ ТЫНМАЙ

**Белем биреү учреждениеларын яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса ведомство-ара республика комиссияһы үҙенең беренсе ултырышын үткәрҙе. Унда муниципаль районлар вәкилдәре лә саҡырылғайны.**

Бөгөн республиканың район һәм ҡалаларында 4279 белем биреү учреждениеһы эшләй. Уларҙың барыһында ла ремонт эштәре башланған. Әммә белем усаҡтарын яңы уҡыу йылына әҙерләү бының менән генә тамамланмай. Янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләренә ярашлы, мәктәп һәм балалар баҡсалары автоматик янғын сигнализацияһы менән тәьмин ителергә тейеш, әлегә белем учреждениеларының 50 проценты ғына был талаптарға яуап бирә. Бигерәк тә ауыл ерҙәрендә урынлашҡан мәктәптәрҙә хәл киҫкен тора. Уларҙың барыһын да талап ителгән нормаларға килтереү өсөн 516,4 млн һум аҡса кәрәк. Бынан тыш, электр селтәрҙәрен, электр ҡорамалдарын ремонтлау һәм алыштырыу, эвакуация юлдарын тейешле нормаға килтереү өсөн өҫтәмә саралар талап ителә. Республикала электр менән йылытылған белем усаҡтарын газ һәм ҡаты яғыулыҡҡа күсереү эше лә дауам итә.

Республиканың 5 белем биреү учреждениеһы авария хәлендә, уларҙың икеһе Өфө ҡалаһының Дим районында урынлашҡан. Дөйөм алғанда, 2010 йылда яңы уҡыу йылына тиклем 35 объект төҙөләсәк һәм реконструкцияланасаҡ, бынын өсөн 1,6 млрд. һум аҡса бүленгән, тағы 1 объект өҫтөндә проект эштәре башланған.

# ЭТТӘР СИР ТАРАТА

**Быйыл Ейәнсура районында эхинококкоз сире теркәлгән. Былтыр был сир менән ауырыусылар һаны алтыға еткәйне. 2009 йылда республикала ветеринар-санитар экспертизаһы аша 18 мең ит түшкәһе үткән, уларҙың 1200-ҙө эхинококк менән зарарланған булған.**

Был сирҙе таратыусылар булып эттәр тора, әммә кешегә ул төрлөсә юл менән: сирле хайуандарҙан, емешеләк йыйған мәлдә, бысранған сығанаҡтарҙан һыу эскәндә йоғоуы ихтимал. Эхинококкоз сире йылдар буйы беленмәҫкә мөмкин, әгәр ҙә уның ҡарышлауығы кешенең ашҡаҙан-эсәк трактына эләкһә, улар ҡан тамырҙары буйлап башҡа ағзаларға тарала һәм киста барлыҡҡа килтерә. Йышыраҡ улар менән бауыр һәм үпкәләр, һирәгерәк - баш мейеһе зарарлана. Ваҡыт үтеү менән киста ҙурая һәм эргәһендәге туҡымаларҙы ҡыҫа башлай.

Ейәнсура ветстанцияһының табип-эпизоотологы Рөстәм Абдуллин әйтеүенсә, район территорияһында был сирҙең таралыуы эхинококкоз менән зарарланған берәҙәк эттәрҙең күбәйеүе һәм халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барылмауы менән бәйле. Әлеге ваҡытта районда был сиргә ҡаршы эштәр алып барыла, профилактика өсөн махсус препараттар һатып алынған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Мәләүез районының Петропавловка ауылы янында Һуҡайлы йылғаһында һыуһаҡлағыс төҙөлә. БР Президенты Мортаза Рәхимов республика буйлап эш сәфәре ваҡытында төҙөлөш барышы менән танышты. Яңы объект Нөгөш һыуһаҡлағыс принцибы буйынса төҙөлә. Ул 13,5 кубометр һыу һыйҙырасаҡ. Майҙаны - 355 га, плотинаның оҙонлоғо - 460 метр, тәрәнлеге - 15 метр. Һыуһаҡлағыс 5 км-ға һуҙыласаҡ.

✔Дәүләкән районында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе балаларҙың республика конкурсы башланды. Ул быйыл ун икенсе тапҡыр үткәрелә һәм эпостың күренекле драматург, сәсән һәм ғалим-фольклорсы Мөхәммәтша Буранғолов тарафынан яҙылып алыныуына 100 йыл тулыуға һәм Байыҡ Айҙар сәсәндең тыуыуына 300 йыллыҡҡа арнала. Конкурсҡа республиканың муниципаль райондарында үткәрелгән этаптарында еңеүсе 250 кеше, 57 команда саҡырылған.

✔Оҙаҡламай Башҡортостанда беренсе хәләл ризыҡтар буйынса логистик үҙәк филиалы барлыҡҡа киләсәк. Үҙәк үҙе күптән түгел Ҡаҙан ҡалаһында асылғайны. Үҙәк Ислам ҡанундарына ярашлы етештерелгән аҙыҡ-түлекте һәм кейем-һалымды Рәсәй төбәктәренә һәм БДБ илдәренә оҙатыу менән шөғөлләнәсәк. Үҙәк тулыһынса Ислам банкы аҡсаһына төҙөлгән, был беҙҙең илгә ситтән килгән капитал һалыуҙар, тигән һүҙ. Үҙәктең филиалдары Башҡортостандан тыш тағы Мәскәүҙә, Дағстанда һәм Ҡаҙағстанда ла ойоштороласаҡ.

✔Көндәрҙең эҫе тороуы баш ҡала халҡын йылға буйҙарына, пляж урындарына ҡыуа. Әммә беҙҙең халыҡ үҙ артынан сүп-сарын таҙартыу тигәнгә һаман өйрәнә алмай. Махсус ҡоролған пляждарҙы, әлбиттә, урындарҙағы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре сүп-сарҙан таҙартып, төҙәкләндереп тора. Әле ошо көндәрҙә генә Сипайлово биҫтәһендәге торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар коллективтары Ҡариҙел буйын ял итеүселәр ҡалдырған сүптәрҙән таҙартты, бер көнлөк был сүп-сар дүрт машиналыҡ булды. Беҙ ҡасан үҙебеҙ йәшәгән йорт, урам, ҡаланың төҙөклөгә, таҙалығы өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәнербеҙ икән?

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Башҡорт халҡында үҙ шәжәрәнде, тимәк, үҙ тамырҙарыңды белеү мотлаҡ һаналған. Был матур йола оҙаҡ йылдар һанға һуғылмай килде. Хәҙер иһә элегерәк телдән-телгә күсеп килеүсе шәжәрәләребеҙҙе яҙма рәүештә теркәп, киләһе быуындарға ташҡа баҫылған изге яҙма итеп ҡалдырыу мөһимлеген күбебеҙ яҡшы аңланы.**

# ЙЫЛДАР ДАУАМЫНДА...

## йөрәктә өлгөрөүе кәрәк был байрамдың

Шәжәрә байрамы ошо көндәрҙә Әбйәлил районы Мораҡай ауылында йәмле Кесе Ҡыҙыл йылғаһы буйында Нигәмәтулла Абылбаевтан баш алған Фәйзуллиндарҙы бергә йыйҙы. Фәйзуллиндар был матур сарала бер кешене - Сәйфулла Фәйзуллинды айырыуса ҙур йылылыҡ менән иҫкә алды. Байрамға йыйылған, Сәйфулла мулланы күреп-белеү бәхетенә ирешкән оло быуын вәкилдәре уның хаҡындағы яҡты иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

Мулла, табип, әүлиә Фәйзуллин Сәйфулла Фәйзулла улы 1870 йылда ошо ауылда донъяға килә. Әсәһе иртә үлеп киткәс, етемлектә, ауырлыҡта үтә унын бала сағы. Донъяның ауырлығын, әсе-сәсәһен татып үҫә. Бала саҡтан зирәклеге менән тиҫтерҙәренән айырылып торған Сәйфулланың белемгә ҡарата ынтылышы көслө була. Уға үҙ заманында көслө уҡыу йорто булған Рәсүлиә мәҙрәсәһендә Зәйнулла ишан Рәсүлевта уҡыу бәхете тейә. Зәйнулла ишан уға суфыйсылыҡ серҙәрен өйрәтә, ендәрҙе ҡыуып, кешеләрҙең йөнен дауалау тылсымына төшендерә. Бик зирәк, үткер, тырыш шәкерт була ул. Уҡыған осоронда, оҙайлы йәй айҙарында, ҡаҙаҡ далаларына китеп, ҡаҙаҡ байҙарының балаларын уҡыта, ғилемгә өйрәтә. Алған белеме, Хоҙай тарафынан бирелгән илаһи ҡөҙрәте менән ул ғүмере буйына кешеләргә ярҙам итә. Унын даны Әбйәлил менән генә сикләнмәй, ә барлыҡ күрше райондарға, ҡаҙаҡ далаларына, Ырымбур яҡтарына тарала. Ҡорьәндә, төрлө дини китаптарҙы ғәрәп телендә уҡып, доға ярҙамында кешеләрҙең - йөнен, ә төрлө үләндәр ҡулланып, тәнен дауалай.

Сәйфулла олатай хаҡында һөйләнгән төрлө ғәжәйеп хәлдәрҙе, унын тылсымы, күрәҙәселек һәләттәре тураһында күптәр иҫләй, ә йәш быуын был хаҡта бәләкәй саҡтан ишетеп үҫә. Бөгөнгө көндә лә мулла өшкөрткән тоҙҙо, бетеүҙәрҙе ҡәҙерләп һаҡлайҙар унын балалары, ауылдаштары.

Билдәле яҙыусы, шағир Мәүлит Ямалетдинов әйтеүенсә, Сәйфулла мулла кирәмәткә эйә булыусы кеше булған. Им-том, өшкөрөү буйынса был яҡтарҙа уға етеүсе кеше булмаған. Унын әлеге көндә Белорет районы Абҙаҡ ауылында йәшәүсе кесе ҡыҙы, изге Ҡорьәнде уҡып, бала сағында ишеткән доғаларҙы яңыртып, атаһы юлын дауам



итеүсе, ауылдың хөрмәтле ағинәйе булған Ҡәзимә инәй хәтерләүенсә, һәр ваҡыт уларҙың өйө тулы кеше булған. Әллә күпме кешене аяҡҡа баҫтырҙы, кем килһә лә кире бороп сығарманы атайым, ти инәй. Ул шулай хәтерләй:"Бер ваҡыт атайым дуҫы менән урман буйлап ҡайтып килгән. Алыҫта ике ҡатындың илеүен күреп, "Ҡыҙыҡ күргең киләме?" - тип дуҫына өндәшә. Ҡыҙыҡҡа кем ҡаршы булһын инде. Шул ваҡытта ҡоп-ҡоро ерҙә, ике ҡатындың алдында йылға хасил була. Аптыраған апайҙар аяҡ кейемдәрен сисеп, инде һыуға баҫтыҡ ҡына тигәндә йылға кире юҡ була. Тағы ла бер мөғжизә. Ҡышын кемдер бераү атайымдың бесәнен урларға була. Был эште һиҙеп торған атайым эстән генә ниндәйҙер доға уҡый. Иртән тороп тышҡа сыҡһалар, теге әҙәм ҡәртәнән сығыр юл таппай, кәбән тирәләй урап йөрөй икән. Бесән эргәһендә юл һалып бөткән, ти был".

Сәйфулла хәҙрәттең бер туған ҡустыһының ҡыҙы Нәгимә инәйҙең дә һөйләгәндәре фәһемле: "Бер ваҡыт бер туған ағайым ҡаты сирләп китте. Атайым тиҙ генә Сәйфулла ағайыма йүгертте. Мулла алдан белеп, ҡулына Ҡорьәнен һәм ҡурайын тотоп, әҙер ултыра ине инде. Ашығып килеп етеүебеҙгә, Сәйфулла хәҙрәт ағайымды келәткә бикләне, ә мине сығарып ебәрҙе. Алыҫ китеү юҡ, тәҙрәнән генә келәт эсен ҡарап торам. Бына бер заман мулла сөйҙә элеүле торған ҡамсыны алып, ағайымды туҡмай башламаһынмы! Һыҙыра ғына бит тегене! Ағайымды йәлләп, мин илап ебәрҙем. Туҡмай, туҡмай ҙа, ауыҙына ҡурай менән өрөп, ниҙер уҡый. Шулай күпмелер ваҡыт үткәс, ни күрәм, ағайымдың ауыҙынан тәлмәрйен килеп төшмәһенме! Илау онотолдо, аптырап ҡаттым да ҡалдым. Сихырланған булған икән ағайым. Бына ошондай мөғжизәне күрҙем мин".

- Изге Мөжәүир хәҙрәт хаҡындағы китапта ошондай һүҙҙәр бар: "Беҙ был яҡта өсәү: береһе - мин, икенсеһе - Стәрлетамаҡ яғында, ә өсөнсөһө - Ҡыҙыл башы Мораҡ ауылында". Бында һүҙҙең тап ошо Сәйфулла мулла хаҡында барыуын күҙалларға мөмкин, - ти хәҙрәттең нәселе, ошо осрашыуҙы ойоштороусыларҙың береһе булған Белорет лицей-интернаты директоры Гөлйемеш Хәйрулла ҡыҙы Садиҡова. -Бабайыбыҙҙың ен һуҡҡанды, йылан саҡҡанды йүнәлтеүе, сихыр сығарыуы хаҡында күп мәғлүмәттәр һаҡлана беҙҙә.

Мораҡай ауылында ерләнгән Сәйфулла мулланың ҡәберенән бөгөн булһа халыҡ өҙөлмәй. Ошо көндәрҙә дин әһелдәренең рөхсәте менән Сәйфулла олатай ҡәберенә ейәндәре таҡтаташ ҡуйҙы. Изге эш башҡарған, халыҡ күңелендә тәрән эҙ ҡалдырған Сәйфулла мулланың исемен мәңгеләштереүҙе изге бурыстары һанай унын ейәндәре.

Нигәмәтулла Абылбаев нәҫелдәре йәндәренә бөтмәҫ ләззәт, күңелдәренә ҡыуаныс һәм йыуаныс табып таралышты был байрамдан. Киләсәктә лә тамырҙарыбыҙҙа дин әһелдәренең, әүлиәләрҙең ҡаны барлығын онотмай, уларҙың көсөн тойоп, олатайҙарыбыҙҙың изге рухына таянып йәшәрбеҙ, тине улар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошондай саралар һәммәбеҙҙе лә берләштерә, таныштыра, үҙ асылыбыҙға ҡайтырға булышлыҡ итә. Әммә ҡайһы бер район, ауыл Советы хакимиәттәренең шәжәрә байрамдары үткәреүҙе ҡәҙимгә бер сара һымаҡ күреп, эш күрһәтәбеҙ, тип, ашыҡ-бошоҡ үткәреү күренештәре лә күҙәтелә. Әлбиттә, былдай сараларҙан һуң ауылдар тағы ла йәмләнеп, күркәмләнеп, ҡотайып ҡала. Ләкин быны халыҡ иҫәбенә эшләү кире күренеш. Былдай күңел байрамдары бер көнлөк, йә иһә бер айлыҡ ҡына әҙерлек талап итмәй, ә, бәлки, йылдар дауамында унын йөрәктәрҙә үҫеүе, өлгөрөп етеүе зарур. Эш күрһәтәбеҙ, тип, матур йолаға әйләнеп килгән ошондай сараларға кире тойғо уятып ҡуйыуҙан һаҡланайыҡ.**

Гөлназ САФИУЛЛИНА.

ҺОРАУ - ЯУАП

### АЙЫРЫМ ИҪӘП ҠАРАЛМАҒАН

**Мин пенсионер, улым һәм унын ғаиләһе менән йәшәйем. Фатир хосусилаштырылмаған, ул минең ҡарамаҡта. Торлаҡ өсөн түләүҙәге ҡыйынлыҡтар менән бәйле айырым лицевой иҫәп астыра аламмы?**

Законда айырым лицевой иҫәп асыу ҡаралмаған. 2005 йылдың 2 мартынан ғәмәлдә булған РФ Торлаҡ кодексында ғаилә ағзалары араһында айырым социаль найм төҙөү һәм айырым лицевой иҫәп асыу мәсьәләләре ҡаралмай. РФ Торлаҡ кодексының 82-се статьяһы буйынса торлаҡ бинаға социаль найм килешеүе шундай осраҡта ғына үҙгәртелә ала: әгәр бер фатирҙа йәшәгән граждандар торлаҡ менән айырым социаль найм нигеҙендә файҙаланған булһа һәм бер ғаилә булып берләшкәндән һуң торлаҡ бинаһын файҙаланыуға ғаиләләге кемдер бераү менән берҙәм килешеү төҙөргә теләк белдергән хәлдә генә.

### БАНК ФАТИРҒА ДӘҒҮӘ ИТӘ

**Өс йылға ҙур суммаға кредит алғайным, тулыһынса түләп барыу мөмкин булмағанлыҡтан, өлөшләтә түләнем, шунлыҡтан проценттар артып китте. Хәҙер банк мине судҡа бирергә йыйына. Унын фатирҙы тартып алырға хоҡуғы бармы? Был минең берҙән-бер торлағым, ул өлөшләтә хосусилаштырылған, минән башҡа бында атай, әсәйем, ҡустым йәшәй.**

Кредит килешеүе буйынса башҡарыу ҡағыҙы алғас та банк, моғайын, судҡа мөрәжәғәт итер, ләкин инде башҡа төрлө иск менән: хаҡ һалыу ниәтенән фатирҙағы һеҙҙең өлөштө бүлеп алыу тураһында. Ғаиләнең башҡа ағзалары милкенә хаҡ һалырға банктың хоҡуғы юҡ. Бурысығыҙ иҫәбенә торлағығыҙҙы тартып алырға маташыуҙар булған хәлдә лә, был һеҙҙең берҙән-бер торлаҡ булараҡ, суд ҡарарын үтәү мөмкин хәл түгел.

### ЙӘШЕБЕҘ УҘҺА...

**Ирем менән беҙҙе 2009 йылдың февраль баштарында 2002-2010 йылдарға "Торлаҡ" милли проекты буйынса бушлай субсидияға иҫәпкә ҡуйҙылар. Өс балабыҙ бар. Сиратта 214-се булып торабыҙ, ләкин беҙгә, 35 йәш тулғас та, сиратығыҙҙан төшөп ҡалаһығыҙ, тинеләр. Был шулай булырға тейешме?**

БР Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты тарафынан йәш ғаилә субсидия алыуға дәғүә итеүселәр исемлегенә индерелгән һәм ул ваҡытҡа уларҙың һәр береһе 35 йәштән дә өлкән булмаған икән, улар был субсидияны алырға хоҡуҡлы.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Мигрень яфалаһа:



❖ Көнөнә 3-4 мәртәбә һалҡын, яҡтылыҡ төшмәй торған урында һаҡланған балан һыуын стакандың 3/4 өлөшөндә эсергә;

❖ Ике ус петрушканы 1 литр ҡайнап торған һыуҙа 3-4 минут ҡайнатырға, әҙерәк һыуынғас, шул төнәтмә менән башты йыуырға;

❖ "Йондоҙсоҡ" бәлзәмен сикәләргә һөртөп, массаж яһарға.

### Геморройҙан дауа

Ҡыҙыл миләштең һутын көнөнә 3 тапҡыр сирек стаканлап эсергә һәм аҙағынан ҡайнаған һыу эсеп ҡуйырға.

### Баланың эсе китһә

Бер балғалаҡ дөгөгә 6-7 сынаяҡ һыу ҡойорға, талғын утта ҡайнатырға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм ике сәғәт һайын сынаяҡтың өстән бер өлөшө күләмендә эсерергә.

### Йөрәкте һаҡлағыҙ

❖ Көнөнә бер ихлас итеп шарҡылдап көлөгөҙ, йөрәк тибеше яҡшыра, һулыш киңәйә, йөрәккә кислород күберәк килә;

❖ Тәмәке тартмағыҙ: йөрәк тамыры тарая һәм йөрәккә ҡан килмәй башлай;

❖ Исмаһам, аҙнаһына 1-2 мәртәбә спорт менән шөғөлләнегеҙ;

❖ Һимеҙ икәнһегеҙ, ябығырға тырышығыҙ: май, шәкәрҙе самалап ашағыҙ, йәшелсә, ерлек-емеш, балыҡ ашағыҙ;

❖ Иртәнге ашты ашамайынса ҡалмағыҙ, ул нервылар ҡаҡшауҙан һаҡлай;

❖ Ҡандағы шәкәр күләмен даими тикшерегеҙ;

❖ Үҙегеҙҙе ярһып китеүҙән тыйығыҙ. Ҡыйын саҡта ла түҙемле булырға өйрәнегеҙ;

❖ Ҡан баҫымын үлсәп торорға онотмағыҙ, аспиринды ла иҫтә тотоғоҙ - ул инфарктҡа ҡаршы яҡшы сара.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Кейәүгә сығырға булһағыҙ, ир буласаҡ кешенең аҡсаһынан элек холҡон, ҡәбиләһенән алда динен, матурлығынан элек һөнәрен һорағыҙ һәм үҙегеҙгә тиңдәш булғандарын ихтыяр итегеҙ (һайлап алығыҙ).*






## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

**Әгәр нәсихәт итеү "мин үҙем гүзәл холоҡло кеше" тиеү мәғәнәһендә булһа, ошондай китап һәм рисәләләр яҙыуға "быларҙы тик мин генә беләм" мәғәнәһе бирелһә, нәсихәт һөйләү йәки китап яҙыу түгел, хатта ауыҙымдан бер хәреф сығармаç, ҡәләм менән ҡағыҙ ҡулыма ла тотмаç инем.**

**Ләкин нәсихәт һөйләүгә һәм китап яҙыуға аҡыл эйәләре бындай мәғәнәләр түгел, бәлки, өҫтәрендә булған бурыстарын төшөрөү, аҙмы-күпме файҙалы әйберҙәрҙе киләсәк быуындарға ядкәр (иҫтәлек) ҡалдырыу мәғәнәһе бирә.**

**Бер ата ни ҡәҙәр гонаһлы булһа ла, балаларына нәсихәт биреү бурысы өҫтөнән төшмәй. Ғаилә башлығының ни ҡәҙәр кәмселектәре булһа ла, үҙе һәм үҙенә аманат ителгән ғаиләһен тәрбиә итеү вазифаһынан азат һәм мәхрүм ителмәç. "Һәр берегеҙ көтөүсеһегеҙ һәм һәр берегеҙ көтөүегеҙ хаҡында яуап бирәсәкһегеҙ" мәғәнәһендә булған: "күллүкум рағин үә куллүкум мәсъүлүн ғән рағиййәтиһи" изге һүҙҙәр һәр кем өсөн бер тиң хөкөмдөр.**

**Ошоноң өсөн тәрбиәһе өҫтөмә аманат ителгән ғаиләмә, балаларыма, ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр киләсәк тармаҡтарыма нәсихәт итеү һәм хәлдән килгән миҡдарҙа ядкәр ҡалдырыу маҡсаты менән, ошо нәсихәт китаптарын яҙҙым. Әгәр башҡалар уҡып, файҙа алһалар, беҙҙең өсөн ике мәртәбә файҙа буласаҡ. Уҡып ғәмәл итеүселәрҙең барыһын Йәнәб-и Алла бәхетле, донъя һәм әхирәттә бәхтиәр итһен.**

### Өйләнеү ҡағиҙәһе

● Өйләнеүҙең маҡсаты тәбиғи хәжәтте үтәү һәм Рәсүл Әкрәм әфәндебеҙ хәҙрәттәренең өммәтен күбәйтеү, донъя сәфәрендә һәр бер шатлыҡ һәм ауырлыҡтарҙы күтәрәсәк иптәш табыу, малды һәм ваҡытты исрафтан һәм шәриф динебеҙҙе зәғифләндереүҙән һаҡлау булған өсөн бик йәш ваҡытта өйләнмәгеҙ, ваҡыты еткәс, уҙҙырмағыҙ, тәбиғәт ҡушҡан ваҡытта өйләнегеҙ.

● Изге ҡатын донъя тереклегендә иң ҡеүәтле таяныс, усал ҡатын әҙәм улы өсөн оло бәлә. Шуның өсөн, аласаҡ ҡатындарҙы бай йәки фәҡир булыуына ҡарамайынса, хөрмәтле ғаиләләрҙән эҙләгеҙ. Дөрөç һүҙле, яҡшы күңеллеләрҙе табырға тырышығыҙ. Бының өсөн ҡатындар һәм баш ҡоҙалар һүҙенә алданмайынса, күңелегеҙ һәм аҡылығыҙ менән матур уйлағыҙ.

● Кейәүгә сығырға булһағыҙ, ир буласаҡ кешенең аҡсаһынан элек холҡон, ҡәбиләһенән алда динен, матурлығынан элек һөнәрен һорағыҙ һәм үҙегеҙгә тиңдәш булғандарын ихтыяр итегеҙ (һайлап алығыҙ).

● Күркәм тормош мөхәббәткә, мөхәббәт тәбиғәт берлегенә бәйләнгән өсөн тормош иптәшегеҙ менән тәбиғәтегеҙ тура килгәненә иғтибар итегеҙ, йәғни ни ҡәҙәр ауыр булһа ла тәбиғәтегеҙгә оҡшаш кешеләрҙе табырға тырышығыҙ.

### Ир әҙәбе

● Ҡатындарығыҙ ҡайғы һәм шатлыҡ ваҡытында иптәш һәм тормошоғоҙҙа юлдашығыҙ булған өсөн уларҙы ихлас күңел менән һөйөгөҙ. Урындарҙың рәхәте гел сәскә йәки төрлө зиннәттәр менән түгел, изге ҡатындар менән булыр. Быны яҡшы белегеҙ.

**(Дауамы бар).**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Башҡорт дәүләт университетының төп корпусындағы тантаналар залы фойеһында ла, байрамса биҙәлгән ыҡсым залда ла ниндәйҙер күтәренкелек, уҡыу йортона хас булған ҡәҙимге эшлеклелек, ығы-зығы ҡатыш йәнлелек хөкөм һөрә. Ҡайҙа ҡарама - матур кейемле, алсаҡ кәйефле, бер-береһен йылмая-көлә сәләмләгән, күҙҙәренән нур бөркөлөп торған йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар. Шул йәштәргә ҡарайһың да, үҙең дә һиҙмәҫтән, ошондай уҡ күңел күгең һис бер болотһоҙ, аҙ ғына вайымһыҙыраҡ, әммә үтә лә ихлас, күңелсәк һәм ирәүән сағыңды иҫкә төшөрәһең. Шундай мәлдәрҙә ошо йәштәргә ҡарап һоҡланаһың да, оло йәштәгеләрҙе алмаштыра алыр яңы башҡорт быуындары булыуынан эске бер ғорур халәткә инәһең. Эйе, бына ошондай белемле, мәғрифәтле, аң-белемгә ынтылыусы, әхлаҡ һәм мәҙәниәт юлын үҙ иткән йәштәребеҙ киләсәкте генә түгел, бөгөнгөбөҙҙө лә матурлай һәм ҙурлай алырлыҡ ҡеүәткә эйә.**

# БАШҠОРТТАРЫМ, УҠЫУ КӘРӘК...

## һәм дә беҙгә аҡыл кәрәк



Бөйөк Аҡмулланың тарих ситлектәренән сығыр, фәҡирлек тоҙағынан ысҡыныр юлдар таба алмай ҡаңғырған, наҙанлыҡҡа дусар булған халҡына әсенеп-һыҙланып өндәшкән һүҙҙәре менән яҡты һәм бер үк ваҡытта драматик, хатта трагик XX быуат башланып китте: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк, арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк" тигән мәңгелек саҡырыу, нисек кенә парадоксаль тойолмаһын, бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала. Нисек шулай булмаһын, ти: юғары белемлеләр нисбәте яғынан беҙ байтаҡ ҡына башҡа ҡәүемдәрҙән артта ҡалабыҙ һаман. Тимәк, тәбиғи һәләте булған һәр башҡорт махсус урта һәм юғары һөнәр алырға бурыслы, һәм был бурыс шәхси юҫыҡтан һәр шәхестең үҙ халҡы алдындағы яуаплылығы кимәленә күтәрелеп ҡаралырға тейеш.

Һеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, бәлки, был журналист милләттәштәребеҙ алдында торған мәҙәни һәм интеллектуаль планканы бик юғары күтәрә түгелме һуң, тип ғәжәпләнерһегеҙ. Юҡ, һис юғары күтәрмәйем. Беҙҙең башҡорттоң аҡыл ҡеүәһенең әле файҙаланылмаған резервтары бар, унын интеллектуаль потенциалының ҙур булыуы хаҡында IX быуатта башҡорттар араһында оҙаҡ ваҡыттар йәшәп, уларҙы ғилми яҡтан ентекләп өйрәнгән билдәле рус ғалимдарының һығымталарын иҫкә алыу ҙа етә. Әммә бөгөн дә, Аҡмулла заманындағы кеүек, балаларыбыҙҙы уҡытыуға ҡарата вайымһыҙыраҡбыҙ, уларға заманса, хәҙерге технологиялар биргән мөмкинлектәрҙе файҙаланып, матди һәм рухи ерлек булдырыу хаҡында тейешлесә иғтибар итмәй киләбеҙ. Минеңсә, һәр башҡорт балаһы менән унын бик бәләкәйҙән үк күренә-һиҙелә башла-

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Марат ЗӘЙНУЛЛИН, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы, профессор:** 2010 йыл республикабыҙҙа төрлө ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни ваҡиғаларға бай булып, Башҡорт дәүләт университеты өсөн дә бик иҫтәлекле, тип әйтергә була. Башҡортостан өсөн 100 йыл дауамында юғары профессиональ кимәлдәге төрлө һөнәр эйәләрен әҙерләгән уҡыу йорто оло хөрмәткә лайыҡ, һәм был бик хаҡ баһа. Беҙҙең башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының үҙаллы эшмәкәрлек итә башлауына ла 20 йыл булып китте. Ошо ваҡыт арауығында байтаҡ ҡаҙаныштарға өлгәштек. Һуңғы йылдарҙа башҡорт теле белгестәре менән бер рәттән, Көнсығыш телдәрен һәйбәт белгән филологтарға ихтыяж барлыҡҡа килде. Ошо телдәрҙе өйрәнеү буйынса махсус кафедра асылды һәм, ғөмүмән, факультетыбыҙҙың көнсығыш телдәре бүлеген асыу мәсьәләһен хәл итеүҙе урынлы, тип иҫәпләйем. Ошо бүлек асылһа, ғәрәп, фарсы, төрөк һәм ҡытай телдәре буйынса белгестәр әҙерләү мөмкин буласаҡ. Ҡытай телен өйрәнеүсе студенттарыбыҙ ҙа бар, уларҙың бер нисәһе Ҡытайға стажировкаға барып, белемен камиллаштырыу мөмкинлеге алды. Яҡын арала уларҙы Ҡытайға аспирантураға ебәрәсәкбеҙ, һәм ошо өлкәлә тәүге фән кандидаттарыбыҙ ҙа буласаҡ. Ғәрәп теле буйынса тәүге ғилми диссертациялар яҡланды, фарсы теле буйынса ла үҙебеҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ ғилми эш алып бара. Был беҙҙең факультетыбыҙҙың киләсәге өсөн үтә мөһим, һәм ошо маҡсаттарыбыҙҙы бойомға ашырыу беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе буласаҡ. Быйылғы сығарылыш менән бик ҡәнәғәтмен, факультетыбыҙҙың төрлө бүлектәрен тамамлаған 170 белгес башҡорт әҙәбиәтен, телебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индерер, тип ышанам.

**Фәнзил САНЪЯРОВ, педагогия фәндәре кандидаты:** Халыҡтың бөйөклөгөн унын эпик ҡомартҡылары һәм университеттары булыуы билдәләй. Башҡорт дәүләт университеты, халҡыбыҙҙың төп милли уҡыу йорто булараҡ, милләтебеҙҙең халыҡ-ара имиджын булдырыу өсөн 100 йыл самаһы ваҡыт арауығында һанап та, баһалап та бөткөһөҙ эштәр башҡарҙы. Йәшәйешебеҙҙең ниндәй генә өлкәһен алма, университетта төрлө йылдарҙа белем алып, ҙур уңыш һәм хөрмәт ҡаҙанған шәхестәрҙе табып була. Туған телебеҙҙе ғилми яҡтан өйрәнеү менән бер рәттән, меңәрләгән башҡорт теле уҡытыусыларын әҙерләү ҙә оло баһаға лайыҡ. Юбилей йылында факультетыбыҙҙы тамамлаусылар ҙа беҙҙе бик ҡыуандырҙы, уларҙың күбеһе тел ғилемен бик тырышып, ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм ихласлыҡ менән өйрәнде. Рәхмәтуллина Илүзә һәм Таһирова Лариса ҡытай теле буйынса белемдәрен камиллаштырыу маҡсатында ике тапҡыр Ҡытай Халыҡ Республикаһында стажировкала булып ҡайтты, уларҙы ошо юҫыҡта ғилми тикшеренеүҙәр алып барһын өсөн тағы ла ике йылға Ҡытайға ебәрәбеҙ. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең М. Аҡмулла исемендәге стипендияһына лайыҡ булған Сәғит Бәҙретдинов, тәүге китабын сығарған йәш шағирәбеҙ, БР Президенты стипендианты Кристина Андрианова ла факультетыбыҙ мәртәбәһен күтәреүсе студенттарыбыҙ рәтендә булды. Быйылғы сығарылыштан 17 кешенең университетыбыҙҙы ҡыҙыл диплом алып тамамлауын да уңыштарыбыҙҙың бер матур саҡкыһы итеп ҡабул итәбеҙ.

**Әлмира АБДУЛЛИНА, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директорының тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары:** Мин үҙем дә ошо университеттың география факультетын тамамлап, тормошомдо уҡытыусы һөнәренә арнаным. Студент йылдарын бик һағынып, үҙем уҡыған уҡыу йортон, хөрмәтле уҡытыусыларымды гелән маҡтап һөйләгәс, ҡыҙҙарым Гүзәл һәм Гөлназ да ошонда уҡырға инде. Бына Гүзәл ҡыҙым да филология факультетының башҡорт һәм рус телдәре бүлеген тамамланы. Университеттағы ижади атмосферанан, дәрес-һабаҡтарынан,

ған ынтылыштарын, кескәй генә ҡаҙаныштарын, төҫмөрләнә генә башлаған һәләт саткыларын иҫәпкә алып, һәләт үҫтерер өсөн тәғәйенләнгән ғәмәлдәр башҡарыу хаҡында хәстәрлек күреү фарыз. Ябайыраҡ әйткәндә, психолог һәм педагог ғалимдарыбыҙға ғына түгел, барса зыялыларыбыҙға ошондай үҫеш программаларын булдырыу эшенә тотонорға кәрәктер.

Беҙ башҡорт халҡының һан яғынан үҫешен ни тиклем мөһим, тип иҫәпләйбеҙ, уның аҡыл һәм һәләт потенциалын ғәмәлгә ашырыуҙы, милләтебеҙҙе яңы, бейегерәк сифат кимәленә еткереүҙе шундай уҡ милли бурыс рәүешендә ҡарарға тейешбеҙ. Ана, япон халҡының аң-белем сифатын күтәреп, ижади асыш һәм аҡыл продукцияһын донъя баҙарына сығарыу Япония хөкүмәте тарафынан стратегик үҫеш программаһына тинләнә. Улар бөтөн донъя кимәлендә үҙҙәренең ни тиклем хаҡлы икәнен күптән раҫланы бит инде. Беҙ япон милләтенән кәмме ни? Юҡ, әлбиттә. Тик беҙгә интеллектуаль ҡуҙғалыш кәрәк, аҡыл усағын дөрләтеп ҡабыҙырҙай йәш интеллектуалдарыбыҙҙың күберәк булыуы кәрәк. Тағы ла: йәштәр араһында эскелекте, тәмәке тартыуҙы, тик ваҡ эмоцияларыбыҙҙы ғына ҡуҙғыта алған тәбиғи ихтыяждарыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереү менән йәшәү рәүешен мөмкин булғанса сикләү фарыз. Ваҡ маҡсаттарҙан оло уңыштар бар булмай, уй-фекерһеҙ йәшәүҙән ижади һәләт асылмай. Бына ошолар тураһында уйланмаһаҡ, ысын мәғәнәһендә уҡыусы заттарыбыҙҙы, ижад итеүселәребеҙҙе үҫтермәһәк, ғүмер баҡый башҡалар етештергән тауарҙарҙы ғына түгел, ә уларҙың креатив аҡылы тыуҙырғанды ла ҡулланыусы халыҡ булып ҡаласаҡбыҙ.

Башҡорт дәүләт университетының тантаналар залында башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлаусы йәштәргә диплом тапшырған мәлдә мине бына ошондайыраҡ уйҙар биләне. Мин йәштәрҙе, бигерәк тә уларҙың аң-белем һәм ижад юлын һайлағандарын хуп күрәм, улар өсөн ихлас ҡыуанам. Уларға өмөтөм дә ҙур һәм уғата ышаныслы: тыуып килеүсе яңы интеллектуаль башҡорт элитаһы ни тиклем күп һанлыраҡ була алһа, халҡыбыҙҙың донъя кимәлендәге имиджы ла шул тиклем баһалыраҡ һәм күптәр көнләшеп ҡарарлыҡ буласаҡ. Йәштәребеҙ иман һәм аҡыл юлынан ғына тайпылмаһын, ул саҡта Хаҡ Тәғәләнең халҡыбыҙға һалған ҡеүәте мотлаҡ асыласаҡ һәм һәм бар донъяға балҡыясаҡ, иншалла.

уҡытыусыларынан бик тә ҡәнәғәт булды ҡыҙым. Аптыраулыҡ та шул: каникулға сығып, бер ай ҙа уҙмай, иптәштәрен, уҡыу йортон һағынып, киләһе уҡыу йылын түҙемһеҙләнеп көтөп алыр булды. Беҙ, атаәсәләр, башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты педагогтары коллективына бик рәхмәтлебеҙ, сөнки бында беҙҙең балаларыбыҙ сифатлы белем менән бер рәттән, әхлаҡлылыҡ, мәҙәнилек, башҡорт кешеһенә хас милли рух өлгәләрендә ысын тәрбиә алды.

**Юлия ЗАҺРЕТДИНОВА, башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының башҡорт һәм немец телдәре бүлеген ҡыҙыл диплом менән тамамлаусы:** Мин баш ҡалаға уҡырға Салауат районынан килдем. Тәүге мәлдәрҙә бындағы талаптарға күнегеп китеүе ауырыраҡ булһа ла, яңы белем менән ҡыҙыҡһыныу көслөрәк булды. Уҡыу енел бирелмәй инде ул, әммә тырышһаң, бар кәртәләрҙе лә үтеп була. Деканыбыҙ Марат Вәли улына айырыуса рәхмәтлебеҙ, ул беҙҙең турала атайҙарса хәстәрле булды, башҡа уҡытыусыларыбыҙҙан да уңдыҡ. Тырышып уҡығандарҙы күрә лә беләләр бында, тейешле баһа ла бирәләр. Мин дә һир бирмәнем, имтихан һайын тик "бишле" билдәһенә лайыҡ булыуҙы хуп күрҙем. Тырышыуым бушҡа булманы, бер ай Германияла стажировкала булыу үҙе үк онотолмаҫлыҡ тәьсораттар ҡалдырҙы. Факультетыбыҙҙың бер өҫтөнлөгө бар: бында уҡыузың ҡәҙерен белгәндәр донъя кимәлендәге мәҙәни байлыҡтарҙы үҙләштереп, тәрән белемле, киң фекерләй алыусы, кеше психологияһын тиҙ төшөнә алыусы һәйбәт белгес һәм артабан үҫеш мөмкинлектәре ҙур булған шәхес булып формалаша ала. Минең дә яҡын киләсәктәге хыялым - аспирантурала уҡып сығып, ғалимә булыу, ошо юҫыҡта беҙҙән алдағы быуындарҙың эшен дауам итеү.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ уйланды һәм яҙып алды.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш

Шул арала хәмер быуы башҡорттарҙың башына сыҡты; беҙ изге тауҙың уларға аҙ ғына булһа ла асыуы килмәйәсәге хаҡында ҡабатлап әйттек. Быны ярҙам йөҙөнән эшләмәһәләр, беҙҙе барыбер мәжбүри рәүештә оҙатып йөрөйәсәктәре тураһында белдерҙек. Белмәйем, шарап тәьҫиренәнме, әллә беҙҙең әйткәндәрҙәнме, башҡорттар ҡаушабыраҡ ҡалды һәм улар беҙҙе тауға алып барырға үҙ теләге менән ризалашҡандай тойолдо. Тауҙың бейеклеге һәм дә текәлеге арҡаһында уның түбәһенә менеп еткәнсе хәл алыу өсөн ун биш тапҡырлап туҡтарға тура килде. Тау түбәһе түңәрәгерәк киң майҙандан ғибәрәт булып, унда йөҙләп башҡорт йортон урынлаштырырға булыр ине. Көнбайыш тарафтан тау күпкә һөҙәгерәк, һәм унда тауға менерлек юл төҫмөрләнә, башҡорттар уны бик боронҙан, хан замандарынан ҡалған, тип ышандырырға тырыша. Тауға илтеүсе юл башындағы уйһыулыҡта ур ҡалдыҡтары бар, күрәһең, ул ошо уңайлы тау юлын һаҡлау өсөн яһалған булғандыр. Шулай ҙа был тауҙа башҡа ниндәй ҙә булһа боронғолоҡ ҡалдыҡтары күренмәне. Башҡа тарафтарҙан тау ныҡ ҡаялы. Тауҙың яланғас түбәһе башҡорттарға - артыш ағасы, ә беҙҙә казак можжухаһы, тип йөрөтөлгән үҫемлектең үҙенсәлекле төрө менән ҡапланған. Был үҫемлек беҙгә башҡорттарҙың тағы бер хөрәфәтен асты. Ошо үҫемлекте өҙөп ала башлағанда, беҙ тауҙың икенсе осонда инек. Бигерәк тә тырыш булып тойолған бер башҡорт тау буйлап беҙгә табан йүгереп килгән ыңғайы, тәрләсә ишаралап, беҙгә уны көтөп тороу кәрәклеген белдерҙе (бик көслө ел һәм ямғыр арҡаһында беҙ уның тауышын ишетмәй инек); килеп етеү менән, һорай ҙа башланы: һеҙ артыш ағасы ботаҡтарын ни өсөн һәм ниндәй нәҙер менән һындырып алаһығыҙ? Был ботаҡтарҙы тик ҡыҙыҡһыныуыбыҙ өсөн генә алып, нәҙер әйтеү өсөн бер ниндәй ҙә сәбәп булмауы тураһында белдергәс, ул беҙгә асыуланып яуап ҡайтарҙы: беҙ тауға уларҙы үҙ ихтыярынан тыш менергә мәжбүр иткәнбеҙ; бер кәрәкһеҙгә һәм бер ниндәй нәҙер әйтмәйенсә генә ағас һындырып, икенсе енәйәт ҡылғанбыҙ икән; был улар өсөн эҙһеҙ үтмәйәсәк. Был башҡорт ошо һүҙҙәрен хөрәфәткә ышаныуҙан әйттеме, әллә беҙҙең тауҙа ниндәй ҙә булһа бүләк ҡалдырыуыбыҙға өмөт иттеме, белмәйем; бәләкәй генә әйбер артынан да тауға менергә ялҡауы килмәй башҡорттоң: әммә һуңынан асыҡлауыбыҙса һәм үҙ күҙҙәребеҙ менән күреүебеҙсә, башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа (XVII быуатта урыҫтар төрки халыҡтарҙы татар, тип атай. - **Ред. иҫк.**) артыш ағасын өйҙән ен-бәрейҙе ҡыуып сығара алыусы көскә эйә булыуы арҡаһында хөрмәт итә икән, һәм һәр кем татар (төрки - **Ред. иҫк.**) өйҙәрендә ошо хөрәфәтте осрата ала.

Башҡорттар, беҙгә үҙ ярҙамын күберәк күрһәтергә теләп, был тауҙа үҙҙәре иң мөһим, тип иҫәпләгән нәмәне лә йәшермәне. Улар тауҙың ҡаялы төньяҡ ҡырында Нуғай хандың ике дөйә менән килтерелгән хазинаһы йәшерелгән мәмерйә булыуы тураһында һөйләп, шуны иҫбатларға тырышты; саф алтынкөмөштән торған хазина ниндәйҙер билдәһеҙ мосолман әүлиәһе тарафынан сихырланған булып, уны бер кем дә алыу ғына түгел, күрә лә алмай. Уларҙың әйткәне ысынында уйҙырма булһа ла, уйлап сығарылған хан байлығын табыу өмөтөнән түгел, ҡыҙыҡһыныуыбыҙ арҡаһында шул мәмерйәне ҡарап сығырға булдыҡ. Беҙгә тау башынан текә ҡая буйлап түбәнгә илле сажинға тиклем төшөргә кәрәк ине. Тауҙар буйлап болан кеүек йөрөргә өйрәнеп бөткән башҡорттар алды менән төшөп барған ыңғайы емерелеп төшөп торған ташта беҙгә баҫҡыстар яһаны; әммә көслө ел, ямғыр һәм ышаныcһыҙ таш беҙҙе ошо эшкә тотоноуыбыҙ өсөн үкенергә, ә ҡайһы берәүҙәрҙе, бәлки, ысынлап та ант итергә мәжбүр иткәндер; шулай ҙа ахыр сиктә беҙ данлы Хан мәмерйәһенә төшөп еттек. Уның тышҡы яғынан биш сажин ҙурлығындағы ауыҙы бар ине, ә ҡалған өлөшө емерелеп төшкән ҙур таш киҫәктәре менән тулғанлыҡтан, бер нисек тә эскәрәк үтеү мөмкинлеге булманы, һәм беҙҙең бар тырышлыҡтарыбыҙҙың әжере шул мәмерйә эсендә ултырып, тышта ярһап көслө ямғырҙан һаҡлана алыуҙан ғибәрәт булды. Шул мәмерйәнән тау итәгенә тиклем төшөү баяғыһы кеүек үк ауырлыҡ һәм хәүеф менән атҡарылды: сөнки элекке һүкмаҡ менән өҫкә менеү мөмкин булмаған эш ине.

Мөгжизәле Башҡорт тауын ҡалдырып, Ағиҙелгә табан боролдоҡ һәм, ярты юлыбыҙҙы уҙыуға, беҙгә ерләү йолаһын башҡарыусы башҡорттар осраны. Иң алдан балта һәм кәрәктәр тотҡан өс башҡорт атҡарҙа килә ине; күрәһең, улар ҡәбер ҡаҙырға тейеш булғандыр. Һыбайлы мулла ике йөҙ сажин артараҡ бара, уның артынан мәрхүмде алып киләләр. Мәйет ҡабыҡ эсенә һалынып, киндер туҡыма менән уратып тегелгән. Ҡабыҡ арҡыры бау менән тоташтырылған ике бау элмәккә аҫып ҡуйылып, улар аша үткәрелгән ҡолғаның остары йәнәш барған ике һыбайлы башҡорттоң эйәрҙәренең алғы ҡашағаларына һалынған: мәрхүм улар араһында бишектәге кеүек бәүелеп бара. Мәрхүмдең артынан уны оҙатыусы туғандары һәм яҡындары барыһы ла һыбай килә. Үҙ ауылынан ситкә күсеп киткән башҡорттарҙа ерләү йолаһы шул рәүешле башҡарыла икән (Бында һүҙ йәйләүгә сыҡҡан башҡорттар тураһында бара. - **Ред. иҫк.**). Киҫкә табан Ағиҙелгә ҡойған Тәйрүк йылғасығы буйында урынлашҡан Көсәпкол исемле башҡорт ауылына килеп еттек һәм шунда ҡуна ҡалдыҡ.




Был төндә ауылдағы башҡорттар тынғылыҡ күрмәне: иртәгәһенә улар ауылдарынан күсеп китергә ниәт итәләр ине. Миңә уларҙың күсенеп йөрөүе хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәк булыр.

Башҡорттарҙы ҡырағай һәм ҡала мәҙәниәтен үҙ итеүсе халыҡтар аралығында йәшәүселәр, тип иҫәпләргә була. Ҡыштың үтә һалҡын, ҡарҙың тәрән булыуы һәм көслө бурандар башҡорттарҙы, башҡа татар (төрки - **Ред. иҫк.**) халыҡтары ғәҙәтенсә, ҡыш айҙарын ауылдарҙа, насар биналы ағас йорттарҙа үткәрергә мәжбүр итә, йәш мал-тыуарҙы һәм еген аттарын да шунда тоталар; башҡа малдары ҡыш буйына ялан ҡыҙырып йөрөй. Уҙған йәйҙә үләндең наҡыҫ булыуы бигерәк тә башҡорттар өсөн күңелһеҙ һөҙөмтә бирҙе: былай ҙа бесән әҙерләүгә вайымһыҙыраҡ ҡараған башҡорттар үҙҙәре ҡулланған ураҡ салғы менән ҡыҫҡа үләнде саба алманы һәм ҡыштың күп өлөшөн малдарын йәш йыла ағасы иҫәбенә аҫырарға мәжбүр булды. Малдарының йыла ҡабығы кимереп кенә тереклек итеүе хужалары өсөн зыяныһыҙ ҡалманы: малдарының байтағы ҡыш сыға алманы, урмандарҙа аҙ киҫелмәне. Башҡорт ауылдары мал кимергән йыла ағастары яндырылған усаҡтар менән тулды.

Йәй көндәрен башҡорттар үҙҙәренең ауылдарынан байтаҡ йыраҡ ерҙәрҙә - далаларҙа, тауҙарҙа һәм урмандарҙа уҙара: йыш ҡына йөҙ саҡырымға тиклем күсеп китәләр. Шул саҡта уларҙың күсеп йөрөүгә яраҡлаштырылған тормошо гөрләп тора, сөнки улар йәй көнө башлыса һөт аҙыҡтары, һирәгерәк мал ите менән туҡлана; ә икмәкте улар бөтөнләйгә күрмәй-белмәй йәшәй. Шул саҡта улар барса малдарын үҙҙәре эргәһендә тота һәм улар менән бергә бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөй, ә ҡышлауҙарына яҡын яландарҙы көҙгә сабынлыҡ өсөн малдан тапатмай ҡалдыра.

Ҡалмыҡтар кеүек, кейеҙ тирмәләрҙә йәшәйҙәр; ярлыраҡтары туҙ менән ҡапланған ҡыуыштарҙа яуым-төшөмдән һаҡлана. Күсеп йөрөү ваҡыты еткәнсе, ауылда үҙҙәренең барлыҡ йорт ихтыяждарын үтәп ҡалырға тырышалар: ауыл эргәһендә күп булмаған микдарҙа ашлыҡ сәсәләр, урмандарҙа үҙҙәренең солоҡтарын ябалар, кейеҙ баҫалар һәм тире иләйҙәр. Солоҡтарҙы ир-ат ҡарарға тейеш, ә башҡа йорт эштәрен ҡатын-ҡыҙ башҡара: уларҙың ҡатындары тегенә, аяҡ кейеме йүнләй, тире иләй һәм кейеҙ баҫа. Уларҙың тире иләү, күн әйберҙәр яһау маһирлығын билдәләмәйенсә булмай.

**(Дауамы. Башы 21-22-се, 24-25-се һандарҙа).**

# Үҙебеҙҙең ысынбарлыҡ...

## Европа күҙлегенән асығыраҡ күренә

**Ш Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттары араһында Италиянан килгән яҡташыбыҙ, режиссер, шағирә Тәнзилә Кейекбаеваны ла осраттыҡ. Тәнзиләне был илгә үҙ донъяһын кешесә итеп ҡороу, ипотекаға түләү өсөн аҡса эшләү ихтыяжы алып сығыуы хаҡында гәзитебеҙҙә яҙғайныҡ инде. Күп телдәрҙе белеүсе Тәнзилә Әхмәт ҡыҙы Италияла туристик агентлыҡта гид һәм тәржемәсе булып эшләй. Был юлы яҡташыбыҙ ҡоролтайҙа алған тәьҫораттары, оло донъя хәлдәре хаҡындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

### Үҙ өйөндәге хәлде...

I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына мин 1995 йылда Сибай ҡалаһынан делегат булып һайланып килгәйнем. Ул мәлдән алып 15 йыл ғүмер үтеп киткән. Быйыл III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына Италиянан килдем. 15 йыл мәңгелек өсөн күҙ йомоп-асҡан ғына арауыҡ, әммә ошо ваҡыт эсендә донъяла күпме үҙгәрештәр булып үтте. Был үҙгәрештәрҙе халҡыбыҙҙың ошо ике йыйынын сағыштырғанда ла нығ һиҙергә була. Тәүге ҡоролтайға мин ҙур һабантуй байрамына килгәндәй, күп кенә төшөнсәләргә романтика быялалы алһыу күҙлек призмаһы аша ҡарап килгәйнем. Ул саҡта әле суверенитеттың да нимә икәнен, милләтебеҙ алдында торған проблемаларҙы ла тулыһынса аңламаған иләҫ-миләҫ саҡ. Милләтебеҙҙең 2-се йыйынына сит илдә булып, килә алманым, шуға күрә уның хаҡында нимәлер әйтә алмайым. Әммә бына хәҙерге йыйынға мин хисле ҡыҙ бала булып ҡына түгел, уттыһыуҙы кискән, донъяның әсе-сөсөһөн татыған, ярты донъяны урап сығып, аҡты-ҡараны айырған кеше булараҡ ҡайттым. Сибайҙан I ҡоролтайға килгән Тәнзилә менән Европанан III ҡоролтайға килгән Тәнзилә араһындағы айырма - ер менән күк араһы. Хәҙерге заманда Европала, ғөмүмән, ер йөҙөндә шундайын ҙур үҙгәрештәр бара. Донъя, кешелек күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә үҙгәрә, интеграция, глобалләшеү процестары бара һәм ошо фонда башҡорт милләтенең проблемалары бөтөнләй икенселәй булып күренә. Әйтәйек, беҙҙең өсөн етешһеҙлек, проблема булып күренгән төшөнсәләр Европа күҙлегенән ҡарағанда ыңғай мәғәнәгә эйә, йәки - киреһенсә. Шуныһы һөйөндөрә: ошо фонда милләтебеҙ, эт сапҡанда, бет саба, тип үрәпсемәй, ярһымай, сабыр ғына дөрөҫ юлдан бара. "Үҙ өйөндәге хәлде күршенән барып бел" тигәне шул икән.

### Ҡунаҡ булып ҡайтманым...

Мин ҡоролтайға ҡунаҡ булып ҡайтманым, унын эшендә ҡатнашыр өсөн, милләтем алдында оло яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡайттым. Шулай ҙа оло ҡунаҡ күреп ҡаршы алдылар һәм, әйтергә кәрәк, үҙ тормошомда бер ҡайҙа ла күрмәгән хөрмәтте мин үҙ республикамдан, үҙ милләтемдән күрҙем. Шулай ҙа була икән. Беҙҙе ҡабул итеүсе хужалар өтөлөп торҙолар, өрмәгән ергә ултыртманылар. Ҙурланылар. Ҡоролтайҙа һәр кемгә лә иғтибар бүлергә тырыштылар. Ә бит барыһын да күтәрә һуғып, Италияға сығып китеүем ипотекаға фатир алып, кредит "һаҙлығына" батыуҙан ҡотолоу юлын эҙләү ине. Киткән сағымда илемә ҡарата үпкәм дә бар ине. Мине күрмәнеләр, һанламанылар, тиеп уйлағайным. Сит илгә ирекһеҙҙең көнөнән сығып китеүселәр барыһы ла: "Мин илемә кәрәк түгелмен", - тип уйлай инде ул. Хәҙер инде былар барыһы ла юҡҡа сыҡты.

Шул уҡ ваҡытта ҡоролтайҙа күтәрелгән проблемаларға бармаҡ аша ғына ҡараған, асылда, ҡунаҡ булып һыйланыр өсөн генә килеүселәр ҙә булманы түгел, булды.





### Етеш йәшәгән генә бәхетләме?

Күп кенә сығыштарҙа Башҡортостанда дәүләт фонды ҡарамағындағы урман-тауҙарҙың, йылға-күлдәрҙең яҙмышы хаҡындағы аянысл һүҙҙәр яңғыраны. Капиталистик ил һаналған Италияла был мәсьәләнең нисек киҫкен булыуына үҙем шаһит булғас, урман-тауҙарыбыҙҙың яҙмышына битараф ҡала алмайым. Италияла асфальттан бер аҙым ғына ситкә баҫыуың була, шундуҡ һаҡсылар йүгереп килеп: "Привато, бында инергә ярамай!" - тип һине ҡыуа башлай. Эштәр былай барһа, беҙҙе лә киләсәктә ошондай аянысл хәлдәр көтөүе бар. Әйткәндәй, мин бында режиссерлыҡҡа уҡығанда "Оҙон йәйҙең бер көнө" тигән телефильм төшөргәйнем. Шуны Италияға алып барып таныштарыма күрһәткәйнем: "Һеҙҙә әле һаман да урманға иркен йөрөйҙәрме, һаман да ҡул менән бесән сабалармы?" - тип шаҡ ҡаттылар. Италияла ҡул менән бесән сабыу түгел, хатта һауыт-һаба ла йыуымайҙар, унда бар нәмә автоматлаштырылған. Ә бит беҙ урмандарыбыҙҙа үҙебеҙҙе иркен тоябыҙ. Автомат килеп ингән ерҙән тормоштоң йәме китә. Элек итальяндар тормошҡа фәлсәфәүи ҡараш менән "бенессеро" (аҡ һыҙат), "малессеро" (ҡара һыҙат) менән алмашынып килә, тип йәшәгән. Әле улар үҙҙәренең тормошон "ҡара һыҙат"ҡа тиңләй. Алдынғы илдәрҙә йәшәүсе цивилизациялы милләттәр тормошо күҙлегенән ҡарағанда, итальяндар етеш, бәхетле тормошта йәшәй кеүек. Ә төптәнерәк уйлап ҡараһаң, уларҙың хәле беҙҙекенән аянысл ыраҡ барыбер. Шул тиклем етеш тормош ҡына кешене, милләтте бәхетле итмәй икән. "Аҡса кешене бәхетле итмәй, бәхетле булырға ярҙам ғына итә", ти итальяндар. Ашарыңа, кейенереңә, йәшәреңә булһа, шул еткән, ҙур аҡса артынан ҡыуыу кешегә бәлә килтерә. Ни өсөн? Сөнки ҙур аҡсаны ҡулына төшөргән кеше башҡа бик күптәрҙең өлөшөнә инә һәм быларҙың барыһын да Аллаһы Тәғәлә күреп-белеп тора. Итальяндар шул тиклем бай тормошҡа килеп етте, әммә бөгөн бәхетһеҙлегенән илайҙар. Уларҙың рухы һынды.

### Бер кеҫәгә - бер сәйәсәткә...

Ҡоролтайҙағы сығыштарҙа үҙ тыуған илебеҙгә, еребеҙгә хужа булыу тойғоһона бәйле фекерҙәр ҙә яңғыраны. Итальян кешеһе бөгөн үҙ иленә үҙе хужа түгел. Әлбиттә, унда демократия көслө, тик был илдә кемдәрҙе генә күрмәҫһең? Аҡ тәнлеләр, ҡара тәнлеләр, һары тәнлеләр, һоро тәнлеләр, ҡыҙыл тәнлеләр... Ер шарында нисә төрлө милләт булһа, барыһы ла бар Италияла. Итальяндарҙы үҙ илдәре яҙмышына битарафлығы, хуш күңеллелеге бына нимәгә килтерҙе. Әле яңыраҡ беҙҙән вьетнамдарҙы үҙ иленә ҡайтарҙылар. Бик яҡшы. Һәр кем үҙ илендә йәшәргә тейеш. Итальяндарҙың яҙмышы беҙҙе шул хаҡта иҫкәртә: әгәр ҙә беҙ үҙ илебеҙгә хужа була алмаһаҡ, беҙ шул хәлгә барып етеүебеҙ ихтимал. Автобустарҙа һанда-һаяҡ күренгән итальяндар бер мөйөшкә һырынған, уның ҡарауы, ситтән килгән ҡара тәнле халыҡ үҙен бында бик иркен тоя, бер-береһе менән ҡысҡырып, үҙ телендә аралаша, башҡаларҙы бар тип тә белмәй. Итальян кешеһе уларға бер һүҙ ҙә әйтә алмай, улар үҙ иленән ҡолаҡ ҡағып бара. Бөгөн ҡытайҙар итальяндарҙың барлыҡ предприятиеларын, йорттарын һатып алып бөтөрөп бара. Улар ситтәргә үҙ мөлкәтен һатмаҫ ине, бар донъяла барған иҡтисади көрсөк ошо мәжбүри аҙымға барырға этәрә. Мин Италияға тәүҙә аяҡ баҫҡанда ҡытайҙар был илдә ҡырҡтартмасы булып ҡына ваҡ-төйәк, шаҡы-шоҡо һатып йөрөй ине, хәҙер килеп илдең иҡтисадын тәшкил итеүсе сәнәғәт берәмектәре ҡытайҙарға һатыла. Шул иҫәптән рестораньдар, ҡунаҡханалар, парикмахерскийҙар ҡытайҙар ҡулына төшә. Ҡытайҙар нисек булһа ла был илгә йәбешергә, әҙ генә хаҡҡа булһа ла эшләргә риза. Улар барыһы ла бер кеҫәгә, бер сәйәсәткә хеҙмәт итә. Ул сәйәсәт ҡытай милләтенең йәшәү мөхитен киңәйтеү. Бында итальяндарҙың хәле беҙгә - ғибрәт, ҡытайҙарҙыҡы өлгө булырлыҡ.

### Евросоюз башҡорттары

Ғөмүмән, хәҙер капиталистик система, шул иҫәптән Европа илдәре көрсөк хәлендә. Европа бөгөн ҡойроғона баҫҡан кеҫәртке хәлендә. Ҡойроҡҡа баҫылған аяҡ - Американыҡы. Европа был хәленән ҡотолорға теләһә, ҡойроғон өҙөп, көнсығышҡа, йәғни Азияға ҡасырға мәжбүр буласаҡ. Америкаға ҡаршы тороу маҡсатында Евросоюз дәүләттәре үҙ валютаһын булдырғайны, триумф маршы оҙаҡ яңғыраманы. Ошо мәлдә Рәсәй ҙә Европаға ярҙамға килергә әҙер, уға күпләп газ, нефть һатыу шарты менән. Дөрөҫөн әйткәндә, Европала күҙәтелгән хәлдәр ике державаның - АҠШ менән Рәсәйҙең бер-береһенә ҡаршы тороуынан тыуған көрәнештәрҙер. Әгәр ҙә Рәсәй Евросоюзға инмәһә, иртәме-һуңмы, Европа Америка ихтыярына буйһоноп, Рәсәй оло донъяла бер үҙе тороп ҡалыуы бар. Шуға күрә Рәсәйҙең Евросоюзға инмәй хәле юҡ, әгәр ҙә унда инһә, Европа демократияһын да үҙләштерергә мәжбүр буласаҡ.

Ошондай шарттарҙа Евросоюзға ҡараған дәүләттәрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең тәүге ойоштороу йыйынын Берлинда үткәреү бик ҙур сәйәси әһәмиәткә эйә. Евросоюз кимәленән Рәсәй, Башҡортостан, башҡорт милләте проблемаларына ҡараш ташлау тарихта тәүге тапҡыр түгел. Әйтәйек, бөйөк ғалимыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған да Европала эшмәкәрлек алып барған. Берлинда үткән конгреста сығыш яһаусы һәр кемдең сығышын оло диҡҡәт менән тыңлап ултырҙым һәм шуны аңланым: милләтебеҙ проблемаларын ошолайтып Европа кимәленә күтәреп тә була икән. Нимә генә тимә, Европала Әхмәтзәки Вәлиди рухы йәшәй. Киләсәктә "Евросоюз башҡорттары" тигән термин беҙҙә нығыныуын теләге килә.

### Ғаилә институты

Ҡоролтай секцияларында, шулай уҡ пленар өлөштә башҡорт ғаиләһе, уның статусы хаҡында фекерҙәр әйтелде. Италияла, мәҫәлән, итальян ғаиләһе тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ хәҙер. Улар ир менән ҡатындың бергә йәшәүен гражданлыҡ никахы менән нығытыуҙы хуп күрә. Был уларҙың ғаилә, тимәк, милләт өсөн яуаплылыҡ тойғоһонан ҡасыуҙан киләлер тип уйлайым. Итальян ғаиләһе булмағас, баланы итальян рухында тәрбиәләүсе институт та юҡ. Итальян ирҙәре хәҙер итальян ҡыҙҙарына өйләнеү урынына берәй эмигрант ҡатын-ҡыҙы менән никахһыҙ ғына бергә йәшәүҙе артығыраҡ күрә. Был иһә, ғаилә өсөн яуаплылыҡтан ҡасыу... Бөгөн өйләнеү сит ил граждандары өсөн кире күренешкә әйләнә бара. Сөнки ата-әсәләре үлеп китһә, байлыҡ, мал-мөлкәт бүлешеү унда һәр ғаиләнең татыулығына балта менән сабыуға бәрәбәр. Ми-

✓ *Килене менән ни булғанын аңларға тырышты. Әлбиттә, насар кәйефен күрһәтмәй, улы алдында өлтөрәп тороуы һәйбәт, әммә... нимәлер йәшерә лә баһа! Илһамды күрәләтә алдай килеп сыға түгелме һуң?*




Сәйеттең эшенә ҡыçылмаһа ла, кемдәр менән аралашыуын күреп-белеп йөрөнө Резеда, яҙа-йоҙа хәбәрҙәрен дә ишетергә тура килде. Күрәһең, Сәйет, был ҡыҙ яҙмышынан ҡәнәғәт, сығынсылап бер ҡайҙа ла бармаясаҡ, тип артыҡ ышанып ташланы, уға тулы ирек бирҙе, тиһәң дә була, аҡсаһын да йәлләмәне. Ә ҡыҙ, үҙ сиратында, уңайы тура килгән һайын ышаныс телефонына шылтыратып, этлектәрен хәбәр итергә тырышты. Әммә былары ла йоҡлап ятмай ине шул. Күпме генә тикшереүҙәр булып торһа ла, һыуҙан гел ҡоро сыға алдылар. Бик уйлап, һаҡ эш итә инеләр шул, юғары органдарҙа үҙ кешеләре лә булғандыр. Әммә һуңғыһында... Резеда Сәйеттең бик мөһим документтарын урланы, прокуратураға алып барып ҡалдырып китте. Шул көндө үк Сәйет һыуға батҡан кеүек юҡҡа сыҡты. Бер нисә көндән Резеда үҙе белгән енәйәтселәр төркөмөнөң ҡулға алыныу хәбәрен ишетте. Ҡыуанысынан йөрәге шартлай яҙғайны шул ваҡыт. "Ҡотолдоммо икән ни!" тип, ни иларға, ни көлөргә белмәне. Сәйетте иһә үлгән тип әйттеләр. Үлеп, анһат ҡотолғанына йәне көйгәйне ҡыҙҙың. Ә ул, ана, үлмәгән дә, ҡулға ла алынмаған, рәхәтләнеп иректә йөрөй...

Ҡайҙа барып һуғылырға белмәй йөрөй торғас, курсташ ҡыҙының ишеген шаҡыны. Йәшәргә урын, эш тапҡансы ғына индереп тороуын үтенде. Тегеһе Резеданың ниндәй икәнен белһә, бәлки, тупһаһына аяғын да баçтырмаç ине, әммә, күптән күрмәгән әхирәтен тап итеүенә шатланып, ихлас ҡабул итте. Тынысланып, аҡылына килгәс, яңы тыуған балалай тойҙо үҙен Резеда. Тышҡа, донъяға сығырға кәрәк, ә ул нимә эшләргә, ҡайҙа барырға белмәй. Быға тиклем уның йәненең дә, тәненең дә хужаһы булды - ул нимә әйтә, шуны ғына үтәй ине. Хәҙер үҙенә үҙе хужа! Үҙенең йәнен үҙе аçрарға тейеш. Тимәк, эшкә төшөргә, аҡса эшләргә тура киләсәк. Тик ҡайҙа? Кем булып? Резеда хәҙер эшләү тигән нәмәне онотоп бөткәйне инде. Иҙән йыуырға барырмы, урам һеперергәме? Унан, Сәйеттәр шайкаһының барыһының да ҡулға алыныуына ышанмай ине Резеда, берәйһенә тап булыуың да бар бит, шунан да ҡурҡты. Ошолай аңҡы-тиңке килеп йөрөгәндә, әмәлгә ҡалғандай, Динә килеп осраны ла инде. Ул берәү менән таныштырам, бына тигән егет, тип ауыҙ һыуын ҡоротоп һөйләгәс, күңелендә ниндәйҙер бер ҡыл сыңлағандай булды. Ә ниңә? Ул кәм-хурмы ни? Уның да ғаиләле булғыһы килә.

Кисә генә Динәгә аяуһыҙ рәхмәттәр уҡый ине, бөгөн килеп ,ниңә генә юлымда осраның, тип ҡәһәрләй. Исмаһам, бәхеттең ни икәнен белмәç, ысын мөхәббәтте татымаç ине. Хәҙер ул барыһын да юғалтыуҙан үлеп ҡурҡа.

* * *

Төшкөләккә ашарға әҙерләй алманы Резеда. Бер нөктәгә төбәлгән килеш ятты ла ятты. Юҡҡа ғына туй көнөндә үк иренә барыһын да һөйләмәгән. Аңламаçтай булһа, ҡайтыр ҙа китер ине Өфөһөнә. Сикһен көйҙөрөп күҙ йәштәре түгәрәне. Ҡәйнәһе күреп ҡалмаһын тип, тиҙ генә ең осо менән һыпыра һалды.

Миңзифа киленен ошондай хәлдә туйҙан һуң икенсе тапҡыр күрә. Йөҙө вайымһыҙ төç алған, әйтерһең, уға бер ни ҙә кәрәкмәй. Нимә булды икән? Әллә яман һүҙ еткерҙеләрме? Булыр ауыл халҡынан, улар ни, алды-артын уйлап тормай, яра ла һала. Әллә берәй ере ауыртамы? Етди сир булып, белдерергә теләмәйме? Иртән генә ҡыр кәзәһе кеүек һикерәндәп сығып киткән кеше... Миңзифа ситтән генә күҙәтеп йөрөһә лә, килененә бер ни ҙә өндәшмәне, ярай, ғүмер буйы шулай һөмһөрө ҡойолоп ятмаç. Бындай мәлдә кешене бимазаламаһаң, уйҙары менән яңғыҙ ҡалдырһаң, һәйбәт була торған. Кәрәк тип тапһа, үҙе һөйләр әле. Миңзифа саң баçылырлыҡ ҡына итеп өçтән-мөçтән иҙәндәрен һөртөп сыҡты. Һөт айырҙы, ҡаймаҡ беште. Төшкөләккә ит һалғайны, ашын бешереп алды. Ул арала төшкө ашҡа Илһам ҡайтты. Ҡапҡа шығырлап асылғанын ишеткәс, Резеда тертләп, урынынан һикереп килеп торҙо. Ай аллам, тик ятасы! Нимә уйларҙар бит! Тиҙ генә сәсен тарап үрҙе, күлдәген алыштырҙы, күҙ-ҡаштарын төҙәткеләне. Кәйефенең алама икәнен һиҙмәһен. Соландан килеп ингән ҡәйнәһе бер ни булмағандай төҙәнеп-яһанып алған килененә сәйер итеп ҡарап ҡуйҙы.

- Ғәфү ит, ҡәйнәм, ятҡайным, ауырайып тик ятамсы. Ғүмерҙә булмағанды, - тип аҡланырға тотондо. - Илһам ҡайтты. Минең көпә-көндөҙ карауатта аунап ятҡанды һиҙеп ҡалмаһын инде, әллә ни уйлар...

- Ярай, ярай, була торған хәл, тормош бит. Ауырып та китәһең. Әллә, мин әйтәм, урамда берәйһе алама һүҙ әйттеме...

- Юҡ-юҡ, ҡәйнәм! Һин нимә! Бөтәһе лә килен тип яратып ҡына тора. Шул хәтлем рәхәт булып китә күңелгә, - тип ихлас йылмайырға тырышты. - Барыһы ла бигерәк һәйбәттәр.

Яһалма кәйеф булдырып, Илһамды ҡаршы алырға тышҡа сыҡты. Уныһы кәләшен ҡосаҡлап, битенән үбеп алды. Резеда ҡорт саҡҡандай ситкә тайшанды.

- Һин нимә, ҡәйнәм күреп ҡалһа! - тине ул уңайһыҙланып.

- Күрһә ни, мин сит ҡатындарҙы ҡосаҡлап йөрөмәйем бит...

Аһ! Уның был һүҙҙәре ҡыҙҙың йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалды. Әйтерһең, Илһам уға төрттөрә. Юрамал ғына, был нимә тиер икән, тип һынап ҡарауы. Резеданың ҡапыл күҙ алдары ҡараңғыланып, сайҡалып ҡуйҙы. Кәләшенең йөҙөндәге үҙгәреште шул ике арала һиҙеп тә ҡалды Илһам:

- Ни булды, кәләш? Әллә берәй ярамаған нәмә әйттемме? - тип һорай һалды борсолоп.

- Юҡ-юҡ! Бер ни булманы!

Йыуынғанында һабынын, таçтамалын биреп, иренең эргәһендә торҙо Резеда. Динә: "Иреңде бигерәк иркәләтәһең. Яман өйрәнеп китһә, белерһең әле!" - тип шаяртҡан булып бармаҡ янап ҡуйһа ла, Илһам янында кәрәк-кәрәкмәгәнгә өйөрөлөп-сөйөрөлөргә кәңәш итмәһә лә, Резедаға ирен бала кеүек тәрбиәләү ифрат оҡшай. Шунан ҙур кинәнес ала ул.

Төшкө аш мәлендә лә Резеданың башынан Сәйет сыҡманы. Уға ашарға алып барырға кәрәк. Нисек? Ниндәй һылтау менән аш тултырып алыр? Ҡәйнәһе берәй ҡайҙа китһә яҡшы булыр ине лә... тышҡа сығырға уйында юҡ. Берәйһе Сәйеттең Ынйыбикә апайҙарҙа ятыуын һиҙеп ҡалмаһын тип борсолдо ҡатынҡай. Шуларҙы уйлап, тыныс ҡына ултыра алманы: йә ҡалағын яңылыш төшөрөп ебәрә, йә икмәген. Йә башлаған телемен ашап бөтмәй, икенсеһен ала. Үҙе лә һиҙмәçтән, аяҡтары менән "шайтанын саҡыра". Быларҙың береһе лә ҡәйнәһенең осло күҙенән ысҡынманы. Килене менән ни булғанын аңларға тырышты. Әлбиттә, насар кәйефен күрһәтмәй, улы алдында өлтөрәп тороуы һәйбәт, әммә... нимәлер йәшерә лә баһа! Илһамды күрәләтә алдай килеп сыға түгелме һуң? Улына өндәшмәй ҡалып, Миңзифа килененең ҡырын эшен йәшерергә ярҙам итмәйме? Шулай ҙа аңын-тоңон белмәйенсә, ҡыçылмаçҡа ҡарар итте. Төшкә саҡлы ятҡан икән! Бынан ғына донъя емерелмәй. Улы менән киленен юҡтан ғына талаштырып ҡуйыуы ла бар ауыҙын самаламай асып. Бәлки, арып та киткәндер, нисәмә көн инде туҡтауһыҙ йүгерә. Киленен һаҡлар кәрәк, өҙлөгөп тә ҡуйыуы бар.

Ашап алғас Илһам, биш минут ҡына ял итеп алам, тип йоҡо бүлмәһенә инде. Резеда һауыт-һаба тирәһендәге эштәрен йәһәт кенә тамамланы ла, уның эргәһенә ашыҡты. Ире кисә килгән гәзиттәрҙе ҡараштырып ята ине. Ул бер көндөкөн дә ҡалдырмай, баштан алып аҙағынаса уҡып сыға. Шуға күрә илдәге бөтөн яңылыҡтарҙың уртаһында, һәр мәсьәләгә үҙ ҡарашы, үҙ фекере бар. Ә Резеданың ҡулына гәзит-журнал алмағанына нисәмә йыл инде. Иренә ҡарап, уға хатта оят булып китә.

- Арыныңмы? - Резеда уның янына килеп ултырҙы, ҡулын маңлайына ҡуйҙы.

- Янымда илһам, дәрт биреп торғанында, арып була тиме ни?

- Илһам, гәзитенән айырылып, ҡатынына иркәләп ҡараны.

- Эй, юханы!..

- Ысын! - Иренең күҙҙәрендә оçҡондар ҡабынды. - Хәҙер уйлайым да, быға тиклем һинһеҙ нисек йәшәнем икән, тип аптырайым. Тормошомдоң бөтөнләй ҡыҙығы ла, мәғәнәһе лә булмаған.

- Хәҙер бармы һуң?

- Әлбиттә! Һорап тораһың тағы... Тик бына... һинең менән ниҙер булған кеүек бөгөн. Нимәгәлер бик борсолаһың...

Әртислек һәләте бирелмәгәс, бирелмәгән инде Резедаға! Тойғоларын әҙерәк кенә лә йәшерә белмәй ҙә баһа! Улай тиһәң... Элекке тормошо тик театрҙан ғына торҙо түгелме һуң? Харап шәп уйнай торғайны бит һуң. Нәфрәт йәшәгән ерҙә, бәлки, икейөҙлөләнеп булалыр, ә бында иң ихлас хис-тойғолар. Алдашыуға, яһалмалылыҡҡа урын юҡ. Һөйгән йөрәк кенә шулай һиҙгер булалыр.

- Төштән һуң эшкә бараңмы, Илһам? - Резеда уның һорауын яуапһыҙ ҡалдырҙы.

- Барам! Элек, бәлки, йыбаныр инем, хәҙер бит мин яңғыҙ түгел, минең ғаиләм бар!..

Ана бит ҡайһылай өҙөлөп тора ире. Ә ул?! Ҡайҙан килеп сыҡты был Сәйете! Уф, Аллам...

- Мин һине эшкә оҙата алмаçмын инде. Ынйыбикә апайҙың этен ашатып киләм. Ас торалыр, иртән ул турала уйламағанмын да!

- Шундай ҙур хужалыҡты алып ҡалғас, бармай булмаç.

- ... Ҡош-ҡортона ем һалаһы, ҡаҙҙарын ҡарайһы бар. Йылғаға төшөргәйнем, юғалып ҡуймаһындар тип ҡурҡам.

- Бар-бар, уны ниңә миңә әйтеп тораһың?

- Әлләсе... Һин - минең ирем дә.

- Булһа һуң. Улай һәр аҙымыңды әйтеп йөрөһәң, миңә уңайһыҙ.

Ә Резеда һәр баçҡан аҙымына хисап биреп өйрәнгән. Кемдәндер һорамайынса, кемгәлер әйтмәйенсә эшләп була икәнен башына ла килтергәне юҡ. Уның өçтөнән һәр ваҡыт контроль булырға тейеш, тип ҡабул иткән.

Илһам уның артынан йылмайып ҡарап ҡалды. Хужабикә!.. Бөтөн яҡлап ҡайғыртып, тырышып йөрөгән көнө. Алла бирһә, балалары ла булып китһә... Ҡыҙыҡ, Илһам менән тап булышҡансы ҡайҙарҙа, ниҙәр ҡылып йөрөнө икән? Берәйһен яраттымы? Уйҙары ошо тәңгәлгә килеп еткәс, етмәһә, таныш түгел ир йөҙөн күҙ алдына баçтырғас, һикереп тороп уҡ ултырҙы. Кит, әллә нәмә уйлап ултыра! Егете булған хәлдә лә ул инде тарихта тороп ҡалды. Иң мөһиме, киләсәктә булмаһын ундай ғишыҡ-мишыҡтар... Резедаһының йылмайыуын, әйткән һүҙҙәрен иçенә төшөргәндән һуң, күңелен яңынан йылылыҡ биләне, серемгә китте.

Эткә тип ҡәйнәһе һөйәктәр, аш әҙерләп ҡуйған, хәҙер Резедаға Сәйеткә тип аш һалып алырға кәрәк. Нисек шик тыуҙырмай ғына ҡыланырға? Ҡәйнәһе һаман аш-һыу бүлмәһендә урала. Бөгөн был тәңгәлдә Резедаға ял бирергә булды, ахырыһы. Ҡатынҡай үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Уның ни ҡылырға йөрөгәнен барыһы ла белгән төçлө.

Тегендә Сәйет ҡотороналыр. Резеда кухняға инде. Ҡәйнәһе ҡамыр баçа.

- Нимә бешерәһең, ҡәйнәм? Ниңә миңә генә өндәшмәнең, үҙем баçыр инем әле.

- Һин был йортҡа төшкәне бирле ҡул ҡаушырып тик ултырам, ялҡытты. Ғүмер баҡый башҡарған эштәрем һағындырып та китте. Танһығымды ҡандырып алайым, тинем, - тип көлөп ҡуйҙы. Күренеп тора, ысынлап һағынған аш-һыу эшен. - Һин, килен, ял ит. Миңә лә, минең улыма ла һау булыуың кәрәк, - тип борсолоуын белдерҙе ҡәйнәһе.

- Әлләсе, үҙең әйтмешләй, ҡәйнәм, миңә лә эш танһыҡ. Ҡалала бындай йорт эше эләкмәй бит. Ашарға бешереү ҙә мотлаҡ түгел, магазинда йәнең теләгән нәмә һатыла, яңғыҙ башыңа күп кәрәкме ни, алып ҡайтып йылытаһың да ашайһың.

Резеда шулай хәбәрен һөйләй-һөйләй бер литрлыҡ банкаға киçелгән һалманан бешерелгән аш тултыра башланы.

- Уны ни эшләйһең, килен?

Ҡәйнәһе, бәлки, иғтибар итмәç, тип өмөтләнгәйне лә, килеп сыҡманы...

- Тегендә барып киләйем тигәйнем. Эттәре ас тора бит.

- Аһ-аһ, эткә ундай аш ҡоя тиме кеше? Ана бит һикелә ҡоштабаҡта ултыра эткә тигән аҙыҡ.

- Ул үҙебеҙҙекенә түгелме ни?

- Булһа ни! Икеһенә лә етә ул. Яртыһын һалып ал ана...

- Ярай инде, аш алдым бит...

Резеда тулҡынланғанын һиҙҙермәçкә тырышты. Оятынан ер тишегенә инеп китергә әҙер ине ул был минутта. Банканы ҡапҡас менән ябып, пакетына ултыртты. Ҙур-ҙур итеп теленгән бер нисә телем икмәк, һыуытҡыстан ҙур ғына киçәк ит һалып алды.

- Икмәк тә әҙерләп ҡуйғанмын... - ҡәйнәһе был юлы тауышын күтәрә биреберәк өндәште. - Ит менән генә һыйларға, нимә, эттәре особый тиһеңме әллә?

- Юҡ та...

Резеда һөйләнеп йөрөү ыңғайға эткә тигән аҙыҡтың да яртыһын һалып алды ла, тышҡа атылды. Уф!.. Нимә генә уйланы икән ҡәйнәһе? Ғәрлек бит! Әммә был турала оҙаҡ көйөргә ваҡыт юҡ, Сәйеттең туҡмағынан ҡурҡа.

**(Дауамы. Башы 20-22-се, 24-26-сы һандарҙа).**

***✓ Коллекциямда мин ысын башҡорт ҡыҙҙарының асылын күрһәтергә тырыштым - улар ҡыйыу, сая ғына түгел, ә нескә күңелле, һылыу, изге йөрәкле, кешелекле.***



*АФАРИН!*

**Кейгән кейемебеҙ беҙҙең кәйефкә лә, үҙ-үҙебеҙҙе нисек тотоуыбыҙға ла йоғонто яһай. Бөгөнгө көндә бөтәһе тарафынан да ҡабул ителгән нормалар, тәртип, ҡағиҙәләргә ярашлы йәшәүебеҙ беҙгә йыш ҡына үҙ булмышыбыҙҙы, стилебеҙҙе табыуҙы ауырлаштыра. Бик һирәктәр генә ошо ҡағиҙәләргә ҡаршы барып, үҙ булмышына тоғро ҡала. Һәм был юҫыҡта беҙгә ниндәйҙер кимәлдә модельерҙар ҙа ярҙам итә. Уларҙың кейемгә күсерелгән фантазиялары беҙҙең күңелдәрҙә булып та тормошҡа ашырылмаған уйҙарыбыҙҙы асырға ярҙам итә. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - йәш, талантлы модельер, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһының II курс талибәһе - Айгөл Айҙар ҡыҙы КИРАМОВА. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Белорет ҡыҙы күп кенә бейеклектәр яуларға өлгөргән дә инде. Уның "Фактор Востока-2009" бәйгеһендә - беренсе (Өфө), 2009 йылда Өфөнөң Киров районы хакимиәте уҙғарған мода бәйгеһендә - өсөнсө, 2010 йылда "Евро-Өфө-Азия" йәштәр форумында икенсе урын яулауы күпте һөйләй. Һуңғы уңыштарының береһе - быйыл Мәскәү ҡалаһында уҙғарылған "Этно-Эрата" юғары Халыҡ-ара милли костюмдар бәйгеһендә өсөнсө урын яулауы.**

# МАТУРЛЫҠТЫ ҠУЛЛАНА БЕЛЕҮСЕНЕ...

## модельер, тиҙәр

**▸ Айгөл, ошо бәйге хаҡындағы тәьҫораттарың менән бүлеш әле...**

- Был бәйгелә Рәсәйҙең күп төбәктәренән, шулай уҡ Бүрәт һәм Әзербайжан республикаларынан, Швейцариянан 50-нән ашыу модельер ҡатнашып, үҙ эштәрен күрһәтте. Мин ҡатнашҡан "Заманса костюмда этник мотивтар" номинацияһына иң күп - барлығы 30 эш тәҡдим ителгәйне. Конкурстың беренсе туры Мәскәү ҡалаһының Милли йортонда үткәрелһә, Гала-күрһәтеү Хөкүмәт йортонда уҙғарылды.

Минең кейемдәр коллекцияһы "Һунарсы ҡыҙ" тип аталып, ул 4 костюмдан торҙо. Коллекциямдың төп элементтары итеп йәйә һәм уҡты алдым, йәғни һәр костюмда ошо элементтар ҡулланылды.

Жюри ҡарамағына тәҡдим ителгән эштәрҙең сифат һәм художество яғынан төрлөһө булды. Тағы ла шуны әйтеп үтергә кәрәк: был бәйгелә студенттар ҙа һәм инде ныҡлап аяҡҡа баҫҡан модельерҙар ҙа бер категорияға ҡуйылып баһаланды, әле уҡып ҡына йөрөгән модельер менән үҙ ательеһы булған модельерҙарҙың эштәре бер үк кимәлдә ҡаралды. Шуны аңлатып үтергә кәрәктер: студент туҡыма алыуҙан башлап, бесеү, тегеүгә тиклем үҙе эшләй. Ә ательелары булғандарҙың инде һәр эшенең үҙ оҫтаһы бар, кемдер туҡыма һайлай, кемдер бесә, икенсеһе тегә, йәғни модельер үҙенең уйлаған образын, буласаҡ костюмды ҡуҙаллап, уны бары тик ҡағыҙға ғына төшөрә.

**▸ Ә ни өсөн һин тап йәйә һәм уҡты төп элемент итеп алырға ҡарар иттең?**

- Был эшемдә мин ир-егеттәр костюмын ҡыҙҙарға кейҙерҙем. Әлбиттә, костюмдарҙы заманлаштырҙым, төрлө материалдар ҡулланып эш иттем. Беҙҙең халыҡ элек-электән үҙ ере, азатлығы, теле һәм дине өсөн көрәш алып барған. Был көрәштәрҙән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла ситтә ҡалмаған. Шулай уҡ һунар ҙа беҙгә ят түгел. Коллекциямда мин ысын башҡорт ҡыҙҙарының асылын күрһәтергә тырыштым - улар ҡыйыу, сая ғына түгел, ә нескә күңелле, һылыу, изге йөрәкле, кешелекле. Бына барлыҡ ошо сифаттарҙы күрһәтеү минә мөһим ине һәм үҙ теләгемә ирешкәнмендер, тип уйлайым.

**▸ Белеүемсә, костюмдарыңды тамашасы һәм жюри алдына сығарыуҙа "Һылыуҡай" студияһы ҡыҙҙары ярҙам иткән...**

- Эйе, "Һылыуҡай" студияһы ҡыҙҙарының ярҙамы ҙур булды. Һәм, әйтеп китергә кәрәк, улар тик минең генә түгел, ә башҡа модельерҙарҙың да коллекцияларын ҙур ихласлыҡ, яуаплылыҡ менән күрһәтте. Ҡыҙҙарҙың һәр береһе модельер уйлаған образға инеп, кейемдәрҙең асылын күрһәтә алды. Был бик мөһим момент булып тора, сөнки моделдәр ошондай профессионаллеккә эйә булмаһа, тамашасы модельерҙың нимә әйтергә теләгәнен күрә һәм аңлай алмаясаҡ. "Һылыуҡай" студияһы минә Өфөлә лә ҙур ярҙам күрһәтә.

**▸ Ошондай ҙур кимәлдә еңеү яулаған коллекцияңды ижад итеүҙә кемдәрҙең ярҙамы тейҙе?**

- Был коллекциямдың уңышында уҡытыусыларымдың - Ҡотлоярова Елена Владимировна һәм Йәнбухтина Әлмира Ғәйнулла ҡыҙының өлөшө ҙур. Елена Владимировна - башҡорт костюмдары, ә Әлмира Ғәйнулла ҡыҙы башҡорт орнаменттары тураһында бик күп файҙалы һәм кәрәкле мәғлүмәттәр бирҙе. Шулай уҡ етәкселәрем Хәбибуллина Любовь Валерьевна һәм Андриянова Ольга Ростиславовна ла ҙур ярҙам күрһәттеләр. Улар эш барышында төрлө тәҙәтмәләр индерҙеләр, кәңәштәр бирҙеләр.

**▸ Ә модельер булыу һинең бала саҡ хыялымы?**

- Шулай тип әйтһәң дә булалыр. Бала саҡта модельер булыу буй етмәҫлек хыял булып күренә ине. Телевизор аша ғына күреп белгән был һөнәр хаҡындағы хыялымдың ҡасан да булһа ысынбарлыҡҡа әйләнеүен күҙ алдыма ла килтермәнем. Бәләкәйҙән үк был орлоҡ минең күңелдә шытып килгәндер, сөнки 3-4-се синыфтарҙа уҡығанда айырым бер дәфтәр тотоп, унда ҡыҙҙар һүрәте төшөрөп, уларға төрлө-төрлө кейемдәр уйлап сығарып һүрәттәр эшләй инем. Ә 6 йәшемдә апайым теген машинаһында тегергә өйрәткәс, ҡурсаҡтарыма һәм башҡа уйынсыҡтарыма тик үҙем генә теккән кейемдәрҙе кейҙереп "үҫтерҙем". Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға килгәс, минең юлдар икенсе тарафтарға ла боролоп алды, гимназияла мин үҙидаралыҡта президент вазифаһынан тыш, тағы ла "Интернатым - пар ҡанатым" тип исемләнгән гәзиттең мөхәррире лә булдым. Шул осорҙарҙа журналистика юлынан китергә лә уйлап ҡуя торғайным, тик әлеге һөнәрем үҙенә нығыраҡ тарткан, күрәһең. Әлбиттә, интернатта уҡыған дәүерҙә тегеү шөғөлөнән айыҫлашманым. 11-се синыфҡа уҡырға килгәндә мин тик үҙ эскиздарым буйынса һәм үҙем теккән кейемдәрҙе генә кейә инем.

**▸ Айгөл, кем ул, һинеңсә, модельер?**

- Модельер - ул матурлыҡты, тирә-яҡтың гүзәллеген күреп-аңлап, ошоно кейемдәр аша күрһәтә белеүсе. Ҡыҫҡаһы - ул матурлыҡты ҡуллана белеүсе.

**▸ Һинең эшеңдә иң ҡыҙыҡлыһы һәм иң ауыры ни?**

- Минең өсөн иң ҡыҙыҡлыһы - үҙ эштәремдә этник мотивтар менән эшләү мөмкинлеге. Уларҙы бөгөнгө заманға яраҡлаштырып, халыҡҡа сығарыу. Ә иң ауыры - ваҡыт тарлығы һәм финанс мәсьәләһе.

**▸ Ошо юҫыҡта эшләү, төрлө коллекциялар булдырыу өсөн һиңә нимәләрҙән баш тартырға тура килә?**

- Бер бөтөн коллекция булһынмы ул, бер костюм өҫтөндә эш итеүме - һин барлыҡ ваҡытыңды тик ошо эшкә бағышлайһың. Тулыһынса ижад итеү процесына сумаһың. Бар тирә-яҡты, дуҫтарыңды, ҡайһы саҡта ашау-эсеүеңде онотаһың. Һинең уйҙарыңда әлегә тик ҡағыҙ битендә генә булған образды, кейемде ҡул менән тотоп ҡарау мөмкинлеге тыуғанға тиклем эшләү ҙә эшләү. Ошо эште аҙағына һәм сифатлы итеп алып барып еткереү кәрәк.

**▸ Модельерға ниндәй сифаттар хас булырға тейеш?**

- Бер урында оҙаҡ ултыра алыу. Фантазия, ныҡышмалылыҡ, стилде тоя белеү, бәлки, башҡалар аңлап етмәгән ниндәйҙер матурлыҡты күреп, уны тотоп ала белеү.

**▸ Уйҙарың, пландарың ниндәй?**

- Артабан да башҡорт орнаменттары, гөмүмән, башҡорт халҡына ҡағылған этник мотивтарҙы ҡулланып, костюмдар һәм коллекциялар ижад итеү, уларҙы халыҡҡа сығарыу. Беҙҙең халыҡта дизайнерҙың фантазияһы йөҙөп йөрөп эшләрлек, үҙ эштәреңдә ҡулланырлыҡ бай һәм матур әйберҙәр күп. Шулай уҡ был конкурс менән генә сикләнеп ҡалмай, башҡа конкурстарҙа ла ҡатнашырға, үҙ эштәремде күрһәтергә һәм еңергә. Сөнки ошондай бәйгеләр модельерға бер урында туҡтап ҡалмаҫҡа, икеләтә көс һәм тырышлыҡ менән ижад итергә стимул өҫтәй. Һәм, әлбиттә, минең өсөн бөгөн уҡыу, үҙ һөнәремдең барлыҡ нескәлектәрен һәм үҙенсәлектәрен тәрән итеп өйрәнеү тәүге урынды алып тора.

**Гөлназ САФУАНОВА.**




**Уртала - Айгөл Кирамова.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫ...

## аллергиянан ҡотҡарыр

■ Кембридж университеты ғалимдары белдереүенсә, депрессиянан ябай кетчуп ҡотҡара ала. Тик күңел яраларына дауа булһын өсөн кетчуп ҡағиҙәгә ярашлы әҙерләнергә һәм унда томат һәм ҡыҙыл борос күп булырға тейеш. Тап томат һәм ҡыҙыл бороста "бәхет гормоны" - серотонин күп. Кетчуптың шулай уҡ яман шештәргә ҡаршы тороу үҙенсәлеге лә бар, был аҙыҡты яратыусылар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә лә бирешеп бармай.

■ Бөйөк Британияның Уорвин университеты ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, йорт хайуандары менән уйнарға яратҡан балалар төрлө сирҙәргә бирешеп бармай. Эксперттар 474 баланы тикшереп, уларҙа аллергияның да һирәгерәк осрауын билдәләгән. Бәхтиһән, йорт хайуаны булмаған өйҙәрҙә йәшәүсе балаларҙың 33 проценты аллергияның теге йәки был формаһы менән яфалана икән. Ә бесәй йәки эт менән тығыҙ аралашҡан балаларҙың 77 проценты был сиҙең нимә икәнен дә белмәй, сөнки был осраҡта бала организмына эләккән бактериялар уның иммун системаһын әүҙемерәк эшләргә мәжбүр итә. Һөҙөмтәлә, баланың организмында аллергияға ҡаршы матдәләр барлыҡҡа килә. Бигерәк тә 5 йәштән 8 йәшкә тиклем баланы йәнлектәр менән аралашыуҙан тыйырға ярамай.

■ Билдәле булыуынса, һөт составындағы кальций һөйәктәрҙе нығыта. Әммә Төньяҡ Калифорнияның (АҠШ) Дюка университеты тикшеренеүселәре һөт аҙыктары менән артыҡ мауыҡмаҫҡа кәңәш итә. Ғалимдар әйтеүенсә, организмдағы артыҡ кальций ҡан тамырҙарының тарайыуына, был, үҙ сиратында, оло кешеләрҙә аҡыл еңеләйеүенә килтереүе ихтимал. Бынан тыш, кальций үҙләштерелеүенә ярҙам итеүсе D витамины мейегә насар тәьҫир итеүе бар. Һөт - зарарлы аҙыҡ түгел, шулай ҙа уны самаһын белеп ҡулланығыҙ.

■ Япон ғалимдары ябай һуғандың уникаль үҙенсәлектәрен асыҡлаған. Һуған составындағы матдәләр баш мейеһенә ыңғай йоғонто яһап, ҡартайыу һәм хәтер насарайыу процестарын аҡрынайтырға һәләтле. Был әүҙем көкөрт ҡушылмалары ярҙамында башҡарыла, улар организм тарафынан еңел үҙләштерелә һәм шунда уҡ мейенең төп зоналарындағы хәтер һәм эмоциялар өсөн яуап биргән күҙәнәктәрҙе хәрәкәткә килтерә.

■ АҠШ-тың Джеймс Мэдисон университеты ғалимдары асыҡлауынса, күнекмәләрҙән һуң шоколадлы һөт йәки какао эсеү мускулдарҙы спортсылар өсөн тәғәйенләнгән махсус эсемлектәргә ҡарағанда тиҙерәк нормаға килтерә. Какаолағы аҡһым һәм углеводтар тиҙ арала мускул туҡымаларының энергия запасын тулыландыра. Етмәһә, шоколадлы һөт калий, кальций һәм магнийға бай, улар организмда һыу запасын кәрәкле кимәлдә тотоу һәләтенә эйә.

■ Ҡайһы бер аҙыҡ-түлек арыуҙы бөтөрөп, кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, стресс менән дә көрәшә икән. Бындай аҙыҡ-түлек исемлеген Саар университетының тикшеренеүселәре төҙөгән. Был исемлеккә ингән йәшелсә һәм емеш-еләк тормоштоң кире яҡтарын еңелерәк кисерергә ярҙам итә. Беренсе урында әфлисун тора. Унан һуң исемлектә татлы картуф - батат дауам итә. Күрәгә лә стресҡа ҡаршы яҡшы дауа. Көс биреүсе һәм баш ауыртыуынан ҡотҡарыусы шпинатты ла йышыраҡ ҡулланығыҙ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Беҙҙең республикала йыл һайын 11 мең онкологик сирле теркәлә. Медицина карталарына яман шеш тигән мөһөр ҡуйылыуҙы ғүмерҙәренә хөкөм сығарылған кеүек ҡабул иткән ауырыуҙарҙың нимә кисереүен күҙ алдына килтереүе ҡыйын.**



# ЯМАН ШЕШ АУЫРЫУЫ...

## стресс һәм тәмәкенән барлыҡҡа килә

### Йәшәү рәүешен ғәйепләгеҙ

Онкологик сирҙәр менән ирҙәр һәм ҡатындар 50 йәшкә тиклем бер үк кимәлдә ауырый. 60-70 йәшлектәр араһында яман шеш менән сирләүселәр ҡатын-ҡыҙҙар араһында күберәк осрай. Быны ҡатындарҙың ғүмере ирҙәрҙекенә ҡарағанда оҙайлыраҡ булыуы менән бәйләйҙәр. Ирҙәр, Рәсәй күрһәткестәре буйынса, уртаса 60 йәшкә тиклем йәшәй. Әгәр ауырыусылар нисбәте теге яҡтан да, был яҡтан да яҡынса бер төрлө булһа, ә бына онкологик сирҙәр ирҙәрҙә һәм ҡатындарҙа төрлөсә була. Әйтәйек, ирҙәрҙә үпкә, ашҡаҙан яман шеш ауырыуы һәм простата биҙе йыш осрай. Әгәр Рәсәйҙә онкологик сирҙәрҙән простата биҙе бишенсе урында килһә, Европала ул беренсе урында тора. Онкологтар яҡын арала ошо уҡ хәл беҙҙә лә күҙәтеләсәк, тип фаразлай. Ҡатындарҙа һөт биҙе яман шеше һәм гранулез күҙәнәкле шеш нығыраҡ таралған.

Яман шеш, ябай һыуыҡ үткән кеүек, юҡтан ғына барлыҡҡа килмәй. Бөтә бәлә кешенең йәшәү рәүешенән тора. Дөрөҫ туҡланмау, тәмәке тартыу, алкоголле эсемлектәрҙе сама белмәй ҡулланыу, стрестар - былар бөтәһе лә яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килтереүсе төп сәбәптәр. Быларға йәшкә бәйле гормональ дисбалансты һәм шешеү процесын өҫтәһәгеҙ - һеҙгә мотлаҡ онкологҡа тикшерелергә барырға кәрәк.

Яман шеш ауырыуы һуңғы стадияға еткәндә асыҡланһа һәм ауырыуға бер нисә ай ғына йәшәргә ҡалһа, табиптар ауырыуға бер нисек тә ярҙам итә алмай. Әммә күп осраҡта сир үҙе тураһында иртәрәк иҫкәртә башлай. Ауыртыу билдәләре менән оҙатылып килгән осраҡта яман шеште клиника стадияһына тиклем үк асыҡларға мөмкин. УЗИ, МРТ, онкомаркер тип аталған тикшеренеү ысулдары бар, улар сирҙең башланғыс фазаһын үткәрмәҫкә ярҙам итә. Сирҙең үҫеше тураһында уның билдәләре лә әйтә ала, әммә һәр патология төрө өсөн айырым үҙенсәлек хас.

### Утыҙ йәше тулғандарға

Медицина белгестәре фекеренсә, дауалау учреждениеларына мөрәжәғәт итеү сәбәбе булып аңлашылмаған хәлһеҙлек, йоҡо килеү, һүлпәнлек һәм аныҡ булмаған ауыртыныу синдромдары тора. Эске ағзаларҙы тикшертеү тураһында уйланырға ошо етә лә инде. Әгәр һеҙҙе оҙаҡҡа һуҙылған йүтәл йонсотһа, бигерәк тә ҡаҡырыҡта ҡан таптары барлыҡҡа килһә, онкологҡа барыуҙы һуңға ҡалдырырға ярамай. Һанап үтелгән билдәләр үпкәләрҙең сәләмәт булмауы тураһында һөйләй. Тирегә килгәндә, ундағы яман шеш ауырыуҙары тураһында оҙаҡҡа һуҙылған төҙәлмәгән яралар аша белергә була.

Онкологик сирлеләр иҫәбендә булмаҫ өсөн профилактика тураһында онотмағыҙ. Яман сирҙе ваҡытында иҫкәртеү өсөн иң яҡшы ысул - табипҡа күренеү. Был бигерәк тә 30 йәше тулғандарға ҡағыла.

Нәҫелендә онкологик сирҙәр күҙәтелгәндәргә тикшеренеүҙәргә етди ҡарарға кәрәк. Әлбиттә, сир килеһе быуындарға мотлаҡ күсә, тиеү дөрөҫ үк түгел, әммә бындай нәҫелгә күсеү осрағында сир ентекле тикшеренеүҙәр талап итә. Ирҙәрҙә үпкә яман шеш ауырыуы генетик патологияға инмәй, ә бына ҡатындарҙа йыш ҡына һөт биҙе яман шеше һәм гранулез күҙәнәкле шеш нәҫелдән нәҫелгә күсеүсән.

### Миңдәрҙе һаҡларға кәрәк

Яман шеш ауырыуын еңеп сығырға була, әммә сирҙең бер нисә йылдан һуң тағы ҡалҡып сығыуы мөмкин. Онкологтар әйтеүенсә, әгәр радикаль метод менән дауалағандан һуң ауырыуҙа метастаздар ҡалмаһа, ул сирле оҙайлы ғүмергә иҫәп тота ала. Әммә ауырыуҙың организмында "йоҡлап ҡалыусы" яман шеш күҙәнәктәре һаҡланып ҡалһа, улар иртәме, һуңмы, үҫешә башлай. 17 йыл үткәндән һуң сир үҙе тураһында яңынан белгертмәһә, онкологик сирҙе тулыһынса еңдем, тип әйтергә мөмкин.

Әгәр элек яман шеш менән зарарланған ағзаны киҫеп алһалар, хәҙер табиптар ағзаны һаҡлап ҡалып операция яһарға өйрәнде. Бындай процедурала ауырыуҙарға үпкәләрен, боғарлаҡтарын, һөт биҙҙәрен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге тыуҙы. Ирҙәр өсөн был бигерәк тә мөһим, сөнки простата биҙе яман шеше ваҡытында уны тулыһынса алып ташларға тура килә ине. Яңы методика буйынса ауырыуға операция яһағанда зарарланған ағзаға радиоактив орлоҡтар индерәләр. Микрокапсулалар простатаны дауалай, әммә күрше ағзаларҙы нурландырмай һәм ауырыуҙың үҙе өсөн дә зарары юҡ.

Яҙ һәм йәй онкологик сирҙәрҙән тиреләге яман шеш ауырыуҙары әүҙемләшә. Ә һыуыҡ ваҡыттарҙа тире ҡатламдарын ҡояштың ультрафиолет нурланыуынан кейем һаҡлай.

Тире менән бергә зарарлы тәьҫирҙәрҙән миңдәр ҙә һаҡлаусыһыҙ ҡала. Шуны иҫтә тоторға кәрәк: пигмент таптар күп ҡояш нурҙарын һәм тышҡы мөхиттең ҡуҙғытҡыс факторҙарын яратмай. Әгәр миң ҙурайыуын йәки пигмент таптарының төҫө үҙгәреүен һиҙһәгеҙ, онкологка барырға кәңәш ителә. Был яман шеш ауырыуының беренсе билдәләре.

Ҡояштан тыш, тирегә һуңғы ваҡытта ғүзәл заттарыбыҙ ғына түгел, ир-егеттәр ҙә йыш файҙаланған солярий ҙа тәьҫир итә. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, зарарһыҙ ҡарайыу өсөн һеҙ нурланыуҙың иң оптималь миҡдарын үтергә тейешһегеҙ. Шоколад төҫөн сағылдырыр өсөн күптәр ҡыҙыныуҙың ваҡытын арттырып ебәрә. Шуның менән бергә яһалма ультрафиолет нурланыуҙы яратыусылар янып ҡына ҡалмай, шулай уҡ тиренең яман шеш ауырыуҙарына ла юлыға.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

# ТАНАУҘАН ҠАН КИТҺӘ...

Танауҙан ҡан китеү - бик күңелһеҙ осраҡ, шулай уҡ бер аҙ хәүефле лә. Әгәр уны ваҡытында туҡтатмаһаң, ул күп ҡан юғалтыуға килтерергә мөмкин. Кешенең танауҙан ҡан китеүендә төрлө сәбәптәр бар. Был кешенең танауында ҡан тамырҙары тар булғандан да барлыҡҡа килә. Шуға күрә һәр киҫкен хәрәкәт тә (мәҫәлән, кеше ҡапыл һемгерҙе йәки танауын һөрттө, ти) ҡан китеүгә килтерергә мөмкин.

Артериаль ҡан баҫымы юғары булған кешеләрҙең танауынан ҡан йыш китә. Был кешеләрҙең танауындағы ҡан тамырҙары баҫымды күтәрә алмай һәм шартлай, шулай итеп, танауҙан ҡан китә башлай.

Һәр кешенең, хатта сәләмәтлеге яҡшы булған кешенең дә баҫымы ҡапыл төшһә, танауынан ҡан китеүе мөмкин. Был осраҡта шулай уҡ ҡан тамырҙары шартлай. Танауҙан ҡан китеүҙең киң таралған сәбәбе булып шулай уҡ ниндәй ҙә булһа танау йәрәхәте, мәҫәлән, танауҙың һуғылыуы тора. Балаларҙа йыш осрай, сөнки улар тик тормаҫтар, хәрәкәтсәндәр.

Әгәр кешенең танауынан ҡан китһә, уға башын артҡа ташлап ятырға һәм ауыҙы менән тын алырға ҡушыла. Ниндәй генә осраҡ булһа ла, ҡан юлын ҡапларға тырышырға кәрәкмәй. Был осраҡта ҡан башҡа сығыу юлдарын эҙләй башлаясаҡ һәм эскә ҡойоласаҡ, хатта боғарлаҡҡа эләгеп, кеше тонсоғорға ла мөмкин.

Баҫым шул тиклем ҡапыл күтәрелеүе мөмкин, күп осраҡта хатта кеше иҫһеҙ ҡолай һәм, өҫтәүенә, уның танауынан ҡан китә башлай. Был осраҡта ҡыҙҡыу еҫле нашатыр спирты ярҙам итә. Уны зыян күреүсенең танауына һөртһәң, кеше һушына килә, ә ҡыҙҡыу еҫ танау тамырҙарын тарайта, һөҙөмтәлә ҡан ағыуы туҡтай.

Танауынан ҡан киткән кешенең елкәһе аҫтына ниндәй ҙә булһа йомшаҡ мендәр (берәй кейемде бөклəп һалырға ла мөмкин), ә танауҙың үҙенә һыуыҡ компресс һалырға һәм шул рәүештә танауҙан ҡан китеү туҡтағансы ятып торорға кәңәш ителә.

Әгәр кешенең гәҙәттәге ҡан баҫымы түбән икән һәм был уға нормаль күренеш, тип һаналһа, баҫымдың күтәрелеүе шулай уҡ танауҙан ҡан китеүенә килтерергә мөмкин. Ундай кешегә врач яҙып биргән дарыуҙарҙы ҡулланырға кәңәш ителә.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# "МИНЕҢ ҠОРҺАҒЫМДА ИКӘН,

## ул минең әйбер..."

**Бала... Күпме наҙ, күпме шатлыҡ-ҡыуаныс ошо һүҙҙә. Туғыҙ ай буйы йөрәк түрендә йөрөткән кескәй генә йән эйәһе, донъяға килеү менән бар булмышыңды биләп ала. Әсә күҙ йәштәре аша шатлыҡлы йылмайып сабыйының тәүге тештәрен, атлап китеүен, мәҙәк һүҙҙәр ләпелдәүен күҙәтә. Балаң әләгеп ҡолаһа - ҡояш тотолғандай, ауыраһа - ер убылғандай була. Үкенескә ҡаршы, сабыйҙың эскерһеҙ күҙҙәренә вайымһыҙ, тупаҫ ҡараштa булған әсәләр ҙә бар донъяла. Күпме бала, ата-әсәһе иҫән-һау булыуына ҡарамаҫтан, етемдәр йортона тапшырыла, ә күпмеһе өйҙә ялсы урынына тотола, туҡмала, ыҙа сигеп йәшәй. Үкенескә ҡаршы, был күренеш ғәҙәти хәлгә әүерелеп бара. Шулай ҙа әсә кешенең донъяға килгән сабыйын үлтереүе - һәр саҡта ла башҡа һыймаҫлыҡ хәл булып ҡалыр.**

...Ул һыуыҡ ғинуар көнөндә балалар, гәҙәттәгесә, уйнарға сыға. Йүгерешеп-шаярып, хәрби комиссариаттың артында ултырған бураға килеп инәләр. Уларҙың иғтибарын мөйөштә ятҡан, ҡара биҙәкле сепрәккә төрөлгән бер нәмә йәлеп итә. Тағатып ҡараһалар - унда... яңы тыуған бала мәйете.

Ошо көндө үк милиция хеҙмәткәрҙәре баланың әсәһен таба. Ауылдан килеп, училищела уҡып йөрөгән 15 йәшлек ҡыҙ булып сыға ул.

Галя (исеме үҙгәртелде) үҙенең ауырға ҡалыуын йәшерергә тырыша. Ятаҡтағы тиҫтерҙәре менән аралашмай, бер бүлмәлә йәшәүсе ҡыҙҙары менән дә һөйләшмәй. Галяға әсәһе бер нисә мәртәбә: "Һин ауырлыһың бит", - тип, шиген белдерә. Тик ҡыҙ үҙенең ауырлы булмауын тылҡый...

Ул көндө Галя, эсе нығ итеп ауырта башлағас, алдан әҙерләнгән сепрәкте ала ла, ятаҡтан сығып китә. Комиссариат артындағы бура эсенә инә. Аяҡтарын бүрәнәгә терәп, көсәнеп, сабыйын тыуҙыра, унан алып килгән сепрәгенә төрөп, балаһын ҡар өҫтөндә ҡалдырып китә. Яңы тыуған сабый ҡышҡы һыуыҡҡа түҙә алмай, йән бирә.

Тәжрибәле судьяны хөкөм эскәмйәһендә ултырған ҡыҙсыҡтың үҙен үтә лә тыныс тотоуы ғәжәпләндерә. Ниндәй генә ҡурҡыныс енәйәтселәр менән эш итеүенә ҡарамаҫтан, судьяның үсмер әсәнең үҙ ғәйебен танымауы, күҙгә туп-тура ҡарап һөйләшеүе аптырата. Бәлиғ булмағандар менән эшләгән милиция хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, Галя үҙенең ғәйебен бөтөнләй танымай. Ҡыҙ: "Ул минең ҡорһағымда булғас, минең әйберем. Уны нимә эшләтһәм дә минең ихтыярымда", - тигән ҡарашта икән.

Тәфтишселәрҙең, милиция хеҙмәткәрҙәренең шундай шиге лә була башта: "Бәлки, баланы үлтерергә кемдер мәжбүр иткәндер, ҡурҡытҡандыр". Ләкин ҡыҙ уларҙың һорауҙарына яуап бирмәй, өндәшмәй ултырыуҙы хуп күрә. Шулай ҙа Галяның 14 йәшендә үк аборт эшләткәнен асыҡлайҙар. Уның йөрөгән егете армияла хеҙмәт итеүе лә билдәле була. Ул: "Мин ҡайтҡансы әсәйемдәргә барып йәшәп тор. Баланы тыуҙыр. Мин ҡайтҡас та өйләнешербеҙ",- тигән. Ни өсөн Галя уның әйткәнен тыңламаған, ваҡытында аборт та эшләтмәгән, һаулығына зыян килтереүҙе хуп күргән?.. Уныһы беҙҙең өсөн ҡурҡыныс япмаға төрөлгән сер.

Галяға бирелгән характеристикала: "Ул йыш ҡына алдаша, аралашып бармай, аҫтыртын, сәбәпһеҙ дәрестәр ҡалдыра", - тигән юлдар бар. Ә бына Галя менән иң күп аралашҡан инспектор: "Галяны мин шундай уҡ алама ҡыҙ тип әйтә алмайым. Ҡыҙ матур ғына, һәйбәт уҡый. Магнитогорскиҙан ҡайтҡас та уҡыуын дауам итмәксе. Бөхтәлекте, таҙалыҡты ярата", - тине.

Судья әйтеүенсә, әгәр Галя 16 йәшкә еткән булһа, биш йылға тиклем иректән мәхрүм ителер ине. Ҡурҡыныс енәйәт ҡылыуына ҡарамаҫтан, ҡыҙ 30 тәүлеккә Магнитогорск ҡалаһының ваҡытлыса изоляциялау үҙәгенә ебәрелде. Судтан һуң судьяға борсоған һорауымды бирмәй булдыра алманым: киләсәктә Галя кейәүгә сығып, бәхетле әсә була алырмы икән? "Дүрт аяҡлы ат та абына, - тине суд рәйесе, - ә был йәш баланың тормошо яңы башлана. Галя мөхәббәтен осратып, балалар үҫтерер, бәхетле булыр, тип ышанғы килә".

Эйе, 15 йәшлек ҡыҙҙың тормошо әле башлана ғына. Ләкин ҡылған енәйәте уға тыныс йәшәргә ирек бирерме икән? Бәлки, балалығы менән ул үҙенең ниндәй вәхшилек ҡылыуын аңламайҙыр ҙа. Әйткәндәй, йәш ҡыҙҙарҙың балаларын үлтереү осрағы ҡабатланып тора. Сабыйҙарҙы сүп-сар йәшниктәрендә, бысраҡ баҙҙарҙа, һыуыҡ подъездарҙа табалар. Нимә был? Кешеләр һәм хайуандар араһында булған һуңғы айырманың юҡҡа сығыуымы? Кешеләрҙең бер-береһенә иғтибарһыҙ, тупаҫ булыуы арҡаһында ҡылынған енәйәт бит был. Күрәһең, шуғалыр, яңы тыуған сабый, ҡар өҫтөндә ҡыш һыуығынан бигерәк, әҙәм заттарының күңел туңлығынан ҡалтырана-ҡалтырана илай төҫлө...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

Аһ-Аһ!

# БАЛА САҠТА ҺӨЙҘӨРГӘН...

## үҫә килә көйҙөрмәһен

Стоматология поликлиникаһында табипҡа сиратта ултырғанда ике өләсәйҙең ейәндәрен нисек әпәләүҙәрен күҙәтергә тура килде.

Тикторҙмаҫ малай йығылып китһә, бер өләсәһе торғоҙа һалып, битен-ҡулын еүеш салфетка менән һөртөп ала, икенсеһе һикереп тороп, бала ҡолаған урында аяғын тыпырҙатып, әпсен-төпсөн уҡый. Бала "Ба..." тип ауыҙын асыуы була - "бабушка" тип әйтеп бөтөргә лә ирек бирмәйҙәр хатта - икеһе ике яғына һалдат һымаҡ "тып" итеп барып та баҫа. Баланың балаһы ҡәҙерләрәк тигәнде ишеткәнем, өләсәйҙәрҙең ейән-ейәнсәрҙәрен иркәләгәнен күргәнем бар, әммә был тиклемен үк күргәнем дә, ишеткәнем дә юҡ ине.

- Табипҡа тешеңде күрһәткәндә иламаһаң, мин һиңә машина алам, - ти береһе.

- Пуля менән ата торған пистолет алырмын, - ти икенсеһе.

- Иламай ғына ултырһаң, өйгә ҡайтҡас, кискә тиклем яратҡан мультфильмыңды ҡарарһың...

- Йәки компьютерҙа уйнарһың...

Өләсәйҙәр ейәндәренең бер алдына, бер артына сыға. Бына табипҡа инергә ваҡыт етте. Доктор береһенә генә инергә рөхсәт итәсәген белһәләр ҙә, ике өләсәй ҙә, сисенеп, ейәндәре менән кабинетҡа инергә йыйынды. Береһе башынан һыйпаны, икенсеһе арҡаһынан һөйҙө, береһенән-береһе уҙҙырып, маладистан һалдырып, бер туҡтауһыҙ маҡтанылар, осондорҙолар малайҙы. Тик күпме генә көтһәм дә уларҙың береһе лә: "Һин үҫкәнһең инде, булаҫаҡ һалдат ҡурҡмай ул", - тимәне.

Балаларын медицина тикшереүе үткәрергә алып килгән башҡа йәш әсәләр ике өләсәйлә биш-алты йәштәрҙәге был малайҙан, бәлки, көнләшеп тә ҡуйғандыр. Ни тиһәң дә, бала менән теш табибына инеү күңелле процедура түгел. Был - беренсенән. Икенсенән, хәҙер бик һирәк ейән-ейәнсәрҙәр ике өләсәйле йәки олатайлы, сөнки йәштәр ғаилә тормошондағы тәүге һынауҙы ла үтә алмай, балаларын өләсәй-олатай һөйөүенән, ата-әсәһен ейән-ейәнсәрен яратыуҙан мәхрүм итеп, айырылышалар бит.

Мин иһә был малайҙы, киреһенсә, йәлләп ултырҙым. Иркәләп, боҙоп бөткәндәр кеүек тойолдо миңә ул бала. Өләсәйҙәрҙе лә аңларға була, әлбиттә. Икеһенең дә берҙән-бер балаларының балаһы булһа, нимә эшләтергә белмәйҙәрҙер йәки шул берҙән-берҙәренең иғтибарын бер-береһенән уҙҙырып нығыраҡ яуларға тырышалардыр. Тик нисек кенә булмаһын, малай кешене самаһыҙ иркәләргә ярамайҙыр.

Баланың тормошҡа яраҡлашыуы бәләкәй саҡта ниндәй инстинкт һалыныуына бәйле бит. Был малайға иһә өләсәләре, артыҡ ҡурсалап, үҙ-үҙен һаҡлау инстинктын ғына һала, миненсә. Ундай баланың ихтыярһыҙ, ҡурҡаҡ булып үҫеүе көн кеүек асыҡ.

...Сират етер-етмәҫтән малай һыҡтай башланы. Табипҡа ингәндә аҡырып илай ине инде. Ул да булмай, миңә лә сират етте. Сыҡҡанда иһә өләсәйҙәр ҙә, ейән дә юҡ ине. Иламаһаң, шуны-быны алып бирәм, тигән вәғәҙәләрен үтәп, магазинға киттеләрме, әллә кискә тиклем компьютер уйнарға өйҙәренә ашыҡтылармы икән?

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Киң фекерләргә өйрән

Ҡасандыр кешеләр ерҙең яҫылыҡ булыуына инанған, бүтәнсә уйлағандан көлгәндәр һәм мыҫҡыл иткәндәр. Шулай уҡ һауала осоп йөрөүсе машина төҙөй аласаҡтарына ышанған ағалы-ҡустылы Райттарға ла барыһы ла көлөп ҡараған. Былар киң масштаблы ябыҡ аң эшмәкәрлегенең асыҡ миҫалдары. Ә ябыҡ аң мөмкин булған бөтә юлдар аша беҙҙең көндәлек тормошобоҙға йоғонто яһай ала.

Мәҫәлән, Алиса класташы Әминде бай тип иҫәпләй, сөнки уның атаһы бәләкәй генә металл пружиналар сығарыусы фабрика хужаһы була. Бер саҡ Алиса әсәһе менән магазинға инә һәм унда Әминдең әсәһе менән бакалея тауарҙары һатып алып торғанын күрә. Алиса аптырай һәм әсәһенә былай ти: "Ни өсөн улар һәр тауарҙың хаҡын ҡарап, арзаныраҡтарын һайлап ала икән, улар бит бик бай һәм теләгән бер әйберен һатып ала ала?"

Ике аҙнанан һуң Әминдең атаһының фабрикаһы банкротҡа ҡала. Баҡтиһәң, улар етештергән пружиналарҙы ҡулланыусы электрон ҡорамалдар яңы технологиялар менән етештерелә башлаған икән. Тауарҙарына һорау кәмегәс, Әминдең атаһының бизнесы көрсөккә терәлә. Әммә Алисала Әминдең матди хәле тураһындағы фекер нығынған була. Улар уҡыған мәктәптә Әминдең ғаиләһе проблемалары тураһында ҡыҙыу фекер алышыуҙар булыуға ҡарамаҫтан, Алиса был һөйләшеүҙәрҙе ишетмәмешкә һалыша һәм барыһын да уҙҙырып, был ғаилә тураһында үҙе күҙ алдына килтергән ысынбарлыҡты башҡаларға еткерергә тырыша. Уныңса, бизнес менән шөғөлләнеү финанс яҡтан именлекте тәьмин итә, шуға ла Алисаның аңы башҡа төрлө аңлатыуҙарға ябыҡ була.

Ябыҡ аң һинең киләсәгеңә лә ныҡлы йоғонто яһай ала. Урта мәктәптең өлкән класс уҡыусылары Билл һәм Джон үҙҙәре уҡырға инергә теләгән колледжға асыҡ ишектәр көнөнә саҡырыла. Улар физика фәне буйынса фекер алышҡан студенттар төркөмөнә килеп ҡушыла. Билл электән был предметты яҡшы белгән кешеләй булып, һүҙгә әүҙем ҡушыла, ысынында иһә, ул бер ваҡытта ла физиканы ныҡлап өйрәнмәй һәм уның белеме һай була. Билл кеүек үк физика тураһында артыҡ әллә ни белмәгән Джон атом төҙөлөшө һәм ғаләмдең барлыҡҡа килеүе тураһындағы һөйләшеүҙәрҙе иғтибар менән тыңлап ултыра. Ул шундыҡ был предмет буйынса белеменең колледжда уҡыусы студенттарҙыҡынан ҡырҡа айырылыуын һәм етешмәгәнлеген аңлай. Билл һөйләшеү барышында үҙен барыһына ҡарағанда ла күберәк белгән кешеләй тотоп, үҙенең наҙанлығын күрһәтә һәм өйөнә ҡайтҡас, ата-әсәһенә: "Был аңра колледжға уҡырға барғы килмәй", - тип әйтә. Джон иһә киреһенсә эшләй. Энциклопедия алып, физикаға ҡағылышлы бөтә нәмәне лә уҡырға тотона. Физика тураһында артыҡ ҡыҙыҡһынмаһа ла, был предметты белмәйенсә тороп, алдына ҡуйған маҡсатҡа өлгәшә алмауын аңлай, был иһә уны артабанғы белемдәргә этәрә. Ул мәктәп китапханасыһы тәҡдим иткән физика фәненә ҡағылышлы бөтә китаптарҙы уҡып сыға һәм һөҙөмтәлә был колледжға уҡырға инә һәм уны юғары билдәләргә тамамлай.

Алдыңа алған идея һәм ҡиммәттәрҙән тайпылмайынса, уның ысынбарлығына ышанып, белем алыуҙы дауам итеү һинең өсөн мөһим булып тора. Тар фекерләү сикле тормошҡа туп-тура юл ул. Үҙеңдән күберәк белгәндәрҙе тыңла һәм һорауҙарыңды бирергә ҡурҡма. Уҡыу һинең белемеңде киңәйтә һәм өйрәнеүгә, аңлауға ишек аса. "Беҙҙең аң - парашютҡа оҡшаш, ул асыҡ булғанда ғына эшләй" - шуны онотма.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 5 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Садовник", 1-я серия. Сериал
22.30 "Московская сага". Сериал
23.30 "Нурсултан: Большая игра президента". К 70-летию Н. А. Назарбаева
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Калифрения". Сериал
01.20 "Американская семейка". Сериал
01.50, 03.05 "Мэри Рейли"
03.00 Новости
04.00 "Дурнушка". Сериал

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 03.40 "Чертово колесо Арно Бабаджаняна"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 87-я серия
18.05 "Ефросинья", 96-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вы заказывали убийство", 1-я и 2-я серии
22.55 "Защита опера". Док. фильм
23.55 "Вести+"
00.15 "Мужская компания". Боевик
00.45 "Молодой Эйнштейн". Комедия
04.30 "Городок"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Русский дубль". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
01.50 Теннис. Уимблдонский турнир. Финал. Мужчины
04.20 "Особо опасен!"
05.05 "2,5 человека"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.10 "Погода"**
**10.10 "Виктория"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.10 "Фильм-детям"**
**12.30 "Солнечная страна". Фильм-концерт**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.10 "Музыка на канале"**
**13.30 "Сельский час"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественый фильм**
**16.40 "Эмиль из Леннеберги"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Призвание - учитель"**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Личность". Я. Ильясов**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Легенды спорта"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 6 ИЮЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Садовник", 2-я серия. Сериал
22.30 "Московская сага". Сериал
23.30 "Курортный роман. Опасные связи"
00.30 Чемпионат мира по футболу 2010. 1/2 финала. Прямой эфир из ЮАР "Городские пижоны"
02.30 "Калифрения". Сериал
03.10 "Американская семейка". Сериал
03.00 Новости
03.30 Док. фильм
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 88-я серия
18.05 "Ефросинья", 97-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вы заказывали убийство", 3-я и 4-я серии
22.55 "По ту сторону жизни и смерти. Ад". Док. фильм
23.55 "Вести+"
00.15 "Грязный Гарри"
02.15 "Кинескоп" с Петром Шепотинником"
03.20 "Горячая десятка"
04.25 "Городок"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Русский дубль". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Главный герой представляет: Анатолий Кашпировский. Возвращение доктора"
00.20 "Таксист"
01.25 "Сталин. Live"
02.20 "Бремя страстей человеческих"
04.20 "Парни из стали"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.20 "Полезные новости"**
**09.30 "Виктория"**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.30 "Не хочу расти одна"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.10 "Музыка на канале"**
**13.30 "Сокращая расстояния". Пермский край**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.40 "Эмиль из Леннеберги"**
**17.10 "Виктория"**
**18.10 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Малый бизнес сегодня"**
**21.00 "Сокращая расстояния". Москва**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.20 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 7 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Садовник", 3-я серия
22.30 "Лия Ахеджакова. Маленькая женщина в большом кино"
23.30 "Человек и закон"
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Калифрения"
01.20 "Американская семейка"
01.50, 03.05 "На острой грани". Комедия
03.00 Новости
04.10 "Дурнушка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Во всем прошу винить "Битлз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 89-я серия
18.05 "Ефросинья", 98-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вы заказывали убийство", 5-я и 6-я серии
22.50 "Взять высоту"
23.25 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. 1/2 финала. Прямая трансляция из ЮАР
02.35 "Девушка-сплетница"
03.30 "Во всем прошу винить "Битлз"
04.30 "Городок"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чистосердечное признание
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Русский дубль". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Таксист"
01.25 "Сталин. Live"
02.25 "К чертовой матери"
04.15 "Парни из стали"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 13.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.20 "Виктория"**
**10.20 "Автогрф". С. Чураева**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.10 Фильм-детям**
**13.10 "Музыка на канале"**
**13.30 "Личность". М. Давлетшин**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 "Байык"**
**16.00 "Книга мастеров"**
**16.40 "Эмиль из Леннеберги"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Сокращая расстояния". Екатеринбург**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Хрустальный соловей-2010"**
**00.00 Художественный фильм". По окончании: погода**

## 8 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
21.00 Время
21.30 "Садовник", 4-я, закл. серии
22.30 "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт
00.10 "Ночные новости"
00.30 "Обмани меня",14-я серия
01.20 "Калифрения". Зак. серия
02.20, 03.05 "Идеально"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 90-я серия
18.05 "Ефросинья", 99-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Вы заказывали убийство", 7-я и 8-я серии
22.55 "Злата Прага и ее русский блеск"
23.55 "Вести+"
00.15 "Кулагин и партнеры"
00.45 "Сыновья"
03.00 "Девушка-сплетница"
03.55 "Кулебякой по диктатору. Гастрономическая ностальгия"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Русский дубль". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Таксист"
01.20 "Сталин. Live"
02.20 "Пятница, 13"
04.10 "Парни из стали"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.20 "Полезные новости"**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.10 "Фильм-детям"**
**13.00, 19.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.10 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**17.00 "Судьба"**
**17.20 "Виктория"**
**18.10 "Учим башкирский язык"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.30 "Сельский час"**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Пятая четверть"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Куласа"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 9 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Розыгрыш"
23.00 "Закрытый показ". "Первый отряд". Полнометражный анимационный фильм
01.50 "Пробуждение". Психологическая драма
04.00 "Открытки с края бездны". Комедия

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мой серебряный шар"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 91-я серия
18.05 "Ефросинья", 100-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Кривое зеркало". Театр Евгения Петросяна"
21.10 "Девчата"
00.05 "Прощение". Мелодрама
01.45 "Мэрия". Драма
04.05 "Крещендо"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Главный герой представляет: заклятые враги"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Семин". "Торговцы жизнью", 1-я и 2-я серия. Сериал
22.250 "НТВишники. Интернет"
23.20 "Гены против нас". Научный детектив Павла Лобкова
00.30 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
01.20 "Сталин. Live"
02.15 "Кожаное лицо: Техасская резня бензопилой-3". Фильм ужасов
03.50 "Парни из стали"
04.45 "2,5 человека"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Артылыш"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.10 "Фильм-детям"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.10 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 "Урал-батыр". Видеофильм**
**16.40 Мультфильм**
**17.10 "Виктория"**
**17.50 "Йома"**
**18.20 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Парламентский вестник"**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.20 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 10 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Гора самоцветов". Мультипликационный проект
06.40 "Много шума из ничего"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Моя родословная. Юлия Ковальчук"
12.20 "Охота на привидения"
13.20 "Сезон охоты". Полнометражный мультипликационный фильм
14.50 "Одиноким предоставляется общежитие". Лирическая комедия
16.30 "Жизнь после нас"
18.00 "Кто хочет стать миллионером?"
19.00 "Цирк со звездами"
21.00 "Время"
21.15 "Большая разница. Лучшее"
22.30 "Ангелы Чарли". Комедия
00.30 Чемпионат мира по футболу-2010. Матч за 3-е место. Прямой эфир из ЮАР
02.20 "Закат". Боевик
04.20 "Дурнушка". Сериал

### РОССИЯ 1

05.55 "На чужом празднике"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Субботник"
09.00 "Остров ошибок"
09.30 "Путешествие пингвиненка Джаспера". Полнометражный мультфильм
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Качество жизни"
11.45 "Дела и люди"
11.55 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Парни из нашего "Городка"
15.25 "Перехват". Приключения
17.10 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
18.05 "Субботний вечер"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Славянский базар в Витебске"
22.35 "Красный лотос". Криминальная драма
00.25 "Божественные тайны сестричек я-я". Комедия
02.45 "Из вечности". Драма
04.50 "Парни из нашего "Городка"

### НТВ

05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Лучший город земли. Москва безбожная"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Очная ставка"
17.05 "Преступление будет раскрыто". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Самые громкие русские сенсации: звезды против черной магии. Книга судеб"
21.10 "Ты не поверишь!"
22.00 "Подводные камни". Детектив
23.50 Легенды видео". "Полицейская академия". Комедия
01.50 "Нападение на королеву"
03.55 "Парни из стали". Сериал
04.55 "2,5 человека"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.00 "Доброе утро!"**
**08.40 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**09.50 "Ребятам о зверятах"**
**10.20 "Советы садоводам"**
**10.50 "Волшебный курай"**
**11.30 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"**
**12.10 Т. Гарипова. "Песнь во сне". Спектакль Сибайского башкирского государственного театра драмы им. А. Мубарякова**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40 Мультсериал**
**15.10 "Дарю песню"**
**16.10 Гала-концерт XVI Международного фестиваля им. Р. Нуреева. I отделение**
**17.00 "Узаман". М. Аминев**
**17.40 "Война нас не считала за детей"**
**18.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Аркаим". Интеллектуальный клуб**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.40 "Етеген"**
**23.20 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 11 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Под маской беркута"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.10 "Фазенда"
12.40 "Эммануил Виторган. Встреча со зрителями"
14.00 "КВН". Премьер-лига
15.40 "Лучшие песни"
17.30 "Константин Райкин. Театр строгого режима"
18.30 "Маска Зорро". Приключения
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Песни для Аллы"
00.00 "Тройной форсаж: Токийский дрифт". Боевик
02.00 "Какими мы были". Мелодрама
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.45 "Аленький цветочек", "Бобик в гостях у Барбоса"
06.35 "Горожане". Мелодрама
08.15 "Корона Российской империи или снова неуловимые". Приключения
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "Неподдающиеся". Комедия
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Честный детектив"
15.00 "Экстрасенс смеха. Семен Альтов"
15.55 "Смеяться разрешается"
18.00 "Третий лишний". Триллер
20.00 "Вести недели"
21.15 "Стритрейсеры". Боевик
23.15 Чемпионат мира по футболу. Лучшее
00.00 Футбол. Чемпионат мира. Финал. Прямая трансляция из ЮАР
02.50 "Славянский базар-2010"
04.00 "Экстрасенс смеха. Семен Альтов"

### НТВ

05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая кровь"
11.00 "Кремлевские жены. Полина Молотова. Жемчужина в железной оправе"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Телохранитель". Боевик
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "И снова здравствуйте!"
17.05 "Преступление будет раскрыто"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.25 "Чистосердечное признание"
19.55 "Дорожный патруль". Сериал
00.00 "Футбольная ночь"
00.35 "Брачный контракт". Сериал
02.35 "Поймать и посадить"
04.15 "Парни из стали"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.00 "Для вас, ветераны!"**
**08.40 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.00 "Ребятам о зверятах"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.00 "Байтус"**
**12.50 "Телекомпас"**
**13.20 "Гала-концерт XVI Международного фестиваля им. Р. Нуреева. II отделение**
**14.10 "Книжный дом"**
**14.30 "Дарю песню"**
**15.30 "Салям"**
**15.50 Мультсериал**
**16.20 "Измени жизнь"**
**16.40 "Дарю песню"**
**17.40 "В центре внимания"**
**18.00 "Байык"**
**18.50 Первенство России по футболу. Второй дивизион. "БИС-Динамо" (Уфа) - "Академия" (Тольятти). Прямая трансляция**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.40 Погода**
**22.40 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

✓ *Иртәнге һәм төшкө аш алдынан көнөнә 2 тапҡыр 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Курс - 2 аҙна. Һарҡындыны даими эсеү иҫерткес эсемлектәргә ерәнеү тойғоһо уята.*



ЙӘШЕЛ ДАУА

# АНДЫҪ БАР ЕРҘӘ...

## ат үлмәҫ



### ҺАРЫ МӘТРҮШКӘ

Һары мәтрүшкә төрлө сирҙәргә ҡаршы дауа булһа ла, беҙ уны тулыһынса өйрәнеп бөтмәгәнбеҙ әле. Һары мәтрүшкә бауыр һәм ашҡаҙан шешкәндә, тире яман шеше ваҡытында ҡулланыла. Ул бигерәк тә аш һеңдереү ағзалары сире - гастрит, колит (йыуан эсәк ауырыуы), ашҡаҙандың сей яраһы һәм бөйән эсәге ауырыған ваҡытта, эс киткәндә, шулай уҡ бауыр ауырыуынан, балаяткынан ҡан китеүҙән ярҙам итә. Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары булғанда йөрәк мускулдарын нығыта, эндокардит, миокардиттан файҙалы. Невралгия, паралич, эпилепсия ваҡытында нервы системаһы ҡаҡшағанда тынысландыра. Уның тәьҫирен простата биҙе шешкәндә, импотенция ваҡытында тойорға мөмкин. Яңы үләндән һығып алынған һуты төнәтмәһенә ҡарағанда ике тапҡырға күберәк файҙалы матдәләргә эйә.

Һары мәтрүшкә майы ҡиммәтле файҙалы көскә эйә. Уны әҙерләү өсөн йәш үләнде (600 мл үҫемлек майына 100 г үлән) 30 минут ҡайнатырға кәрәк. Ә спирт төнәтмәһе өсөн өс литрлыҡ банканы сәскәле үлән менән тултырырға, өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойорға һәм ҡапҡаслап, ҡараңғы урынға ҡуйырға кәрәк. Көн һайын һелкетеп торорға. Бер ай төнәтергә.

**Нейроревматизм.** 50 тамсы төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә. Үләнде берәй аҙнанан юшан, яран үләне, бысағүләндән эшләнгән төнәтмәләргә алмаштырырға мөмкин.

**Баш йәрәхәте.** 1 балғалаҡ һары мәтрүшкә майын көнөнә 2-3 тапҡыр ашар алдынан ҡабул итергә.

**Аденоидтар.** Һары мәтрүшкә үләнен порошок итеп иҙергә, иләктән үткәрергә. Порошоктың бер өлөшөнә аҡ май өҫтәргә. Был ҡатышмаға 5 тамсы сөйәл үләне һутын тамыҙырға һәм эмульсия барлыҡҡа килгәнсе һелкетергә кәрәк. Көнөнә 3-4 тапҡыр танауға тамыҙырға.

**Алкоголизм.** 2 ҡалаҡ ҡоро мәтрүшкәне 250 мл ҡайнаған һыуға һалырға, һауытты һыу быуында 20-30 минут торорға. Һыуынғас, һарҡытырға. Иртәнге һәм төшкө аш алдынан көнөнә 2 тапҡыр 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Курс - 2 аҙна. Һарҡындыны даими эсеү иҫерткес эсемлектәргә ерәнеү тойғоһо уята.

**Тәмәке тартыу.** Тәмәке тартыусыларға ошондай төнәтмә эйәрә мөмкин: 8 ҡалаҡ ҡоро үләнде 0,5 л һыуға һалырға, 10 көнгә төнәтерә ҡуйырға. Ашағандан һуң көнөнә 3 тапҡыр 40-50 тамсы ҡабул итергә.

**Ала ауырыуы (витилиго).** Ике балғалаҡ ҡоро һары мәтрүшкәне бер стакан һыуға һалырға, ҡапҡаслап 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ҡабул итергә. Шул уҡ ваҡытта һары мәтрүшкә майын аҡ таптарға һөртөргә була.

**Трофик шешектәр.** Шешектәр өҫтөнә һары мәтрүшкә майына манылған тампондарҙы даими рәүештә һалырға һәм бинт менән урап ҡуйырға.

**Һөт биҙе яман шеше.** Көн һайын 2-3 тапҡыр һары мәтрүшкә төнәтмәһе менән 20-30 минут сылатып ябып ҡуйырға.

**Тиреләге яман шеш.** Яраланған урындарға һары мәтрүшкә майы төнәтмәһе менән аппликация эшләргә.

Һары мәтрүшкәне йөклө ҡатындарға ҡулланырға ярамай. Ғөмүмән, уны кәрәгенән артыҡ ҡулланыу баш ауырыуҙарына килтерергә мөмкин. Тағы ла уны гипертония ваҡытында ҡулланыу тыйыла. Аминокислота, триктофан менән тирозин, амфетаминдарҙы һары мәтрүшкә менән бергә ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ уны һыра, ҡәһүә, шарап, шоколад, йогурттар менән дә берләштереү тыйыла.



### ЙӨКӘ

Заман медицинаһында йөкә төнәтмәһен һәм һарҡындыһын халҡын тейҙергәндә тирләткес һәм температура төшөргөс сифатында ҡулланалар, шулай уҡ һыуыҡ үткәндә ауыҙҙы һәм тамаҡты сайҡаталар, ҡайһы саҡта гастрит ваҡытында төнәтмәһен эсәләр.

Халыҡ медицинаһында йөкә сәскәһе баш, тамаҡ ауыртҡанда, ҡан аҡҡанда, пневмония, астма, ревматизм, паротит, нефрит, түлһеҙлек, невроз, эпилепсия булғанда, тартышҡанда ҡулланыла. Яңы сыҡҡан бөрөләрен һәм япраҡтарын тире яман шеше булғанда ҡулланалар. Йөкә дегете менән экзема, фурункул, тире яман шешен, эренле шеште дауалайҙар.

**Күрем циклы боҙолғанда.** Әгәр уның ритмы боҙолһа, иң яҡшы эсул - йөкә сәскәһе менән сәй эсеү. Иҙелгән сәскәләрҙе ҡайнаған һыуға һалып, ярты сәғәт төнәтергә. Йылы килеш иртәнсәк 1 стакан йәки көндөҙ яртышар стаканлап 2 тапҡыр эсергә.

**Климакс.** Йөкәлә ҡатын-ҡыҙ енес гормондарына яҡын фитогормондар бар. 45 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙарға ярты йыл һайын ай буйына йөкә сәйе эсергә кәңәш ителә. Был осраҡта уларға климакстан ҡурҡмаһалар ҙа була, ул һуңғараҡ башланасаҡ һәм ауыртыныуһыҙ, ҡан ағыуһыҙ буласаҡ.

Шулай ҙа йөкә сәйен йыш эсергә ярамай, сөнки күҙҙең күреү һәләте кәмеүе мөмкин. Шуға күрә уны дауаланыу ваҡытында ғына эсергә кәңәш ителә.



### АНДЫҪ

Был бөтә сирҙәргә лә тиерлек дауалаусы иң билдәле шифалы үлән. Төрлө ерҙә урынлашҡан яман шештән бигерәк тә файҙалы. 200 г ҡоро тамырҙы алып, яҡшылап иҙергә, килеп сыҡҡан иҙмәне 500 г яңы бал менән бутарға. Бер тәүлек төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 1 ҡалаҡлап ҡулланырға.

**Туберкулез.** Яңы ҡаҙып алынған тамырҙан 2 стакан шыйыҡ бутҡа эшләргә, 0,5 л араҡы ҡойорға. 10 көн төнәтергә. 2-3 ай дауамында ашар алдынан бутҡа менән бергә 1 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Аллергия** (һыуыҡ, медикаментоз, аҙыҡ аллергияһы). Андыҫ, ҡурйын үләне һәм бесәй тырнағы тамырын тигеҙ нисбәттә алып бутарға. 2 стакан һыуыҡ һыуға 2 балғалаҡ ҡатышманы һалырға, ҡапҡас менән ябырға һәм 8-10 сәғәт төнәтергә (төнгөләккә ҡалдырырға). Стакандың 1/3 өлөшөн әҙерәк йылытып эсергә (бал ҡушырға мөмкин).

**Нейроинфекция.** 0,5 л һыуға 1 ҡалаҡ андыҫ тамыры, бабасыр уты һәм меңъяпраҡ алырға. 10 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 2-4 тапҡыр ашар алдынан 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

ИҒТИБАР!

**Социаль торлаҡ ипотека кредитлау ҡала программаһында ҡатнашыусылар иғтибарына!**

Социаль торлаҡ ипотека кредитлау ҡала программаһында ҡатнашыусыларға Башҡортостан Республикаһы Өфө районы Дмитриевка ҡасабаһының Тракт урамындағы биш ҡатлы торлаҡ йортта өс бүлмәле фатирҙар һатып алырға тәҡдим ителә. Фатирҙарҙың дөйөм майҙаны - 81,5 һәм 84 кв. м. 1 кв. м. хаҡы - 20 322 һум. Йорт 2010 йылдың 30 сентябрендә файҙаланыуға тапшырыла.

* * *

Шулай уҡ социаль торлаҡ ипотека кредитлау ҡала программаһында ҡатнашыусыларға Өфө ҡалаһы Калинин районының "Калининский-2" (Орджоникидзе урамы) микрорайонында урынлашҡан төҙөлә башлаған 1А һанлы торлаҡ йортта фатирҙар һатып алырға тәҡдим ителә. Урынлашыу осоро - 2011 йылдың феврале. 1 кв. м. хаҡы - 27800 һум. Ипотека кредиты Рәсәй Һаҡлыҡ банкыһының Башҡортостан бүлексәһе тарафынан бирелә.

Фатирҙар һатып алыу мәсьәләһе буйынса Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡала округы хакимиәтенең торлаҡты иҫәпкә алыу һәм бүлеп биреү бүлегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## *КОТЛАЙБЫҘ!*



Ишембай районының Ҡанаҡай ауылында йәшәүсе апайыбыҙ

**Рәхимова Фәниә Мөхәмәтғәрәй ҡыҙын**

65 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ. Донъябыҙҙы түнәрәк итеп, туғандарҙың таянысы булып, бәхет-шатлыҡтарға сорналып, иҫәнлектә оҙон-оҙаҡ йылдар йәшәүеңде теләйбеҙ. Изгелектәр яуһын һинә таулай булып, рәхмәттәр алып, үҙең рәхмәтле булып, күңел тыныслыҡтарына ирешеп йәшә!

**Изге теләктәр менән барлыҡ туғандарың.**

* * *

Һуңлап булһа ла, үтәргә тейешле эште үтә, тигәнерәк аҡылы бар халҡыбыҙҙың. Мәшәҡәттәр менән булып, июндә тыуған көндәре булған уҡыусыларыбыҙҙы ҡотларға онота яҙғанбыҙ. Һуңлап булһа ла, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Әнүәрә Хәйбуллинаны, Ишҡол ауылынан Ринат Муллахмәтовты, **Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Гәйнуллинаны, **Ишембай районы** Ҡанаҡай ауылынан Зөлфиә Баймөхәмәтованы, **Ишембай ҡалаһынан** Мәхмүт Килдебаевты, **Учалы районы** Сораман ауылынан Шәриф Ҡотоевты, **Учалы ҡалаһынан** Зөлифә Төхвәтуллинаны, **Мәләүез районы** Иштуған ауылынан Т. Хәмзинды, **Ғафури районы** Сәйетбаба ауылынан Миңлесур Түзбәковаы, Бурлы ауылынан Светлана Ғәлиәхмәтованы, Еҙем-Ҡаран ауылынан Фирүзә Рәмиеваны, Туғай ауылынан М. Түзбәкованы, **Баймаҡ районы** Янғаҙы ауылынан Гөлшат Аслаеваны, **Белорет районы** Инйәр ҡасабаһынан Вил Солтановты, **Йәрмәкәй районы** Тарҡаҙы ауылынан Э. Минязованы, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Сәләх Әхмәтовты, **Сибай ҡалаһынан** Мәүлетдин Хәсәновты, **Хәйбулла районы** Бакал ауылынан Айҙар һәм Руслан Иҫәнъюловтарҙы, Яковлевка ауылынан Фәрзиә Сынбулатованы, **Бөрйән районы** Байназар ауылынан Гүзәл Ғәлинаны, **Федоровка районы** Златоустовка ауылынан С. Сураҡаеваны, Юлдаш ауылынан Гөлсәсәк Атйетәрованы, Иҫке Ҡалҡаш ауылынан Гөлнара һәм Ынйы Ҡотлошиналарҙы, **Ауырғазы районы** Талбазы ауылынан Фәүзиә Юламанованы, Ишле ауылынан Гөлсирә Хәмиҙуллинаны тыуған көндәре менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм ҡаҡшамаҫ сәләмәтлек, бәхет, уңыштар, оло сабырлыҡ теләйбеҙ. Һәр көнөгөҙ ҡояшлы, мөхәббәтле, яҡты булһын, йөҙөгөҙҙән һис ҡасан да бәхетле йылмайыу китмәһен.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ИҒЛАН

**Баймаҡ интернат-мәктәбен 1970 йылда тамамлаусылар иғтибарына!**

Баймаҡ интернат-мәктәбен 1970 йылда тамамлаусы 10 "А" һәм 10"Б" класс уҡыусыларын осрашыуға саҡырабыҙ. Осрашыу 2010 йылдың 10 июлендә иртәнге сәғәт 9 -ҙа башлана.

* * *

**10 июль** Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылының мәктәбен 2000 йылда тамамлаусы уҡыусыларҙың **йәйге осрашыуы** үтәсәк. **9 июль 15.00 сәғәттә** мәктәп эргәһендә һөйләшеү буласаҡ.

✓ *Малай китаптың тәүге һөйләмен уҡый: "Бер кемгә лә асыуланма һәм үпкәләмә, түҙем һәм тыныс бул - шул саҡта барыһы ла үтеп китер". Шул саҡ тикшереүсегә оят булып китә һәм ул малайҙан ғәфү үтенә.*



БАЛАҢА УҠЫ!

# СӘПӘКӘЙЛӘП ШАТЛАНА

## минең кескәй ул ғынам



### Йоҡлатҡанда

Бәү-бәү итә бәләкәсем -
Үҫеүгә көстәр йыя.
Илем өсөн үҫәм, тиеп,
Оло маҡсаттар ҡуя.

Әлли-бәлли, бәләкәсем,
Йоҡлап ҡына китер ул.
Салауаттай батыр булып,
Үҫеп кенә етер ул.

Йоҡла-йоҡла, йом күҙенде -
Килде йоҡо сәғәтен.
Ваҡытында эште эшләү -
Булыр һинең ғәҙәтен.

Йоҡла-йоҡла-йоҡла, балам,
Матур төштәрҙе һин күр.
Йәшел болондарҙа йөрө,
Сәскәле баҡсалар күр.

Бишегенде мин бәүелтәм,
Һин йоҡларға ятҡанда.
Фәрештәләр һине һаҡлай
Һин татлы йоҡлағанда.

Татлы йоҡла, балаҡайым,
Еребеҙ тыныс әле.
Гөл-баҡсалай илебеҙ бит -
Бөтмәһен уның йәме.

Йоҡла, балам, тыныс йоҡла -
Ағайың тора һаҡта.
Һинең матур үҫеүенде
Ул һорап яҙа хатҡа.

Әлли-бәлли, йоҡла, балам,
Йоҡлай урман, яландар.
Сәскәләр ҙә күҙен йомған -
Йоҡлай йәшел болондар.

Әлли-бәлли, бәләкәсем,
Йоҡлай кәзә-һарыҡтар.
Йылғаларҙа, яр ситендә
Тынысланған балыҡтар.

Әлли-бәлли, әлли-бәлли,
Йоҡлап алсы, бәпесем.
Йоҡлағанда ҙур үҫерһең,
Һин минең бәләкәсем.

Әлли-бәлли, тип бәүелтәм
Бишектәге сабыйҙы.
Үҫеп еткәс, ҡәҙерләрһең
Өләсәй, олатайҙы.

Әлли генә итәйек,
Бәлли генә итәйек.
Һау-сәләмәт үҫеү өсөн
Йоҡлап ҡына китәйек.

### Атлап киткәндә

Атла-атла, алға атла -
Аяҡтарың нығыныһын.
Тәүге аҙым бик ауырҙыр -
Аҙымдар изге булһын.

Атла-атла, йүгереп кит -
Үҫеп еттең бит инде.
Һинең өсөн, бәләкәсем,
Матур замана килде.

Тәгәрмәсле арба менән
Атлауы һинә ҡулай.
Яйлап-яйлап, ашыҡмайса,
Атлап китерһең шулай.

Атла-атла, бәләкәсем,
Аҙымдарың бик матур.
Арып китһәң, аптырама,
Әсәнә тотоноп тор.

Ныҡ-ныҡ баҫып атла, балам,
Аяҡтарың нығыныр.
Ерҙә ныҡлы баҫып торһаң,
Илем һинә таяныр.

Атла, атла, алға атла,
Бул атаңа һин терәк.
Ҡыйыу булып үҫһәң әгәр,
Илең өсөн бик кәрәк.

Ниндәй ҡыйыу аҙымдарың -
Тып-тып килә баҫҡанда.
Йөҙөң балҡый ҡояш кеүек
Дәртләнеп атлағанда.

Атла-атла, нығыраҡ баҫ,
Аяғында көстәр бар.
Ерҙә ныҡлы баҫып торһаң,
Киләсәккә өмөт бар.

### Йыуындырғанда

Тәс-тәс итә, рәхәтләнә
Һыулы таста сабыйым.
Ҡара бөҙрә сәскәйҙәрен
Һөйөп-һөйөп тарайым.

Һыу ярата бәпескәйем,
Тәс-тәс итәм, ти, көн дә.
Ҡараҫҡылар сыға бара,
Таҙарып ҡала тән дә.

Тәс-тәс итә минең ҡыҙым,
Түгеп бөтә һыуҙарҙы.
Һыуға сумыра-сумыра
Йыуа уйынсыҡтарҙы.

Әсә йыуа баланы,
Бала йыуа ҡурсаҡты.
Ниндәй матур булдыҡ, тип,
Үҙе ҡулдарын сапты.

Ҡулды һабынлап йыуһаҡ,
Булыр ул таҙа, ап-аҡ.
Микробтары бөтөрҙәр,
Һине таҙа, тиерҙәр.

Ашап туйғас Әлфиә
Щеткалап тешен йыуа, -
Һау-сәләмәт тештәрҙән
Ул микробтарҙы ҡыуа.

Иртән торғас, матурлап
Битен йыуа Фәриҙә.
Таҙалыҡҡа яратҡанға
Маҡтайҙар уны өйҙә.

Щетка, һабын, порошок
Көн дә кәрәк кешегә.
Гигиена матур гәҙәт -
Ғүмер өҫтәр йәшәүгә.

Өләсәй саба ейәнен,
Уҡып доға һүҙҙәрен,
Тәндәренән алып ташлай
Кешенең яман күҙҙәрен.

Һыу ярата сабыйҙар,
Һыуҙа сума өйрәктәр.
Һыуҙан һис тә ярға сыҡмай
Йылғалағы балыҡтар.

Ҡыҙҙар ҡыуа тырышып
Һыу буйына ҡаҙҙарҙы.
Ҡаҙҙар инә һыуҙарҙы
Һөйөндөрөп ҡыҙҙарҙы.

Икмәк тотоп ашағанда
Таҙа булһын ҡулдарың.
Ошо изге һүҙҙәремде
Онотмағыҙ, улдарым.

**Роза ҒӘББӘСОВА.**
**(Башы 26-сы һанда).**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## ҺОРНАЙҒАН...

### йәки оҙонайған

Өфөнән каникулға ҡайтһаҡ, Гөльямал инәй килеп етә торғайны ла: "Кандай һорнайған, арҡағыҙҙан һөмбөлдәтеп ҡағайым әле", - тиер ине. Инәйҙең "кандай һорнайған" тигәне "ҡайһылай ҙурайған" тигән мәғәнәлә, йәғни һорнай - оҙон музыка ҡоралы, шуның кеүек оҙонайған тигәнде аңлата. "Һөмбөлдәтеп ҡағайым" тигәне гәпөлдәтеп яратайым тигән һүҙ.

Әсәйем телмәрендә "ыйыҡ, майырыҡ" тигән һүҙҙәр була торғайны: "Иркәләй торғас, Нәзифәнең Фәғиләһе ыйыҡ ҡына, майырыҡ булып үҫеп килә". Бында ыйыҡ, майырыҡ тигән һүҙҙәр "битараф, эшкә рәтһеҙ, йомшаҡ" тигәнде аңлата.

"Ҡылансыҡ" тигән һүҙҙе ауылда "быйтыс" тиерҙәр ине. Әсәйемдән: "Шәрифәнең ҡыҙҙары әй быйтыстар ҙа инде" тигәне хәтерҙә ҡалған.

**Әнүрә ӘБЙӘЛИЛОВА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН

### Ҡара икмәктән кеүәҫ

Бер арыш икмәген йәки яртылаш бойҙай ҡушылғанын ҙур телемдәргә телеп, бик әҙе духовкала тотоп алырға. Телемдәрҙең тышы ҡатып, эсе йомшаҡ ҡалырға тейеш. Икмәк көйөп тә китмәһен, юғиһә, кеүәҫ тәмһеҙ була. Биш литрлы ағас йәки эмаль һауытҡа икмәкте һалғас, һауыттың ситенән генә тулы итмәйенсә ҡайнар һыу ҡойорға һәм ярты стакан шәкәр ҡушырға ла, һыу йылымыс булғансы, һауытты ултыртып торорға. Һуңынан 4-5 балғалаҡ әҙер кеүәҫ ҡуры һалырға (киптерелгәне лә ярай). Кеүәҫ өй температураһында 2-3 көндә, эҫе йәй көнө 1 тәүлектә әсей. Һөҙөгөндән һуң эсергә ярай. Һауытта ҡалған икмәк киҫәктәренә тағы ла ҡайнатып һыуытылған һыу һәм ярты стакан шәкәр өҫтәп торһаң, бер нисә тапҡырға етә.

### Кәбеҫтәнән кәтлиттәр

Ярты кило кәбеҫтәне ваҡ итеп турап, кәстрүлгә һалырға ла, ярты стакан һыу, 1 ҡалаҡ үҫемлек майы ҡушып, быҡтырырға. Әҙер булырға 10-15 минут ҡалғас, әҙләп кенә болғатаболғата манный ярмаһы ҡушып бешерергә. Тоҙлап, һыуытҡас, кәтлиттәр эшләп, сохари онтағында әүәләргә лә, майҙа ҡурып алырға.

### Ҡуҙғалаҡ ашы

Ит бешеп сыҡҡан һурпала картуф бешереп алғас, бешереп иҙелгән ҡуҙғалаҡты, төмләткестәрҙе, ҡыҙҙырылған һуғанды ҡушып, 1-2 минут ҡайнатырға. Өҫтәлгә ҡаймаҡ менән бирергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЕЛЕҢ БАУҘА БУЛҺА...

## башың һау булыр.

Донъяла таш ҡаты, ташты иретер аш ҡаты.

Ике килен бешергән аш йә гел тоҙ булыр, йә гел тоҙһоҙ булыр.

Ямanды ашҡа саҡырма, эшкә саҡыр.

Аҡыллы һүҙен һөйләгәндә, ашар ашың онотолор.

Ағай-эне татыу булһа, менергә ат етә, килендәштәр татыу булһа, ашарға аш етә.

Йыландың ҡойроғона баҫ, түрәнең бойороғонан ҡас.

Баҫымсаҡты баҫмалатҡан күп булыр.

Кейәүең ҡыуалаһа - ишек бауы тот, улың ҡыуалаһа - түргә менеп ултыр.

Оло аҡыл - муйынға бау, бәләкәй аҡыл -аяҡҡа быуау.

Эт батырға өрөр, ҡурҡаҡты тешләр.

Ул тыуһа - тыу бәйлә, ҡыҙ тыуһа - бау бәйлә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юдхиштра тигән бер батша бала сағында дини мәктәптә уҡый. Бер саҡ уларҙың мәктәбенә тикшереүсе килә. Ул иң тәүҙә балаларҙың белем кимәлен тикшерергә була һәм уларҙың һәр береһен алдына баҫтырып, белгәндәрен һөйләп күрһәтергә ҡуша. Сират Юдхиштраға еткәс, ул тыныс ҡына: "Мин алфавитты ятланым һәм әлифбаның тәүге һөйләмен беләм", - ти. Тикшереүсе асыулана һәм ҡыҫҡыра башлай:"Нисек инде шул тиклем ваҡыт уҡып, бер генә һөйләм белергә була!" Малай бер аҙ уйлап тора ла, былай ти: "Бәлки, икенсе һөйләмде лә беләмдер...". Тикшереүсе тағы ла туҙынып китә һәм буласаҡ батшаға яза бирергә ҡарар итә. Сыбыҡ алып, үҙе үк уны сыбыҡ менән һуҡтыра башлай. Ауыртыныуға ҡарамаҫтан, малай түҙә, үҙе йылмайырға тырыша. Малайҙың йылмайыуын күреп, тикшереүсе уны туҡмауҙан туҡтай: "Был малай, ысынлап та, батша булып китһә, минең үҙемде үлтерергә лә мөмкин бит..." тип уйлана төшә. Шул саҡ ул малай алдында асыҡ килеш ятҡан китапты күрә һәм ундағы тәүге һөйләмде уҡый: "Бер кемгә лә асыуланма һәм үпкәләмә, түҙем һәм тыныс бул - шул саҡта барыһы ла үтеп китер". Шул саҡ тикшереүсегә оят булып китә һәм ул малайҙан ғәфү үтенә. Юдхиштра уға шулай ти: "Ғәфү үтенергә кәрәкмәй, сөнки һин мине туҡмаған саҡта мин һинә үпкәле инем, тимәк, мин хатта әлифбаның беренсе һөйләмен дә аңламаған булғанмын..." Шул саҡ тикшереүсе китаптағы икенсе һөйләмгә күҙ ташлай. Унда шулай тип яҙылған була: "Һәр ваҡыт дөрөҫтө һөйлә, дөрөҫтән башҡа бер нәмә лә һөйләмә..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6007
Заказ 2599